*Ҡурҡып йүгергәндә күргән дошман һине тағы ла нығырaҡ эҙәрлеклəйəсəк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла нығараҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк.*

*(М. Монтень).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№2 (524)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һин дә мулла, мин дә мулла...**

**атҡа бесән кем һала?**



**4-5**

**Етәкләшеп ҡояш оҙаттыҡ...**

**Салауат күперенә лә ағайым етәкләп алып килде**



**8-9**

**Уң ҡулы - башҡорт йырына,**

**һул ҡулы башҡорт бейеүенә таянған**



**11**

**Хирургка эләгеү...**

**терапевт кабинеты аша**



**12**

**14 ТВ-программа**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Теләк теләгәндә, котлағанда кешеләр бер-береһенә уңыш теләй. Ә нимә һуң ул уңыш? Уға өлгәшеү өсөн нимә эшләргә?

***Фирҙәүес ӘЙЮПОВА, селтәрле бизнес менән шөғөлләнеүсе:*** Матди яҡтан бай булырға теләгән кеше аҡса эшләй, уңышлы булырға ынтылыусы үҙ-үҙен үҫтерә, бар йәһәттән дә камиллашыуға ынтыла. Мин, мәҫәлән, уңышҡа өлгәшеү өсөн үҙ өҫтөмдә туҡтауһыҙ эшләйем: китаптар уҡыйым, төрлө семинар һәм тренингтарға йөрөйем, уңышҡа өлгәшеү серҙәрен асыуҙа ярҙам итерҙәй аудиояҙмалар тыңлайым. Шулай уҡ тирә-яҡтағылар менән яҡшы мөғәмәләлә булыу хаҡында ла онотмайым, сөнки ипле, мәҙәниәтле итеп аралаша белеү ҙә уңышҡа өлгәшеүҙең бер сараһы.

Уңыш минә тулҡын рәүешле булып күҙ алдыма баҫа. Тулҡын өҫкә күтәрелгәндә кешегә уңыш йылмая, аҫҡа тәгәрәгәндә ул уңышһыҙлыҡ упҡынына сума. Тормошта ошо тулҡын ыңғайына йәшәү һәм уның төрлө тирбәлеүҙәрен ҡабул итергә өйрәнеү мөһим. Тулҡын өҫкә ҡалҡытҡанда артыҡ кәперәнмәҫкә, маһаймаҫҡа, сикһеҙ шатланмаҫҡа, ә аҫҡа төшөргәндә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә, үтә ныҡ ҡайғырмаҫҡа кәрәк. Ғөмүмән, һәр осраҡта ла сама хаҡында онотмау, алтын урталыҡты таба белеү мөһим.

Нисек кенә теләһәң дә, уңыш үҙенән-үҙе килмәй, бының өсөн көс түгергә, эшләргә, бер урында тапанмаҫҡа кәрәк. Быны Япония, Ҡытайҙа бамбук үҫтереүсе фермерҙар миҫалында асыҡ күрергә була. Улар бамбуктың шытып сығамы-юҡмы икәнлеген белмәйенсә, ете йыл буйы көн һайын һыу һибә, ерҙе эшкәртә, тәрбиәләй. Ете йылдан һуң ғына бамбук ҡалҡып сыға һәм бер йыл эсендә ҡырҡып һатырға яраҡлы булып үҫә. Ләкин бамбук шытып сыҡмаҫҡа ла мөмкин һәм ете йыл тир түгеү бушҡа булыуы ла бар. Үҫтереүселәр был хаҡта белә, әммә һыу һибеүҙе дауам итә...

***Линиза СӘҒӘҘИЕВА, Әбйәлил районы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге етәксеһе:*** Уңыштың тик тырыштарға ғына йылмая торған бәхет икәнен яҡшы беләм. Уңышлы булып тыумайҙар, ә уны яулап алалар. Һәм күпселек осраҡта уңыш яулау көндәргә, йылдарға ғына түгел, ә ғүмер буйына ла һуҙылырға мөмкин. Кемдер маҡсатынан ситләшмәйенсә, ныҡышмалы рәүештә алға бара һәм уңышҡа өлгәшә, ә башҡа берәү ауырлыҡтарға бирешеп, юлында барлыҡҡа килгән кәртәләрҙе емереп үтергә үҙендә көс тапмай һәм уңышһыҙлыҡ ҡапҡанына барып эләгә. Тәүгеләр рәтендә булғандар ниндәй сифаттарға эйә һуң? Тәү сиратта, улар дан-шөһрәт, билдәлелек ярата. Улар һәр ваҡыт үҙҙәрен көслө, теләгәнен тормошҡа ашыра алырлыҡ һәләткә эйә итеп күрә һәм башҡаларҙы ла шуға ышандыра. Бындай кешеләр һәр саҡ башлаған эшен аҙағына тиклем еткерә. Был осраҡта уларға эшләү өсөн киткән ваҡыт түгел, ә һуңғы һөҙөмтә мөһим. Уңышлы кешеләр - ҡыйыуҙар. Улар күп кешене тотоп торған, уңыштың төп дошмандары булған ҡурҡыу һәм шикләнеүҙе юҡ итеү - уңышҡа илтеүсе юл икәнен яҡшы аңлай. Уңышҡа өлгәшеүселәр бер ҡасан да яуаплылыҡ хаҡында онотмай. Ундайҙарҙың һәр аҙымы, яҙмышы, башҡарған эше, әйткән һүҙе, хатта хис-тойғолары яуаплылыҡ иләге аша үткәрелә. "Уңыш" тип аталған бейеклекте яуларға ынтылыусы һәр ваҡыт нимәлер өйрәнә, уҡый, аралаша, ғөмүмән, ул мәңгелек уҡыусы. Уңышлы булыуҙың тағы бер сере - профессионаллек. Ниндәй генә эшкә тотонмаһын, уңышлы кеше уны юғары кимәлдә башҡара. Бер хәлдә лә күҙ уңынан ысҡындырмайынса, һәр осрашыуға һәм эшлекле һөйләшеүгә ныҡлы әҙерләнеү, һәр әйткән һүҙен инҡар итмәҫлек факттар менән йөпләп ҡуйыу, креативлыҡ һәм аралашыусанлыҡ, ваҡытты дөрөҫ ҡуллана белеү - шулай уҡ уңышлы кешене билдәләүсе сифаттар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҢЫ ЗАКОНДАР



# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘ ЯҠЛАНА!

**Былтырғы йылдың һуңғы көндәрендә РФ Президенты Владимир Путин ошо йылдың 1 ғинуарынан көсөнә ингән байтаҡ ҡына закондарға ҡул ҡуйҙы. Шулар араһында йәмғәтселектә бик күп бәхәстәр тыуҙырғаны, әлбиттә, "Дима Яковлев" исемен алған закон булды.**

Унда РФ граждандарына ҡаршы енәйәттәрҙә ғәйепләнеүселәргә ҡарата санкциялар билдәләнә, шулай уҡ американдарға Рәсәйҙәге етем балаларҙы уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алыу тыйыла. Был темаға һәм бигерәк тә әлеге законға ҡаршы донъяһын онотоп, төкөрөк сәсеп бәхәсләшеүселәргә В.Путиндың: "Донъяла йәшәү кимәле беҙҙекенә ҡарағанда яҡшыраҡ урындар күптер ул, моғайын да. Шулай булһа һуң, хәҙер беҙ бөтә балаларҙы ла шунда ебәрәйекме? Бәлки, үҙебеҙ ҙә шунда китербеҙ?" тигән һүҙҙәре айыҡтырғыс тәьҫир итте - һәр йөйҙән сөй эҙләүсе "хәҡиҡәт һаҡсылары" телдәрен тешләргә мәжбүр булды. Ысынлап та, үҙ иңендәге йөктө сит елкәгә ауҙарыуы еңел дә һәм, һәр кем ризалашыр: оят та. Ил намыҫын, борондан килгән илһөйәрлек традицияларын тергеҙеү хаҡында һүҙ барғанда, ил етәксеһе ни йөҙө менән үҙ илебеҙҙең яҡлауға, һаҡлауға мохтаж кескәй граждандарын күрәләтә ситтәр ҡулына тоттороп ебәреүгә юл ҡуя алыр ине һуң?

**(Дауамы 3-сө биттә).**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ИТ ИТЕП ҺАТЫУ ЕҢЕЛ,

## уға тиклемгеһе ауыр...

**Кемгә нисектер, ләкин беҙҙең ғаилә өсөн ҡыш көтөп алынған миҙгел. Ап-аҡҡа төрөнгән баҫыу-ҡырҙар, йоҡоға талған урман-тауҙарҙың матурлығына һоҡланып бер ҡыуанһаҡ, үҙебеҙҙең хужалыкта үҫтергән малдарҙы һатҡандан килгән аҡсаны ҡулыбыҙға алып, тағы бер шатланабыҙ.**

Яҙға аяҡ баҫҡан саҡта уҡ ферманан һимертергә йәш быҙауҙар һатып алабыҙ. Шулай уҡ хужалығыбыҙҙа күпләп һарыҡ та аҫрайбыҙ. Һарыҡ тотоу, ғөмүмән, отошло, тип уйлайым, сөнки кеше йыл әйләнәһенә ит ашай һәм кәрәк саҡта бер һарыҡты һуйып һатып ебәреү ғаилә бюджетына аҡса килтерә. Тағы ла йыл һайын ҡаҙ, өйрәк бәпкәләре һәм бройлер себештәре лә алабыҙ. Халыҡта йылҡы итенең айырыуса ҙур һорау менән файҙаланғанлығын белгәс, йыл һайын, һатырға, тип, ат та аҙерләйбеҙ. Шулай итеп, яҙ-көҙ айҙарында йорт ихатабыҙ ҙур ферманы хәтерләтеп китә.

Әлбиттә, алдыҡ-үҫтерҙек-һаттыҡ, тип һөйләү генә еңел, ә ысынында ул көндәлек ауыр эш икәнлеген күбеһе аңламай. Йәйен ҡайҙалыр ял итергә барыу хаҡында ауылда йәшәүселәрҙең күбеһе хатта хыялланмай ҙа, сөнки ишле мал-тыуарҙы ҡарарға, уларҙы тәрбиәләргә, бесәнен эшләргә кәрәк. Ошо сәбәпле, баҙарға һатырға алып барғанда: "Хаҡтарҙы үтә лә арттыраһығыҙ", "Ни өсөн улай ҡыйбат?" тигән һорау, шелтәләүҙәр ҙә ишетәбеҙ. Ләкин уларға асыуланырға кәрәкмәй, сөнки улар күҙлегәнән сығып ҡарағанда, хаҡтар, ысынлап та, ҡыйбат күренәләр, бәлки. Тик беҙ хаҡтарҙы кәрәгенән артыҡ күтәрмәйбеҙ, ә сығымдарыбыҙҙы ҡапларлыҡ һәм аҙыраҡ өҫтәмә килем килтерерҙәй генә итеп ҡуябыҙ. Хаҡтарға шулай уҡ итте һатыуға сығарғанда кәрәкле белешмәләр өсөн түләнгән аҡса ла, һимертеүгә киткән ем хаҡы ла һалына икәнлеген күптәр белмәйҙер.

Әлеге ваҡытта баҙарға башмаҡ, һыйыр итенең бер килограмын 220-250 һум, һарыҡ, өйрәктекен - 220 һум, ҡаҙҙыҡын - 300 һум менән тәҡдим итәбеҙ. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр баҙарҙан түгел, ә бер-ике ғаилә ҡушылып, малды тере килеш һатып алып, үҙҙәре һуйыуҙы хуп күрә. Был осраҡта малдың ҙурлығы, нисә йәштә булыуы роль уйнай. Шулай бер башмаҡты беҙ 35 меңгә һаттыҡ. Атты ла, күпселек осраҡта, тере килеш һатабыҙ. Уның хаҡы иһә 45-50 меңгә барып баҫа. Быйыл күпселек райондарҙа бесән эшләү ҙур мәшәҡәт тыуҙырҙы, шуға күрә халыҡ берәр генә баш ҡалдырып, малын һуйып һатырға мәжбүр. Ә был, үҙ сиратында, иттең хаҡына ла йоғонто яһамай ҡалмай.

Әле һүҙ йөрөткән аҡса эшләү юлы ауыл халҡы өсөн асыш түгел, әлбиттә. Уларҙың күбеһе ошо юл менән ғаиләһен ҡарай, йорт һалып инә, балалар үҫтерә. Ләкин ҡала халҡы иттән килгән һәр тиндә ауыл кешеһенең күпме көсө һалынғанлығын аңлаһын, тип яҙырға булдым был юлдарҙы.

**Рәмилә АҪЫЛБАЕВА.**
**Мәләүез районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Теләк теләгәндә, ҡотлағанда кешеләр бер-береһенә уңыш теләй. Ә нимә һуң ул уңыш? Уға өлгәшеү өсөн нимә эшләргә?

(Башы 1-се биттә).

*Сәлим ХӘЙРЕТДИНОВ, иретеп йәбештереүсе:* Уңышты яулап алып була, тигән фекер менән килешмәйем. Ул йә бар, йә юҡ. Кеше йә уңышлы, йә уңышһыҙ булып тыуа. Шәхсән үҙемде мин уңышлы кеше, тип иҫәпләйем. Быға күп тапҡыр инанғаным бар. Ни өсөн үҙемде уңышлылар рәтенә индерәм? Сөнки тормошом яйлы, ғаиләм бына тигән, эшемдә лә барыһы ла һәйбәт. Мәктәпте тамамлап, ул ваҡытта бик тә популяр булған юридик факультетҡа уҡырға индем. Минең бер ниндәй ҙә "йәнтәҫ ҡуллы" ағайым, юғарыла ултырған апайым, ғөмүмән, минә ярҙам итә алырҙай туғаным юҡ ине. Уңышмы был? Минеңсә, уңыш. Университетта белем алып йөрөгәндә юлыма аҡыллы кеше осрап, тағы ла берәй эшсе һөнәре үҙләштереү кәрәклеге хаҡында кәңәш итте. Әйткәндәй, тормош юлында урынлы, аҡыллы кәңәш бирерҙәй кешеләр осрап тороуы ла кешенең уңышлы булыуын билдәләйҙер ул. Шулай итеп, кистәрен йөрөп иретеп йәбештереүсегә лә уҡып сыҡтым. Ваҡытында минән ер тырнап көлгән курсташтарым бөгөнгә көндә кеме эшһеҙ, кеме 10 мең эш хаҡына бил бөгә. Ә мин иһә икенсе һөнәрем ярҙамында уларҙың ярты йылда эшләп тапҡан аҡсаһын бер вахтала уҡ кеҫәгә һалам. Ялда булғанда ла шабашкаларға йөрөп тә аҡса һуғам, ни тиһәң дә, иретеп йәбештереүсе быуа быуырлыҡ булып йөрөгән юрист ише түгел, юлда аунап ятмай. Шул уҡ ваҡытта юрист һөнәремдең дә кәрәге бик тейеп ҡала. Бер нәмә лә белмәгән заманда, түләүле консультациялар бирәм. Был тағы ла өҫтәмә аҡса тигән һүҙ. Шуға күрә эш йәһәтенән үҙемде уңышлымын, тип ауыҙ тултырып әйтә алам.

Ғаилә тормошом да күптәрҙең күҙен ҡыҙыҡтырырлыҡ. Матур, уңған, эшһөйәр, ә иң мөһиме, миңе һәр саҡ аңлап һәм барлыҡ башлангыстарымды ла хуплап торған яратҡан кәләшем, аҡыллы балаларым бар. Ҡайһы бер йәштәштәремдең ғаиләһеҙ, бала һөйөүҙән күрмәй ғүмер уҙғарыуын күрәм дә күңелем әрней.

Уңыштың, минеңсә, бәләкәйе һәм ҙуры була. Алда һүҙ алып барылған уңыштарҙы мин, һис шикһеҙ, ҙурҙар рәтенә индерәм. Ә бәләкәй уңыш ниндәй була һуң? Мәҫәлән, лотерея уйынын алып ҡарайыҡ. Мин лотереяны йыш алам һәм әлегә ҙур сумма отмаһам да, гелән һатып алған аҡсамды кире ҡайтарам, йәғни бер тин дә юғалтмайым. Был да үҙенә күрә уңыш, ләкин иҫ китерлек түгел. Шулай уҡ ниндәйҙер йомош менән төрлө ойошмаларға барһам да, юлым гелән уңа. Кәрәкле кеше урынында була, һорауҙарым да бик тиҙ хәл ителә, ғөмүмән, ниндәйҙер мәсьәләлә аяҡ салған кешене осратҡаным юҡ.

Бына шулай. Уңышлы булыу өсөн мин бер нәмә лә эшләмәйем, ул һәр ваҡыт минең янымда. Кемдер уңышлы булыу серен китаптарҙан эҙләй, билдәле һәм бай кешеләрҙең тормошон өйрәнә һәм шуны үҙ тәжрибәһендә ҡулланырға тырыша. Ләкин, минеңсә, былар ҙың барыһы ла бушҡа, сөнки ул, талант кеүек уҡ, тәбиғәттән бирелгән бүләк.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**"Киске Өфө"гә яҙылырға өлгөрмәнем, тип үкенеүселәр юҡмы арағыҙҙа? Улар әле, 17 ғинуарға тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башлаясаҡ икәнен иҫкәртегеҙ, зинһар. 500665 индексլы "Киске Өфө"гә биш айға 300 һум 20 тингә яҙылып була.**

**Иҫкәртеү.** Почталарҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт:
**www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта:
**info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог:
**blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Кушнаренко районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Указдары менән иң яҡшы табиптарға һәм уҡытыусыларға һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәләрендә юғары ҡаҙаныштары, күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн республиканың почетлы исемдәре бирелде. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" исеменә Ғафури районы Мораҡ ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең география уҡытыусыһы Нәйлә Абдуллина, Дыуан районындағы Республика лицей-интернатының башланғыс кластар уҡытыусыһы Рәзилә Әхмәтханова, Асҡын районы Ҡышлауйылға ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе директоры Әмин Шәүәлиев лайыҡ булды.

✓Латвияла 2013 йылдың февралендә "Башҡортостан - Балтия" бизнес форумы үтәсәк. Иҡтисади сара Башҡортостан делегацияһының сит илдәге хеҙмәттәштәрҙән ресторан бизнесы һәм туризм өлкәһендәге тәжрибәһен өйрәнеү, шулай уҡ Балтия төбәге менән хеҙмәттәшлек итеү механизмдарын булдырыу маҡсатында Латвияға визиты сиктәрендә ойоштороласаҡ. Сарала Латвия, Эстония һәм Литванан вәкилдәрҙең ҡатнашыуы көтөлә, улар 2014 йылға тиклем Балтия илдәрендә туризмды үҫтереү стратегиялары тураһында һөйләйәсәк

✓Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министрлығының яңы урынбаҫары итеп Шамил Абдраҡов тәғәйенләнде. Быға ҡаса ул Салауат музыка колледжына етәкселек итте.

✓2013 йылдың 18-27 ғинуарында Германияның баш ҡалаһында 78-се "Йәшел аҙна-2013" халыҡ-ара күргәҙмә-йәрминкәһе үтә. БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Йәшел аҙна"ла Башҡортостан исеменән "Башспирт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте сығыш яһаясаҡ.

✓Башҡортостанда 21 ғинуарҙан 21 февралгә тиклем "Каргиҙәр" айлығы үтәсәк. Тейешле бойороҡ республика Хөкүмәте тарафынан ҡабул ителде. Айлыҡ барышына Башҡортостан Республикаһының Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһы һәм Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығы контроллек итәсәк.

*УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!*

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...

## ҡатмарлы фекерҙәре...



### Ике донъя, ике юл...

**Аҡ менән ҡара, яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ, йылы менән һыуыҡ, өҫ менән аҫ булған кеүек, донъя ҡоролошо, ундағы тормош заманына күрә тәбиғи һәм яһалма үҙгәрештәр кисереп тороусан. Һуңғы 18 йылда донъя үҙгәрештәрен ҡыҙыҡһынып, иғтибар менән күҙәтеп барам. Ошо осорҙа ике параллель донъяны шәйләгәндәймен. Береһе - мин йәшәгән күп яҡтан сикләнгән донъя, икенсеһе - минең ҡатнашлығым булмаған донъя.**

Мин, әлбиттә, үҙем генә дәүер үҙгәрештәрен тыя ла, донъяны үҙгәртеп ҡора ла алмайым, әммә уның шауҡым-касафаттарын шәхси тормошомда тойоп, яҙмышымда кисереп, тәьҫораттарымдан хайран ҡалып ятам. Эстән ҡарышып, ризалашмаһам да, ялбарып, ялыныуҙарҙың мәғәнәһеҙ икәнен аңлап, тыйыла алам, хис-тойғоларымды баҫа беләм, әммә барыбер дәүерҙең хәүеф-хәсрәттәрен объектив баһалай аламдыр һымаҡ, сөнки мин фәҡәт ғәҙеллек һәм выждан яғындамын бит. Ғәмәлдә, бөгөн кешенең яҡшымы, насармы һәм кем яҡлы булыуы кемгәлер файҙа килтергәндә генә баһалана. Хатта яҡын туғандар араһында ла ошо мөнәсәбәт киң таралған...

Был дәүерҙә йәшәүселәр, донъя ҡоролошо, заман үҙгәрештәре менән ризалашмаһалар ҙа, имен ҡалырға теләһәләр, тормош шарттарына ҡулайлашырға, йәмғиәткә яраҡлашырға, хужаларына ярамһаҡланырға, заман талаптарын үтәргә мәжбүрҙәр. Шул яраҡлашыу шауҡымына дусар ителгәндәр күп хәл-ваҡиғаға, миңә был ҡағылмай, тип, мөнәсәбәт, фекерҙәрен белдереп бармай, үҙҙәре хаҡ булғанда ла, хатта рәнйетелгәндә лә, ғәҙелһеҙлеккә еңел күнәләр.

Ҡайһы ваҡыт донъя буталышындағы күп хәл-күренеш эш кешеһенең иғтибарынан ситтә тороп та ҡалалыр. Ихтимал. Ләкин дәрт итмәһәң, бер нәмәне лә үҙгәртеп булмай! Шуны аңлап, 6-7 йыл элек ил, тел, милләте яҙмышына битараф булмаған замандаштарым кеүек, мин дә йәнемде борсоған уйҙарымды "Киске Өфө" гәзитендә "Ябай кешенең ҡатмарлы фекерҙәре" тигән баш аҫтында баҫтыра башлағайным. Шөкөр, "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигәндәй, минең фекерҙәрем ошо гәзиттәге, башҡа баҫмаларҙағы башҡа авторҙар фекеренә тос өлөш өҫтәгәндәй булды. Ул әйтелгәндәр барыбер ҙә йәмғиәтебеҙҙәге битараф булмаған кешеләр ҡолағына инә, аңына һеңә, тип уйлайым. Бөгөн үҙ исемдәребеҙгә һәм йолаларыбыҙға иғтибар арта, телебеҙҙең таҙалығын һаҡлау тураһында борсолоу бар, хаталар өҫтөндә эш һөҙөмтәләрен бирә, зәғифтәрҙең ихтыяждарына мөнәсәбәт үҙгәрә, хатта бәләкәй генә кеүек тойолһа ла, мәктәп формаһын яңынан индереү тураһында ла уйланалар мәғариф учреждениеларында. Был ыңғай үҙгәрештәр өмөтләндерә...

Аллаһы Тәғәлә яҡты донъяға әҙәм балаларын, тәндәренең, сәстәренең, күҙҙәренең төҫөнә ҡарамай, бер тигеҙ хоҡуҡлы итеп яралтһа ла, бөтәбеҙгә лә үҙе тыуырға насип булған йәмғиәттең йәшәү рәүешенә, ҡағиҙә, ҡанундарына буйһоноп йәшәүҙән башҡа сара юҡ. Һәр дәүерҙә йәмғиәт, нигеҙҙә, ике үҫеш юлын һайлай ала. Мәҙәниәт, рухиәткә нигеҙләнгән - кешелекле (хәләл) юл. "Көслөнөкө - замана" принцибына таянған - ҡырағай (хәрәм) юл. Тарихтан белеүебеҙсә, ул юлдар киҫешһә, һуғыш, ҡыйралыштарға килтереүе, бергә ҡушылһалар, иң үҫешкән йәмғиәтте лә тарҡатып, һәләк итеүҙәре билдәле. Ошо ике юл менән үҫешкән донъя алышында быға хәтлем ҡылған гонаһтарынан кешелек әллә ҡасан ҡырылып бөтөргә тейеш булғандыр, тип уйлаһаң да, әҙәм затын барыбер ҙә үҙ дәүеренә яраҡлашыу, яҙмышына буйһоноуы ла ҡотҡарып ҡалғандыр, быуындарҙан быуындарға үрсергә, быуаттарҙан быуаттарға тоҡомон дауам итергә булышлыҡ иткәндер, тип тә уйланыла.

Кешелек борондан үҙе йәшәгән яҡты донъянан башҡа теге донъя бар икәнен дә яҡшы белә һәм йәшәү дәүерендә ер өҫтөндә хөкөм һөргән, ваҡыты менән ожмах, тамуҡтарға тиң байтаҡ ҡоролоштар, боролоштар, ҡыйралыштар кисергән. Был донъя, ғәҙәттә, матди байлыҡ туплаусылар менән рухиәтте һаҡлаусыларҙың алыш майҙаны булһа, теге донъя - изгеләр өсөн йәннәт менән гонаһлылар өсөн йәһәннәмдән ғибәрәт икәне лә билдәле. Ләкин кеше теге донъяла тамуҡ язалары янауын белһә лә, һаман аҙып, алдашып, урлашып маташа. "Ярай, күрәһеләрҙе ваҡыты еткәс күрелер әле", тип, көндәлек хәжәттәрен атҡара, йән бурыстарын үтәй, сөнки теге донъялағы хәлдәрҙе уйлап алйыуҙан был тормошта имен ҡалып, әҙәмсә йәшәүендә хәстәрләү хәйерлерәк икәне уның ҡанына һеңгән. Ғәмәлдә, донъя һәм дәүер әҙәм балаһын үҙ ҡағиҙәләренә буйһоноп йәшәргә мәжбүр итә...

Теге донъяның йәннәт, йәһәннәме булған кеүек, был донъяның да үҙ осорона күрә тәбиғиме, әллә әҙәмдәренең ғәмәлдәренә күрә һынау, язағамы, төрлө исемле һәм сәйәсәтле "...изм" осорҙары булған, бар һәм булыр. Улар бер-береһенән ҡоролошо, йәшәйеше, ҡанундары менән айырылһа, хужалары, хеҙмәтселәре һәм ҡолдары булыуы һәм улар араһында ҡатмарлы мөнәсәбәттәр урынлашыуы менән оҡшаштар. Ниндәй генә "...изм" ойошторолмаһын, уның фәҡәт хужалары һәм хеҙмәтселәре булыуы бәхәсһеҙ. Үҙе хөкөм һөргән мәлдә һәр ҡоролош үҙен күтәреп маҡтай, үҙенең камиллығын тәкрарлай, бөтә замандарҙа һәм бөтә быуындарҙа үҙенең иң алдынғы, иң аҡыллы һәм иң ғәҙел ҡоролош булыуына дәғүәләшә. Мәле етһә, иң ҙур дәғүәле ҡоролош та тарҡала. Шул тарҡалыш, тартҡылашта әҙәм ғүмере лә үтә. Әжәл әфәнде килә лә, әллә ниндәй өҫтөнлөктәргә дәғүәләшеп йәшәгән әҙәмдең, исемен дә һорап тормай, йәненә хужа булып, үҙенең артынан эйәртеп ала ла китә. Йәндәрҙе ҡайҙалыр сират күперенән үткәрәләр, ҡайҙалыр йөрәген үлсәп ҡарайҙар, ҡайҙалыр һорау алыуҙары мәғлүм, әммә быға тиклем унан бер кем дә кире килеп, был ғәләмәттәр ысынмы, юҡмы икәнен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, тип һөйләгәне юҡ. Шуға күрә, әҙәм балаһы теләһә кемдән ишеткән имеш-мимештәрҙән тертләһә лә, хөрәфәттәрҙән ҡурҡһа ла, ҡылғандарынан шикләнһә лә, дәүере менән бергә аҙып, "Ярай, кеше күргәнде күрелер әле" тип, яҡты донъяға йәбешеп ята. Ләкин, үҙ заманының йәмғиәт ҡоролошона өйрәнеп, ундағы тәртип, талаптарға ҡулайлашып күнһә лә, уның йәнен көндән-көн, ары нисек йәшәргә, кемгә ышанырға, кемгә эйәрергә, нимәгә инанырға, тигән һорауҙар ныҡыраҡ борсойҙор. Бөгөн бигерәк тә күбәйҙе бындай борсолоуҙар, һорауҙар. Ләкин улар, түбәндәге шиғыр юлдарындағыса, ыҙғышһыҙ ғына сиселеш алһын ине...

*Был донъяға ғашиҡ йән һәм бәндә -*
*Ябай ғына әҙәм балаһы*
*Булһаң ине кеше хәтерендә,*
*Кеше булып нисек ҡалаһы?*
*Айҙа тыныс, күктә Ҡояш, Ерҙә*
*Донъя шул уҡ, кеше үҙгәрә...*
*Йыһан йәшәр, Ерҙә тормош һүнер,*
*Ыҙғышҡанда кеше үҙ-ара...*

**Урал МОСТАФИН.**

*ЯҢЫ ЗАКОНДАР*

# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘ ЯҠЛАНА!

**(Башы 1-се биттә).**

Был мәсьәләнең Рәсәйҙең халыҡ-ара абруйына барып тоташыусы сәйәсәт менән бәйле булыуын да һис иҫтән сығарырға ярамағанлығын һәр кем аңлайҙыр. Бынан тыш, илдә балалар мәнфәғәтен яҡлаусы тағы бер нисә указға ҡул ҡуйҙы Владимир Путин. Ошо йылдың 1 ғинуарынан 1-се төркөм инвалид балаларға социаль пенсия күләме 6 357 һумдан 8 704 һумғаса арттырылды. Ә инде етем балаларҙы яҡлау буйынса саралар тураһындағы тағы ла бер указ нигеҙендә етемдәрҙе уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусы Рәсәй граждандары өсөн был процедура ябайлаштырыла һәм уларға һалым ташламалары индерелә.

Тағы бер яңылыҡ: былтырғы йылдың һуңғы көнөндә Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы законға ҡул ҡуйҙы. Ул ошоға тиклем ғәмәлдә булып килгән "Мәғариф тураһында"(1992) һәм "Юғары һәм вуздан һуңғы һөнәри белем биреү тураһында"ғы (1996) закондарҙы алмаштырҙы. Был документта Рәсәйҙә белем биреүҙең бөтөн кимәлдәре, шул иҫәптән мәктәпкәсә, һөнәри - башланғыс, урта, юғары һәм өҫтәмә белем биреү нормалары ҡарала. Шуныһы айырыуса мөһим: был документ, ниһайәт, һуңғы осорҙа милли республикалар йөҙөн "йыртыусы" хаяһыҙ белдереүҙәргә һәм туған телдә уҡытыу мәсьәләләренә бәйле ығы-зығыға нөктә ҡуя: яңы законда милли республикалар телдәрендә белем алыу мөмкинлеге менән бергә дәүләт (рус) телендә уҡыу-уҡытыу нормалары билдәләнә. Берҙәм дәүләт имтихандары (БДИ) һаҡланып ҡала, уның һөҙөмтәләре 5 йыл ғәмәлдә буласаҡ. Балаларға мәктәп формаһын йөрөтөү мәсьәләһе белем биреү учреждениеһы хакимиәте ҡарауына ҡалдырыла. Ә бына ауыл мәктәптәрен ошо биләмәлә йәшәүсе халыҡ фекерен иҫәпкә алмайынса тороп ябыу тыйыла, тип аҡҡа ҡара менән яҙылған яңы законда. Әйткәндәй, ауыл мәктәптәренә ҡағылышлы тағы бер яҡшы хәбәр: ауыл уҡытыусыларына торлаҡ-коммуналь хужалыҡ сығымдары өсөн компенсация түләү яңынан көн тәртибенә ҡайтарыласаҡ. Айырым баҫым яһалып, документта шул да әйтелә: уҡытыусыларҙың эш хаҡы улар йәшәгән төбәк буйынса теркәлгән уртаса күрһәткестән түбән булырға тейеш түгел. Яңы закон шулай уҡ вузға уҡырға ингән ваҡытта файҙаланылған ҡайһы бер ташламаларҙы сикләй, мәктәптәрҙә "Дин нигеҙҙәре"н мотлаҡ курс итеп индереү мәсьәләһен ҡарай.

Ҡыҫҡа ғына бер байҡауҙа яңы закондың бөтә положениеларына ла туҡталып, ентекле баһа биреү мөмкин дә түгел, әлбиттә. Кем ҡыҙыҡһына, уны ҡулына алып, үҙе иғтибарлап уҡыр, моғайын, беҙ фәҡәт шуныһын ғына билдәләп үтеүҙе кәрәк тип таптыҡ: закондың мөмкин тиклем халыҡ үтенестәренә ҡолаҡ һалып, уҡытыусылар һәм балалар мәнфәғәтенә яҡынайтып яҙылғанлығы күренеп тора, ә был бер ҙә насар түгел. РФ мәғариф һәм фән министры Д. Ливанов әйтмешләй, яңы закон нигеҙҙә ил граждандары тарафынан яҙылған һымаҡ ҡабул ителә. Ул яңылыҡтарҙан ғына ғибәрәт түгел, бәлки, илдәге һуңғы ике тиҫтә йыллыҡ тәжрибәне иҫәпкә алыуы менән дә ҡиммәт.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда 2013 йылдың 1 ғинуарынан йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан, йәғни 5600 һумдан кәмерәк булған күп балалы ғаиләләр 1,5-3 йәштәге һәр өсөнсө һәм унан һуңғы балаға өс мең һум күләмендә ай һайын аҡсалата түләү аласаҡ. Башҡортостанда бындай түләүҙе яҡынса 13 мең бала аласаҡ. Был маҡсаттарға 2013 йылда 230 миллион һумдан ашыу аҡса бүленә. Бынан тыш, яңы йылда күп балалы ғаиләләр өсөн физкультура-сәләмәтләндереү һәм мәҙәниәт учреждениеларына йөрөүгә, шулай уҡ йәмәғәт транспортында йөрөүгә льготалар аҡсаға әйләндерелә. Был маҡсаттарға өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән һәр ғаилә ай һайын 410 һум аҡса аласаҡ.

✓ 2013 йылдың 18-19 апрелендә Мәскәүҙә Рәсәй Журналистар союзының X съезы үтә. "Башҡортостан Журналистар союзынан иң ҙур делегация барасаҡ, сөнки беҙҙең ойошма төбәк берләшмәләре араһында иң ҙуры булып тора, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына БР Журналистар союзы рәйесе Артур Дәүләтбәков. - Февралдә конференция үткәреләсәк, унда съезға делегаттар һайланасаҡ".

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа закон сығарыусыларҙың яҙғы сессияға эшмәкәрлеге буйынса кәңәшмә үтте. Парламентарийҙарҙың урындағы үҙидара һәм йәмәғәт ойошмалары өлкәһендәге закондар сығарыу эшмәкәрлеге көсәргәнешле буласаҡ. Муниципаль хеҙмәткә бәйле закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһындағы закон проекттары өҫтөндә етди эш көтә. Федераль кимәлдә Һайлау тураһындағы кодексҡа төҙәтмәләр индереүҙе иҫәпкә алған үҙгәрештәр индереләсәк. Республика парламенты рәйесе һүҙҙәренсә, социаль өлкәләге ҡануниәтте үҫтереү төп йүнәлештәрҙең береһе булып ҡала.

✓ Башҡортостан Республикаһы буйынса Россельхознадзор идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан 2012 йылда Халыҡ-ара "Өфө" аэропорты сик пунктында 1678 самолет, 123440 берәмек йөк ҡаралған. Тикшереү барышында 63 тәртип боҙоу асыҡланған һәм физик шәхестәргә ҡарата 63 протокол төҙөлгән, 19100 һум күләмендә административ штраф һалынған һәм түләтелгән. Юғары фитосанитар хәүефле карантин продукцияһын индерергә тырышыуҙың 47 осрағы кисектерелгән. Үзбәкстан, Таджикистан, Тунис һәм Болгариянан килтерелгән һәм хәүефһеҙлеген раҫлаусы документтары булмаған продукция тулыһынса юҡ ителгән.

**"Башинформ"дан.**

ӘЙҘӘ, ЙОЛА ТОТАЙЫҠ!



# БЕРГӘ ТУПЛАЙ ТОРҒАН...

## ғаилә байрамы был

**Бына, ниһайәт, көтөп алған Яңы йыл байрамдары ла үтеп китте. Мөғжизәле, серле байрам ул - яңы йылды ҡаршы алыу. Уны һәр ғаилә үҙенсә байрам итә. Өфө районы Шамонино ауылы "Ысыҡ" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Гөлнара ӘМИНЕВА менән уларҙың ғаиләһендә Яңы йыл байрамының нисек үтеүе тураһында һөйләштек.**

- Бала саҡта Яңы йыл табынын күмәкләп әҙерләй торғайныҡ. Киң урындыҡҡа теҙелеп ултырабыҙ ҙа, беҙ, балалар, күп итеп билмән бөрәбеҙ. Әсәйем мотлаҡ рәүештә буҙа ҡоя, мейестә ҡаҙ итенән ҙур бәлеш бешерә. Хәҙерге көндә лә беҙ, бер туған биш ҡыҙ, үҙ ғаиләләребеҙ менән йыл да әсәйебеҙ эргәһенә - Әбйәлил районындағы тыуған ауылыбыҙға ҡайтып, яңы йылды ҡаршы алабыҙ. Оло апайыбыҙ буҙа ҡоя, бәлеш тә бешерелә, заманса аштар араһында бишбармаҡ та табынға ҡуйыла. Балаларыбыҙ беҙҙең кеүек күмәкләп ултырып билмән бөрөүҙе оло бер ваҡиға кеүек көтөп ала. Уларҙы ошолай аш-һыу әҙерләүгә йәлеп итеү үҙебеҙ эшләп өлгөрмәгәндән түгел. Был үҙенсә бер матур йола атҡарыуыбыҙ. Ғөмүмән, Яңы йыл байрамы күберәк балалар өсөн үткәрелә бит. Беҙҙең балалар ҙа өләсәй өйөндәге байрам шыршыһын матур итеп биҙәй, ҡағыҙҙан яһалған ҡар бөртөктәре, төрлө уйынсыҡтар менән өй эсен матурлап сыға. Бер-беребеҙҙән алыҫта йәшәһәк тә, ошо ваҡытта балаларыбыҙҙың татыулығын, берҙәмлеген күреп һөйөнәбеҙ. Хәҙер инде балаларыбыҙ үҫеп етеп тә бара. Әммә улар һаман да ошо балаларса ғәҙәттәрен ташламай. Яңы йыл байрамы улар өсөн балалыҡ иленә ҡайтып килеү менән бер.

Яңы йыл байрамы табынында атҡарыла торған тағы бер матур йолабыҙ бар. Сәғәт теле төнгө ун икене белгертеп һуҡҡанда телевизорҙан Президент ҡотлауын тыңлайбыҙ ҙа, олоһонан кесеһенә тиклем бер-беребеҙҙе ҡотлап, изге теләктәр теләйбеҙ, үткән йылда яулаған уңыштарыбыҙ менән уртаҡлашабыҙ. Инде бүләсәрҙәрен һөйөү йәшенә еткән әсәйебеҙ алдында отчет биреү һымағыраҡ та килеп сыға инде был. Ихлас күңелдән еткерелгән теләктәр йөрәккә май булып яғыла, туғанлыҡ ептәрен нығыта, беҙҙе бер бөтөн яһай. Яҡын кешеләреңдең имен-һау булыуын күреү, уларҙан йылы һүҙ ишетеү - үҙе бер бәхет, уларҙың уңыштарын уртаҡлашыу - мең бәхет.

Ғаиләбеҙҙә тағы бер йола ныҡ тотола: яңы йыл, яңы өмөттәр, яңы тормошҡа асылған ишек тупһаһын айыҡ аң менән ашатланып сығырға кәрәк, тип һанайбыҙ. Эсмәгән килеш табын артында йырлашып ултырыу, бейеп алыу, төрлө уйындар ойошторou, Аллаға шөкөр, яҡын туғандарым өсөн дә, балаларыбыҙ өсөн дә ғәҙәти күренеш. Яңы йылда бар милләттәштәремә айыҡлыҡ теләйем.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР



# ҺИН ДӘ МУЛЛА, МИН ДӘ МУЛЛА...

## атҡа бесән кем һала?

**Бала саҡта атай-әсәй ҡушҡанды тыңламайыраҡ, китап уҡып ултырғанда (ә беҙҙең кеүек "совет осоро" балаларына, хәҙерге йәштәрҙән айырмалы, ысынлап та, "китап ене" ҡағылған) "Һин дә мулла, мин дә мулла..." тип төрттөрөп тә ала торғайнылар. Йәнәһе, барығыҙ ҙа уҡымышлыға әйләнһәгеҙ, һеҙҙең өсөн кем эшләр икән. Был, бәлки, совет заманының, атеистик тәрбиәнең - "муллалар эшләмәй, ҡунаҡ булып тик йөрөй", тигән ҡараштың бер сағылышы ла булғандыр.**

Ни өсөн ҡапыл бала саҡтан ҡалған ошо әйтем хәтергә төштө, сөнки тема эшһеҙлеккә ҡағыла. Совет осоро күҙлегенән ҡарағанда, моғайын, был һүҙбәйләнеш дин әһелдәренән, ғилемлеләрҙән көлөү, уларҙы мыҫҡыл итеү кеүек яңғырағандыр ҙа: сөнки беҙгә уҡымышлылар, белемлеләр - эшлекһеҙ ҡатлам һәм улар өсөн наҙан ярлы-ябаға тир түгә, тип тылҡынылар. Ошо идея йылдар дауамында мейеләренә һеңдерелгән ата-әсәләр балаларын нисек тә булһа белемле, юғары белемен раҫлаусы дипломлы итергә тырышты. Көлкө көлә етә, тигәндәрен бөгөнгө ысынбарлыҡта күрергә мөмкин: белемлеләр артығы менән, тик ниндәйҙер эште тотоп эшләргә ғилемдәре генә етмәйерәк.

Бөгөнгө мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Өфөлә 7,5 мең эшһеҙ граждан иҫәпләнә. Йыл башында был һан 9 мең булһа, хәҙер бер ни тиклем кәмеү күҙәтелә. Ләкин рәсми һандар - статистика ғына, ошо иҫәпкә инмәүселәрҙең күпме икәнлеген берәү ҙә белмәй. Кемдер ялҡауланып, кемдер пенсионер ата-әсәһенең елкәһендә ятыуҙы хуп күреп, кемдер бюрократик кәртәләрҙе үтеүҙән ҡурҡып, мәшғүллек буйынса хеҙмәттәргә теркәлергә бармай.

Шул уҡ ваҡытта баш ҡала предприятиелары һәм ойошмаларына 11500 эшсе ҡулы етешмәүе теркәлгән. Был 2011 йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда күберәк. Йәғни бер эшһеҙгә бер ярым эш урыны тура килә! Ләкин ни өсөн һуң был урындар һаман буш? Сәбәптәре ябай. Беренсенән, ата-әсәләр балаларын "ҙур кеше" итеп күрергә теләп, уларҙы абруйлы тип һаналған профессияларға уҡыта - юристар, экономистар, программистар һ.б. Һөҙөмтәлә хеҙмәт баҙарына был белгестәр күпләп сығарылып, хатта юғары уҡыу йортон тамамлаусылар эш таба алмай йонсой, ә шул уҡ ваҡытта төҙөлөш өлкәһе (арматурасы, бетонсы, ташсы, балта оҫтаһы, буяусы, йөҙләүсе, электр-газ менән иретеп йәбештереүсе), завод профессиялары (слесарь, токарь, фрезеровщик), автомобиль водителдәре, кондукторҙар, урам һепереүселәр, юл һалыусылар, һатыусылар, ашнаҡсылар етешмәй. Айыҡ фекер йөрөтһәң, эш урындары күп, ә эшһеҙҙәр барыбер бар, тип аптырарға ғына ҡала. Нилектән шулай килеп сыға һуң?

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов әйтеүенсә, бының сәбәптәренең береһе - йәштәрҙең вазифалы, етәксе урындарға ынтылыуында. Әлбиттә, йәш быуындың бындай ынтылышын хупларға ғына кәрәк, әммә атҡа бесән һалыусы ла булырға тейештер бит. Икенсе сәбәпте иһә ата-

ХОККЕЙ

# ҠУНАҠ - ТҮРҘӘ,

## хужа - ишек төбөндә...

**Йәштәр командалары араһындағы шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионаты тамамланды, Рәсәй йыйылма командаһы өсөнсө баҫҡысҡа күтәрелде.**

Бер яҡтан, "күтәрелде" тип әйтеү дөрөҫлөккә бик үк тап килмәй ҙә һымаҡ. Сөнки йыл һайын үткәрелеп килгән ярыштың һуңғы өс йылында Рәсәй командаларының сығыш кимәленә байҡау яһаһаҡ, шул күренә: 2011 йылғы чемпионатта улар беренсе урын яулаһа, былтыр, шведтарҙан ҡалышып, икенсе урынға лайыҡ булғайны. Быйылғы йыл иһә Рәсәй командаһы өсөн ҡатмарлыраҡ булды. Улар әлеге лә баяғы шведтарҙан ары уҙа алманылар, ул ғына ла түгел, алдағы йылдарҙа бик үк уңышҡа өлгәшә алмаған АҠШ командаһынан да мәрәйҙәр һаны буйынса ҡалыштылар. Шулай итеп, американлылар, ышаныслы һәм әҙерлекле уйын күрһәтеп, беренселеккә сыҡты.

Уйындарға килгәндә, Рәсәй йыйылма командаһы үҙ төркөмөндә 2-се урынға сыҡты, бының менән уға плейй-офф-ҡа юл асылды. Артабан ул сирек финалда Швейцария хоккей оҫталарын буллиттар ярҙамында еңеп, ярымфиналға сыҡты. Ярымфиналда швед хоккейсыларына ҡаршы уйнап, рәсәйлеләр буллиттар серияһында еңелеүгә дусар булды. Шведтар финалға сыҡты, ә беҙҙекеләр - Канада уйынсылары менән бронза миҙал өсөн көрәште. Ә бына канадалылар, "Хоккейҙың ватаны булған Канаданан килеп тә, миҙалһыҙ ҡайтмаясаҡбыҙ!" тип, дәғүәселәренә саҡырыу ташлаған булһалар ҙа, Рәсәй йыйылма командаһынан еңелеп, Йәштәр командалары араһындағы шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионаты тарихында һуңғы 14 йылда тәүге

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө "Рәсәй ҡалаһы. Милли һайлау-2012" конкурсының тәүге ун ҡалаһы иҫәбенә инде. 60023 тауыш йыйып, Башҡортостан баш ҡалаһы рейтингтың һигеҙенсе баҫҡысын биләне. Интернет-проектта йәмғеһе 7 миллиондан ашыу кеше ҡатнашты. Интернет-тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса беренсе урынды Смоленск яуланы (285805 тауыш). Псков, Иркутск, Бөйөк Новгород, Чебоксар, Улан-Удэ, Төмән ҡалалары ла шулай уҡ алдынғылар рәтендә. "Рәсәй ҡалаһы" - илдең иң танылған, абруйлы ҡалаларын һайлауға йүнәлтелгән проект. Рейтингка Рәсәйҙең барлыҡ ҙур административ үҙәктәре - йәмғеһе 81 ҡала инде.

✓2013 йылдың тәүге вакансиялар йәрминкәһе Өфөлә 17 ғинуарҙа үтә. Вакантлы урындарҙы эш эҙләүселәргә Башҡортостан баш ҡалаһының сәнәғәт предприятиелары тәҡдим итәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, уҡыу һәм эш урындары вакансиялары йәрминкәһендә, милек формаһына һәм иҡтисади эшмәкәрлек төрөнә ҡарамай, кадрҙар һайлап алыуға мохтаж булған барлыҡ эш биреүселәр ҙә ҡатнаша ала.Йәрминкә Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 47/1 адресы буйынса үткәрелә. Башлана - 10 сәғәттә.

✓2013 йылда Өфөнөң 14 мәктәбендә барлыҡ балалар өсөн уңайлы белем биреү мөхите булдырыласаҡ. Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, был проект 2011-2015 йылдарға "Уңайлы мөхит" дәүләт программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, әлеге программа ярҙамында Өфөлә 2012 йылда 12 мәктәптә белем биреү өсөн универсаль мөхит булдырылған. Проект муниципалитет менән ҡушып финанслау шарттарында тормошҡа ашырыла.

✓Ағымдағы йылдың яҙында Өфө ҡалаһының Совет районы үҙенең 75 йыллығын билдәләй. Ошо айҡанлы район хакимиәте иң яҡшы эмблемаға конкурс иғлан итте. Бәйгелә ҡатнашыусыларға районның тарихына мөрәжәғәт итеү, уның үткәненә һәм бөгөнгөһөнә, иҫтәлекле урындарына, һәйкәлдәренә, мәҙәниәт объекттарына, ҡаҙаныштарына байҡау яһау тәҡдим ителә. Конкурста еңеүселәрҙе биш мең һум күләмендә аҡсалата премия көтә. Эштәр 15 февралгә тиклем Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 111 адресы буйынса 202-се бүлмәлә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 273-33-17.

***✓ Мегаполистарҙа эшсе һөнәрҙәренә вакансияларҙың буш булыуы, бер яҡтан, ауыл халҡы өсөн яҡшы - улар әллә ҡайҙа Себергә йөрөп интекмәй, ҡалаға килеп, ҡулына һепертке тотоп аҡса эшләй.***

әсәләрҙең балаларын улар теләмәгән уҡыу йортона, балаларының күңеленә хуш килмәгән профессияға уҡытыуындалыр, моғайын. Сөнки ҡайһы бер ата-әсәләр үҙҙәре тормошҡа ашыра алмаған хыялын балаһы аша хәл итеүҙе өҫтөн күрә, йәнәһе, шулай итеп уға ярҙам итә. Һөҙөмтәлә тап киреһе килеп сыға - юғары белем алына, профессия, ҡулда диплом бар, әммә йәш белгес профессияһы буйынса эшләргә теләмәй. Ундайҙар таныштар араһында йыш осрай һәм улар даими рәүештә үҙенең һөнәренә зарлана, йә тегеһе оҡшамай, йә быныһы улай түгел. Ә бит күңел биреп башҡарғанда һәр эштең үҙенең матурлығы, үҙенең ләззәте, үҙенең тәме бар!

Эшһеҙлектең тағы бер сәбәбе - кесе, урта йәки ҙур эшҡыуарлыҡтың артыуындалыр, моғайын. Сөнки эшҡыуарҙарҙың күпселеге эшкә алғанда хеҙмәт кенәгәһе тултырмай, коллектив килешеү төҙөмәҫкә тырыша. Әлбиттә, ул эш хаҡын түләй, ләкин был "аҡсалар" бер ниндәй рәсми органдар аша үтмәй, тимәк, хеҙмәткәр ҙә "эшһеҙ" булып һанала. Эшҡыуарға ла уңайлы, "эшһеҙ" кеше мәшғүллек бюроһына иҫәпкә тороп, унан да аҙмы-күпме булһа ла аҡса ала. Эшҡыуарҙарға тир түгеүҙең тағы икенсе яғы бар - улар хеҙмәткәрҙе һынау ваҡыты менән эшкә ала ла, һынау ваҡыты үтмәҫ элек, талаптарға яуап бирмәй, тигән булып, эштән бушата. Хеҙмәт кенәгәһе йәки башҡа документтар тулытырылмағас, кеше ҡайҙа барып ялыу итһен дә, бер документы булмай тороп, уны кем яҡлаһын? Хәйер, ҡайһы бер ойошмаларҙа бындай кадрҙар ағымы йыш күҙәтелә лә инде.

Ғөмүмән, 7 мең эшһеҙ иҫәпләнеп, 18 мең вакансия булған ҡалала эшһеҙлек темаһы бөтөнләй күтәрелергә лә тейеш түгел һымаҡ. Сөнки һәр кем етәксе булып ултыра алмаһа ла, хатта етәкселәр ҙә ҡулына һепертке тотоп, урам һеперә, бер ни тиклем өйрәнеп алғас, штукатур-буяусы һөнәренә эйә була ала. Бары тик теләк кенә кәрәк. Ә инде өйөңдә балаларың ас ултыра, төрлө түләүҙәргә аҡсаң юҡ икән, ирекһеҙҙән, ҡулыңа һепертке лә тоторһоң. Эштең ояты юҡ, ә бөгөнгө заманда эшһеҙ, аҡсаһыҙ ултырыу оят.

Мегаполистарҙа эшсе һөнәрҙәренә вакансияларҙың буш булыуы, бер яҡтан, ауыл халҡы өсөн яҡшы - улар әллә ҡайҙа Себергә йөрөп интекмәй, ҡалаға килеп, ҡулына һепертке тотоп аҡса эшләй. Күптән түгел генә ауылдан килеп ҡалала урам һепереүсе булып эшләп йөрөүсе туғанымдан күпме эш хаҡы алыуы менән ҡыҙыҡһындым. Уның яуабын ишеткәс, һүҙем шундай булды: "Мин шул сумманы алыр өсөн биш йыл уҡып диплом алдым, ә һин бының өсөн көнөнә ике-өс сәғәт кенә ҡыбырлайһың". Ә бит барыбер шул уҡ ерҙән йөрөйбөҙ. Шул уҡ һауаны һулайбыҙ, шул уҡ хеҙмәттәр менән ҡулланабыҙ.

Шулай ҙа эшһеҙлектең төп сәбәбе - эшһеҙҙәрҙең ниндәйҙер кимәлдә дәүләт тарафынан яҡланған булыуындалыр. Ни генә тимә, хәҙер эшһеҙҙәргә дәүләт аҡса түләп тороп эшләмәҫкә өйрәтә. Мәҫәлән, баш ҡалала эшһеҙ тип теркәлеүселәрҙең 50 проценты максималь күләмдәге пособие ала - 5635 һум (30 процентына 977,5 һум ғына эләгә). Ә бит бөгөн ҡайһы бер хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы шулай уҡ 5500 һум тәшкил итә. Бәлки, ошо эшһеҙ статусында булыусыларҙы йәйгеһен баш ҡаланы төҙөкләндереү, матурлау, ҡышын иһә урам һепереүселәр менән бергә ҡар таҙартыу эштәренә йәлеп иткәндә, йәғни, түләнгән аҡсаны эшләп алырға ҡушҡанда, эшһеҙҙәр һаны ҡырҡа кәмер ине. Сөнки бөгөн эшһеҙ статусында булыусыларҙың күбеһе - юғары белемле (бында ҡала масштабын күҙ уңында тотам). Һәм уларға урам таҙартырға сығыу - ғәрлек. "Ике дипломым була тороп" тигән яуаптарҙы ишеткәнегеҙ барҙыр. Эйе, диплом аҡса эшләмәй (ысынлап та, уны кеше эшләй. Заман күрһәтеүенсә, хатта дипломы булмаусылар ҙа аҡса эшләй ала) һәм ул аҡсалы булыуҙың гаранты ла түгел. Ә йәмғиәтебеҙ граждандарҙан көсләп-көсләп диплом алдырта ла, һуңынан уларҙы Мәшғүллек бюроларына әйҙүкләй. Эшләмәгән өсөн аҡса түләй ҙә, һуңынан ни өсөн халыҡтың "ҡара эшкә" түгел, ә "эшләмәй аҡса ала" торған урындарға барырға тырышыуына аптырай... Бына шундай Бермуд өсмөйөшө...

**Әлбиттә, был тема буйынса оҙаҡ фәлсәфә ҡорорға мөмкин, әммә атта йөрөү рәхәт булһа ла, уға кемдер бесән дә һалырға тейеш бит...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

тапҡыр буш ҡул менән ҡайтып китергә мәжбүр булды.

Әйткәндәй, чемпионатты тап Өфөлә уҙғарып, ойошторoccылар башҡортостанлыларға "бер атыуҙа ике ҡуян" тотоп бирҙе, тиһәк, хата булмаҫ. Яңы йыл алдынан яҡындарына бүләккә донъя чемпионатына билет артынан баш ҡала кассаларында оҙон сираттарҙа тороусылар араһында, бәлки, һеҙ ҙә булғанһығыҙҙыр әле. 31 декабрь кисендә, мәҫәлән, Өфө-Аренала үткән Рәсәй һәм Канада хоккейсылары уйыны барышында тамашасылар трибуналарҙа буш урындар ҡалдырманы, тиерлек. Иҫәпләүҙәренсә, яңы йыл кисендәге был уйынға бөтәһе 7988 көйәрмән килгән...

Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары донъя кимәлендәге хоккей ярыштарын ҡарап кинәнһә, Европа һәм Төньяҡ Америка илдәренең йәш хоккей оҫталары донъялағы миллионлаған телевизор ҡараусы иғтибарын гүзәл Өфө ҡалаһына, уның боҙ һарайҙарында барған алыштарға иғтибар йүнәлтергә ярҙам итте. Хоккей матчтары Өфө ҡалаһына спорт өлкәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән инвестициялар йәлеп итә торған үҙенсәлекле реклама ролен дә үтәне, тиһәк, яңылышмаҫбыҙ, моғайын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халҡында ҡунаҡ кешегә изге ҡараш йәшәй. Кем генә килһә лә: оломо ул, йәшме - һәр кемгә өйҙөң иң түренән урын бирелә. Ҡунаҡ һыйлаған саҡта хужа уға яҡыныраҡ ултыра, ә уның балалары бөтөнләй ишек төбөндә генә тамаҡ ялғай. Был ғәҙәт башҡорт ауылдарында әле лә һаҡланып ҡалған. Ә бына был чемпионатта хужаларҙың "түргә үтә алмауы", йәғни өсөнсө урын менән генә хушһыныу сәбәбе ниҙә икән? Әллә үҙенсәлекле ҡунаҡсыл мөхит йоғонто яһанымы, тип тә ҡуябыҙ, әҙерлек кимәле тураһында һүҙ башламайынса ғына. Хәйер, өсөнсө урын да насар түгел инде.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ЕҢЕЛ ЭШКӘ КҮП ТҮЛӘМӘҪТӘР

**Өйҙә эш тәҡдим итеүсе иғландар күп баҫыла: машиналар өсөн деталдәр һәм аксессуарҙар йәки ручка һәм фломастерҙар йыйыу, конверттарға маркалар йәбештереү, ярлыҡтар ҡырҡыу кеүек еңел генә хеҙмәттәр өсөн ҙур ғына эш хаҡы вәғәҙә итәләр. Бындай иғландарға ышанырға буламы?**

- Тап ана шундай вәғәҙәләрҙән албырғап, кеше, ғәҙәттә, төптән уйлап тормай, алдаҡҡа юлыға: техника ярҙамында башҡарыла торған бындай ваҡ-төйәк операцияны осраҡлы кешеләрҙән эшләтеп, почта сығымдарына әллә күпме аҡса түгә буламы һуң эш биреүсе? Әлбиттә, бындай иғландарға ышанырға ярамай: һаҡ булығыҙ - һеҙҙе алдайҙар һәм бик тә белекле рәүештә ялғанлайҙар. Мәҫәлән, һынамаҡҡа ғына булһа ла иғланда күрһәтелгән адрес йәки телефон буйынса мөрәжәғәт итеп ҡарағыҙ әле, һеҙгә материалдар, күрһәтмә-инструкциялар һәм теркәлеү өсөн, шулай уҡ "эш килтереүсе" курьер хеҙмәте фирмаһына түләү өсөн тип, алдан аҡса һораясаҡтар. Сумма әллә ни ҡот осорлоҡ ҙур булмаһа ла, бындай мутлыҡ ҡармағына ҡабыусыларҙың бер һеҙ генә түгеллеген иҫәпкә алһаң, байтаҡ ҡына аҡса йыйылыуы күренә. Шуға ла алдаҡсыларҙың ҡорбанына әүерелмәҫ өсөн бер ҡасан да алдан түләү шарты менән килешмәгеҙ. Эш биреүсе тураһында Интернеттан мәғлүмәттәр эҙләгеҙ. Вәғәҙәләр өсөн генә таныш булмаған кешеләргә аҡса биреүҙән тыйылығыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: еңел-елпе эш өсөн ҙур аҡса түләмәйҙәр.Эшкә алыуҙың рәсми тәртиптәрен боҙған фирмаларҙан алыҫ йөрөгөҙ.

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ ХОҘАЙ ҺАҠЛАР

**Яңыраҡ бергә эшләгән хеҙмәттәшебеҙҙең пластик картаһынан аҡсаһын урлағандар. Мин хәҙер банкоматтарҙы урап үтергә, ә карталағы эш хаҡымды һаҡлыҡ кассаһына барып, "тере" кассирҙан һорап алырға тырышам. Бындай бурҙарҙан нисек һаҡланырға икән, өйрәтһәгеҙ ине?**

- Банк картаһы хәҙер һәр кешелә тип әйтерлек бар. Уның менән эш хаҡын, пенсияны алырға,магазиндарҙа, хатта Интернет аша һатып алынған тауарҙар өсөн иҫәпләшергә мөмкин. Ләкин беҙҙе бәләкәй генә магазиндарҙағы йәки ярым ҡараңғы аулаҡ урындарға ҡуйылған ҡайһы бер банкоматтар янында электрон аферистар ҡармағы һағалай. Әйткәндәй, яңыраҡ Һаҡлыҡ банкы клиенттарының карталарынан 800 миллион һум аҡсаның урланыуы хаҡында хәбәр итте. Юридик шәхестәр ҙә, физик берәмектәр ҙә мутлашыусылар ҡорбанына әйләнгән. Енәйәтселәрҙән һаҡланыу өсөн уларҙың төп уғрылыҡ ысулдары хаҡында белергә кәрәк. Беренсе ысул - скимминг, йәғни бурҙар банкоматҡа махсус йәшерен ҡулайлама урынлаштыра. Бының өсөн улар ғәҙәттә ярым ҡараңғы аулаҡ урындарҙы, бәләкәй магазиндарҙағы банкоматтарҙы һайлай. Енәйәтсе карта тыға торған урынға ялған ҡулайлама йәтешләп ҡуя, ә клавиша урынына өҫтәмә клавиатура һала йә булмаһа мини-камера элә. Кеше аҡса алған мәлдә бурҙар уның картаһындағы мәғлүмәттәрҙе һәм пин-кодты асыҡлай. Унан картаның дубликатын эшләп алып, башҡа банкоматтарҙан аҡсаны ҡулға төшөрә. Икенсе ысул - фишинг. Уға нигеҙҙә Интернет селтәре аша әйбер һатып алыусылар эләгә. Хәҙер клиент иҫәбенән алынған аҡсаны кире ҡайтарыуы бик ауыр йә бөтөнләй мөмкин түгел. Банктар тәүҙә 40 көн буйы тикшеренеүҙәр алып бара, аҙаҡ күпселек осраҡтарҙа юғалған сумманы түләүҙән баш тарта. Шуға күрә түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалһағыҙ ине:

- Аҡсағыҙҙы фәҡәт банк офисындағы банкоматтарҙан алырға тырышығыҙ, сөнки бындағы әйләнә-тирә камералар күҙәтеүе аҫтында булғанлыҡтан, бурҙар скиммерҙар ҡуя алмай.
- Интернеттан әйберҙәр һатып алыу өсөн тикшерелгән сайттар менән генә файҙаланығыҙ.
- Картағыҙҙағы мәғлүмәттәрҙе электрон почта аша бер кемгә лә ебәрмәгеҙ.
- Телефонығыҙҙы SMS-мәғлүмәткә тоташтырығыҙ, ул әллә ни ҡиммәт түгел (айына 50-60 һум).

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Аяҡҡа һөйәк үҫһә...

Йомортҡаны стаканға һалып, 100 мл шарап һеркәһе ҡойорға һәм ҡараңғы урында йомортҡаның тышы ireп бөткәнсе, сама менән 3-4 көн торорға. Унан һуң йомортҡаны һеркәнән алып, шекәрәһен тишергә һәм ағын түгергә, ә һарыһын һауытҡа һалып, күперткәнсе туҡырға, йомортҡа ҡабығы ирегән һеркәне һәм 100 гр скипидар өҫтәргә. Тик һеркәне лә, скипидарҙы ла яйлап, болғата-болғата ҡойоғоҙ. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы ҡара быялалы һауытҡа ҡойорға һәм һалҡын урында һаҡларға. Дауаны кисен, түбәндәгесә үткәрергә: ҡайнар һыуҙа диңгеҙ тоҙо иретергә. Диңгеҙ тоҙо булмаһа, ябайы ла ярай. Әҙерәк һыуынғас, йөн туҡыманы уға тығып алырға һәм ауыртҡан урындарҙы (һөйәктәрҙе) ышҡырға, ҡоро таҫтамал менән һөрткәс, яҡшылап болғатылған ҡатнашманы һөртөргә. Ҡоро йөн туҡыма менән ҡаплап, ҡағыҙҙан йылытыусы компресс эшләргә, уны бәйләп йәки ойоҡ кейеп, иртәнгә тиклем торорға. Был процедураны 7-10 тапҡыр ҡабатларға.

## Йүткереү

❖ 2 ҡалаҡ иҙелгән һарымһаҡты 100 грамм аҡ майға ҡушып болғатығыҙ. Ошо май менән төнгөлөккә аяҡ табандарын майлағыҙ, ойоҡтар кейегеҙ. Был дауа тиҙ арала ярҙам итә;

❖ бер тигеҙ өлөштә ҡырғыстан үткәрелгән һуған, алма һәм бал алып, бергә бутағыҙ. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итегеҙ. Алма ҡабығын эҫе һыуҙа төнәтеп, шуны эсегеҙ.

❖ ҡара торманы соҡоп, уны шәкәр йәки бал менән тултырығыҙ. Бер тәүлектән һуң барлыҡҡа килгән һутты көнөнә бер тапҡыр эсегеҙ;

❖ 1 стакан күләмендә кәбеҫтә алығыҙ, уға биш стакан һыу ҡойоғоҙ һәм 30 минут ҡайнап ултырған һыуҙа тотоғоҙ. Артабан уны һөҙөп, баштағы күләмгә етһен өсөн һыу өҫтәргә кәрәк. Килеп сыҡҡан төнәтмәгә 200 грамм бал өҫтәгеҙ. Йылы көйөнсә көнөнә 3-5 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Был дауаны ҡаҡырыҡты шыйығайтып, уның сығыуын еңеләйтеү өсөн ҡулланырға була;

❖ йүткереү ныҡ йонсотҡанда ошондай дауа ҡулланып ҡарағыҙ: 1 стакан һөттө ҡайнатып сығарғас та уттан алығыҙ һәм 1 ҡалаҡ аҡ май, 1 ҡалаҡ бал, бысаҡ осонда сода, 1 сей йомортҡаның һарыһы, иң һуңынан 2-3 тамсы 5 процентлы йод өҫтәгеҙ. Балаларға көнөнә 3 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсерергә. Һыуытҡыста һаҡларға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✔ *Ауырыу аш менән инә, аш менән сыға, тиҙәр. Баланың йәшенә ҡарап, аҙыҡ төрөн һайларға кәрәк. Күберәк тәбиғи ризыҡҡа мөрәжәғәт итеү отошло. Бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән һәм етештерелгән аҙыҡ файҙалы.*



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Ун туғыҙынсы дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Исламдың әхлаҡи ҡиммәттәре. Әйтеп үтеүебеҙсә, бөтөн донъя диндәре лә кешелек донъяһын яҡшылыҡ юлына өндәй. Уҡыусылар был төшөнсәләрҙе нисек аңлай икән? Уны белеү өсөн түбәндәге һорауҙарға яуап бирһендәр. "Нимә ул яҡшылыҡ? Һеҙ уны нисек аңлайһығыҙ? Әйҙәгеҙ, Яҡшы кеше сифаттарын яҙайыҡ. Унын өсөн һәр берегеҙ үҙ затығыҙҙан иң абруйлы, иң күркәм һәм иң мөһиме - үҙегеҙ яратҡан кешенең яҡшы сифаттарын дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ". Өйгә эш биреп, уҡыусылар дәфтәрҙәренә яҙғандан һуң, дөйөмләштереп таҡтаға яҙырға кәрәк. Шунан "Кешелә булырға тейешле яҡшы сифаттар исламдағы әхлаҡи ҡиммәттәргә тап киләме?" тип, дәреслектәге темаға күсергә кәрәк. Ә инде илһөйәрлек темаһына күскәндә, һәр бала үҙ нәҫеләндәге, ауылындағы, районындағы билдәле батыр яугирҙар тураһында мәғлүмәттәр килтерһен. Әлеге ваҡытта 1812-1814 йылғы һуғыш материалдары буйынса мәғлүмәттәр күп. Бөгөнгө көнгә ҡайтһаҡ, түбәндәге һорауҙы бирергә мөмкин: "Беҙ ҡайны батырыбыҙға Герой исеме биреүҙәрен юллайбыҙ әле?" Уҡыусыларҙы уйландырып алыу яҡшы булыр.

### Ун туғыҙынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Рәсәй диндәре тарихы. Был тема ауыр, ҡатмарлы. Уҡыусының хәтерендә төп фекер ҡалһа, артабан һәр береһе үҙ һәләте, үҙ теләге һәм ҡабул итеү ҡеүәһе, ҡыҙыҡһыныуы кимәленән сығып яйлап үҙләштерер. Тема буйынса төп фекер ниҙә һуң? Кеше ниндәй генә дин тотмаһын, унын үҙ иленә булған тоғролоҡ тойғоһо бер ваҡытта ла үҙгәрмәй. Мәҫәлән, илебеҙҙәге халыҡтарҙың барыһында ла илһөйәрлек тойғоһо иҫ китмәле көслө. Улар илде дошман ҡулында ҡалдырмаҫ өсөн һәр ваҡыт бер булып күтәрелгән. Бөгөн күп кенә йәштәр еңел тормош эҙләп, сит-ят илдәргә сығып китә, шунда донъя ҡора. Әммә ҡырҡ йәштәрҙән уҙғас, иҫ китмәле һағыныу тойғоһо башлана. Тик һин сит илдә ғаилә булдырғанһың, ниндәйҙер дәрәжәгә өлгәшкәнһең. Барыһын да ташлап ҡайтып китеп булмай. Әммә һағыныу тойғоһо шул тиклем көслө була. "Ни эшләп беҙ бында? Кемгә кәрәкбеҙ? Кем өсөн йәшәйбеҙ? Ҡайҙа беҙҙең сер бүлешер иң яҡын туғандар, дуҫтар? Кемгә хеҙмәт итәбеҙ? Иң төп байлыҡ - тыуған ил, туғандар, дуҫтар, тыуған мөхит икән", тип, көндәлек бошоноу менән үтәсәк ҡырҡ йәштәрҙән һуңғы үмер. Был тәбиғи торош һәм бөтөн кеше лә уны башынан үткәрә, тик төрлө кеше был һағыныу һағышын төрлөсә үткәрә. Шуның өсөн: "Ни өсөн ил дошманына ҡаршы ааяуһыҙ күтәрелгән атай-олатайҙарыбыҙ?" - тигән һорауға ошондай аңлатма биреп, бала күңеленә тыуған ил йылыһы тигән изге тойғоно һалып ҡуйырға кәрәк.

Диндәр тарихы тураһында һөйләгән саҡта, шуға иғтибар итергә кәрәк: бер үк динле булыу - бер үк традициялы, бер үк ғөрөф-ғәҙәтле тигәнде аңлатмай. Милли үҙенсәлек дини үҙенсәлеккә бөтөнләй тап килмәй. Беҙҙең заманда илдәр менән илдәр араһында аралашыу көслө, әммә был, динебеҙ бер үк бит, тип, халыҡтар буталышына килтерергә тейеш түгел.

### Ун туғыҙынсы дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Әхлаҡлы халыҡ. Башҡорт халҡында әхлаҡлы ҡылыҡ тураһында мәҡәлдәр байтаҡ. Шул мәҡәлдәр нигеҙендә аңғамә ҡороу яҡшы булыр. Мәҫәлән, "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ" тигән мәҡәл менән халҡыбыҙ ни әйтергә теләгән һуң? "Берәй эш башлар алда ете ҡат уйла. Һин ошо эште башҡарам тип, күберәк нәмә юғалтмайһыңмы?" тигән фекер ята унда.

Һәр эште эшләр алда, иң элек кәңәш ҡороу, план төҙөү, аҙағының ни менән тамамланырын уйлау дөрөҫ була. "Урал батыр" эпосында Урал, үҙ хаталарын аңлағандан һуң, былай ти:

*Батырлыҡҡа маһайып,*
*Кәңәш ҡороп торманым,*
*Яңғыҙ башым уйланым,*
*Уңмаҫ юлды һайланым.*
*Яуызға юлдаш булмағыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.*

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун дүртенсе һабаҡ: "Балаға кәрәкле аҙыҡ ашатыу"




**"Балам насар ашай. Ниндәй кәңәш бирерһегеҙ икән?" тип шылтыратҡайны телефондан бер йәш әсә. Бер аҙ кәңәштәр биргәйнем. Әле рәхмәт әйтеп тағы шылтыратты. "Балам һауығып-матурланып китте. Рәхмәт", ти. Ашауға сибек балаһы менән яфаланған әсәйҙәргә ярҙамға гәзит биттәре аша кәңәштәремде яҙырға булдым.**

Бала, ғәҙәттә, тәм-томға әүәҫ. Был әүәҫлекте ваҡытында сикләмәһәң, әлбиттә, унын ашҡаҙанына зыян буласаҡ, сөнки тәм-томдо саманан артыҡ ашатыу унын башҡа аҙыҡтарға тартымын кәметә.Билдәле булыуынса, бала организмы үҫешһен өсөн ризыҡтың һәр төрләһө, бигерәк тә туҡлыҡлыһы, туйымлылығы юғары булған аҙыҡ кәрәк. Ундайҙарға икмәк, айырыуса ҡара икмәк, һөт аҙыҡтары, һәр төрлө ярмаларҙан бешерелгән бутҡа, картуф, йәшелсә, елək-емеш, һурпа, талҡан, буҙа, емеш-еләк кесәле һәм башҡа ошондай тәбиғи аҙыҡтар инә. Ашауға ҙур иғтибар биргән әсәйҙәр, әлбиттә, һәр ваҡыт консерва, пакеттағы ҡаты-кото, тәм-том, ярым бешерелгән аҙыҡ, колбаса ашатыуҙы нык сикләй. Бала, мәҫәлән, бутҡа ашауға әүәҫ түгел икән - ни эшләргә? Ә бит бутҡаның һәр төрләһен ашатырға кәрәк. Ҡарабойҙай, һоло, тары, бойҙай, дөгө, манный һәм башҡа төр ярмаларҙан бешерелгән бутҡа.

Үҙ тәжрибәмдән сығып, бернисә кәңәш бирмәксемен. Бутҡаны, бигерәк тә һоло ярмаһынығын, бала ихлас ашамай. Шуның өсөн мин тәүҙә бутҡа бешереп, аҙ ғына он һәм йомортҡа ҡушып ҡоймаҡ итеп ҡоям. Ә ҡоймаҡты һәр бала ихлас ашай. Тәмен тойоп, ҡабул иткәс, аҡрынлап ҡына бутҡаға күсерәм.

Тағы бер миҫал. Ашҡаҙаны туҡтауһыҙ ауыртҡан бер баланы ҡарарға тура килде. Усы тулы төймә дарыу. Сәғәткә ҡарап ҡына әсәһе әйткәнсә дарыу эсә. Буҙа бешерҙем - эсмәй. Бер балғалаҡ ҡына буҙа алдым да: "Тәмләп ҡара әле. Тел осона ғына һал. Хәҙер дарыуыңды ялап ҡара", - тим. "Уны яларға ярамай. Әсе. Йоторға ғына кәрәк", - ти бала. "Ә ашҡаҙанына ниндәй дарыу эләккәнен белергә кәрәк бит. Ялап ҡара", - тип нығышам. "Нык әсе". "Ә буҙа нисек һуң?" "Ул әсе түгел", - ти бала. "Ул да дарыу бит. Ашҡаҙаныңа файҙалы", - тим ышаныслы итеп. "Буҙа эсһәм, был дарыуҙы эсмәһәм дә яраймы?"- тип йәнләнеп китә бала. "Ярай". "Атыу, буҙа эсәм. Күпме эсергә ярай?" "Күпме теләһәң - шул тиклем". Һөҙөмтәлә ул малай көнөнә 4-5 стакан буҙа эсә башланы. Дарыу кәрәкмәне лә. Бына алтынсы йыл инде ул ашҡаҙан ауырыуы менән яфаланмай.

Мин врачтар тәғәйенләгән дауалау сараларын инҡар итмәйем. Әммә шулай ҙа баланың ашҡаҙанын бәләкәйҙән дарыу менән боҙмау, ә аҙыҡҡа нығыраҡ баҫым яһау яғындамын. Ауырыу аш менән инә, аш менән сыға, тиҙәр. Баланың йәшенә ҡарап, аҙыҡ төрөн һайларға кәрәк. Күберәк тәбиғи ризыҡҡа мөрәжәғәт итеү отошло. Бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән һәм етештерелгән аҙыҡ файҙалы. Мәҫәлән, йогурттың ни дәрәжәлә файҙалы булыуын әйтә алмайым, ә шулай ҙа йәйге айҙарҙа - яландағы, туғайҙағы, баҡсалағы еләкемеште, ҡышын туңдырылған емеш-еләкте кефирға йәки ҡатыҡҡа һалып һәйбәтләп татытып, өй йогурты, башҡортса әйткәндә, емешле ҡатыҡ яһап биреү күпкә отошло. Бер стакан кефир йәки ҡатыҡҡа бер балғалаҡ һоло талҡаны йәки башҡа төр талҡан һалып, аҙ ғына елəк-емеш өҫтәп ашатыу татлы ла, файҙалы ла, туҡлыҡлы ла. Яҡшы итеп туғып бирһәң, бынамын тигән эсемлек килеп сыға. Тәүҙә, ҡыҙыҡтырып ебәреү өсөн, сынаяҡтың төбөнә бер нисә бөртөк ваҡ ҡына борсаҡ кәнфит һалып ебәрергә лә мөмкин. Бәләкәстәр болғаған һайын ҡалҡып сыҡҡан төрлө төҫтәргә ҡыҙығып эсеп өйрәнә. Икмәк ашамаған балалар ҙа осрағылай. Йоҡа ғына киҫелгән телемгә йоҡа ғына май яғып, баланың үҙенә: "Әйҙә, үҙеңә торт яһап аша әле", - тип, икмәк өҫтөнә емеш-еләк һалдыртып алдаштырһаң, бер-нисә телем икмәк ашалғанын һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Ашауға сибек баланы ашауға ихлас бала менән бер аҙға бергәрәк тотоу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. Балерина Элеонора Ҡыуатовалар менән күрше йәшәгәндә, ул яңғыҙ үҫкән, ашау мәсьәләһендә ҡатмарлыҡтар тыуҙырған улын беҙҙең балалар янына ашарға алып ингеләй ине. Минең ишле балаларым менән бергә ихлас ашай торғайны ул. Әсәһенең әйтеүенсә, өйҙә бөтөнләй ашарға теләмәгән аҙыҡтар ҙа унын яратҡан ашамлығына әйләнә ине.

Ашауға сибек баланы шулай уҡ аш-һыу әҙерләшергә ылыҡтырып, үҙенән бешертеп, үҙе бешергән аҙыҡ менән үҙен һыйлау ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. Бала берәй ере ауыртыуға һылтанһа, "тап ана шул ауыртҡан еренә дауа булырлыҡ" аҙыҡ тәҡдим итергә кәрәк: "Һин арыш икмәге ашамайһың бит. Ә унда В витамины шул тиклем күп, ә был витамин теш һыҙлауын баҫа ла инде", - тиһең. Йәки: "Бына һөт эс әле. Унын өҫтөндә генә әллә күпме А витамины. Тамаҡ ауыртыуың бөтөр. Ә һөттөң төбөнә шәп йүгертә торған витаминдар йыйылған. Картуфты ҡабығы менән аша. Унда бер ниндәй дарыу менән алмаштырып булмай торған витаминдар була. Ул кешенең йөрәгенә файҙа. Йөрәгең һау булһа, көслө булаһың, ә көслө кеше бер нимәнән дә ҡурҡмай". Һәм башҡа шундай алдаштырыуҙар табырға кәрәк. Тик бер әйткәндә - бер төрлө, икенсеһендә икенсе төрлө әйтергә ярамай. Бала хәтере яҡшы. Ул онотмай. Ниндәй аҙыҡтың ниндәй витаминға бай һәм ниҙән файҙалы булыуын ҡайһылай етте - шулай түгел, ә дөрөҫ итеп әйтергә кәрәк.

Шулай итеп, балам ашамай, ашатып булмай, тип, зарланыу дөрөҫ түгел. Һау бала ашай ул. Тик сирле баланың ғына ниндәйҙер аҙыҡтан баш тартыуы ихтимал, әммә бында һүҙҙе сәләмәт балаларҙың туҡланыуы тураһында алып барҙыҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БЫУАТ ТӨПКӨЛДӘРЕН БАЙҠАП



### Бабсаҡ бей мәжүси булғанмы?

Ислам динендә ҡәбер өҫтөнә ҡурған өйөү, ҡорал менән ерләү юҡ һәм тыйыла. 1950 йылдар аҙаҡтарында Н. Мәжитов етәкселегендә Бабсаҡ ҡурғанын ҡаҙғанда, был эште күҙәтеп торған кешеләр "ҡылысы ла сыҡҡайны" тип хәтерләй. Үрҙә әйтелгән Бабсаҡ, Күсәк, Алмай, Боҫҡон, Иҡусан, Борондоҡ - боронғо төрки исемдәре һәм улар ислам дине индерелгәс ҡулланылыштан сыға. Бик һирәктәре генә һаҡланып ҡала. Был кире ҡаҡмаҫлыҡ факттар Бабсаҡ бейҙең, унан һуңғы бейҙәрҙең мәжүси булыуҙарын иҫбатлай. Әлбиттә, Булғария, аҙаҡ Ҡаҙан ханлығы йоғонтоһо аҫтында булған төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына ислам иртәрәк үтеп инә. Был хаҡта XIII быуатта Венгриянан ҡанҡәрҙәштәрен эҙләп килеүсе монах Юлиан да яҙып ҡалдырған.

### Оранның кем? Тәңре!

Ҡыпсаҡтар Алтайҙан Венгрияға тиклемге территорияны Тәңре байрағы аҫтында яулауын онотторға ярамай.

Оран - беренсенән, ырыуҙаштар араһында бер-береһен таныу өсөн серле "пароль" булһа, икенсе киңерәк мәғәнәһе - боронғо тынысһыҙ ваҡытта яуға, алышҡа саҡырып ҡысҡырған һүҙ йәки яу ораны. Тәңренән ярҙам һорап оран ҡысҡырыу һуғышсан рухты ғына күтәреп ҡалмай. Ә ҡыҙыу алыш ваҡытында дошманды үҙендекеләрҙән айырырға ла ярҙам итә. Оран ҡайһы бер ырыуҙарҙа данлыҡлы ата-бабаның, ырыу башлығының исемен дә йөрөткән.

### Сағыштырыу өсөн

Ғәлиәкбәр ауылы янында ҡырғыҙ бейе ҡурғаны ла бар. Үткән быуаттарҙа ҡаҙаҡтарҙы ҡырғыҙ йәки ҡырғыҙ-ҡайсаҡтар тип йөрөткәндәр. 1731 йылда беҙгә күрше төньяҡ-көнбайыш Ҡаҙағстан Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушыла. Был территория заманында Алтын Урҙаның төп өлөшөн тәшкил иткән була. Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем Ҡаҙағстан тулыһынса Тәңрегә табына. Һүҙ ыңғайында әйтеп үтергә кәрәктер, Ҡаҙағстан далаларында ҡалған ҡыпсаҡ ҡәбиләләре менән башҡорт ҡыпсаҡтары араһында туғанлыҡ ептәре оҙаҡ ваҡыттар һаҡлана. XVIII быуатта булып үткән ихтилалдарҙан һуң батша карателдәренән ҡасып, башҡорт ҡыпсаҡтары ҡаҙаҡ далаларында - ҡаҙаҡ ҡыпсаҡтарында үҙҙәренә һыйыныу таба. Быныһы инде айырым тема.

Ҡаҙаҡ шағиры А. Атабеков "Тенгрианство" мәҡәләһендә түбәндәгеләрҙе яҙып үтә: "...Ҡаҙағстан Рәсәй составына ҡушылғас, батша указы менән Тәңрегә табыныусыларҙы мосолманға әйләндереү өсөн йөҙәрләгән татар муллаһы ҡаҙаҡ далаларына ебәрелә. Бының маҡсаты - малсы күсмә халыҡты ултыраҡ тормошҡа күсереү. Аҙаҡ үҙ нәҫелдәрен бәйғәмбәрҙәр менән бәйләгән милли руханиҙар ҡатламы барлыҡҡа килә". Күренекле ҡаҙаҡ этнографы, тарихсы, сәйәхәтсе Ш. Вәлиханов үҙенең яҙмаларында XIX быуат уртаһында ла ҡаҙаҡтар араһында мәжүсилектең көслө булыуы һәм хатта Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе белмәүселәр барлығын билдәләп үтә.

### Ерлек тарихынан

Халыҡтың быуаттар буйына инанған, табынған, аңына, ҡанына һеңгән рухи ҡиммәттәрен ҡапыл ғына ҡырҡып алып ташлап булмай. Ислам индерелгәс тә "Тәңре", "Хоҙай" һүҙҙәре Алла исеменең синонимына әйләнә. "Күрше хаҡы - Тәңре хаҡы" тиҙәр халыҡта. "Тәңре - ул Хоҙай. Тәңрем тип әйтһәң, Хоҙай ҡыуанып китер", тип әйтәләр ине борон", - тип иҫләй Иҫке Монасип ауылынан 86 йәшлек Хаят Муллағолова инәй. Ислам йолалары менән бер рәттән, мәжүсилек йолалары оҙаҡ ваҡыт бергә атҡарылып килә.

1770 йылда Шүлгән мәмерйәһен күреп, яҙмаларында теркәп киткән рус этнографы И. Лепехин урындағы башҡорттар тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр ҡалдыра. "Үҙе шайтанға оҡшап торған" шайтан-күрәҙәсенең мылтыҡтан атып, ҡылыс менән шаушыу күтәреп, ауырыу ятҡан өйҙән яуыҙ рух йәки шайтанды ҡыуып сығарыуын һүрәтләй. Шул уҡ ваҡытта мәйет ерләүҙе мулла алып барыуын билдәләп үтә.

Байназар ауылынан Ғәлимйән Ишбулатов ен ҡыуып сығарыу маҡсатында өй эсендә (1945 йылда) мылтыҡтан атыуҙарын һөйләгәйне. "Шуныһы ҡыҙыҡ, шунан һуң ағайым терелеп китте бит, берәй ғилләһе булғандыр", - ти ул көләмһерәп.

Ғөмүмән, беҙҙең бейек тауҙар, ҡалын урмандар менән кәртәләнгән төбәгебеҙгә ислам нуры еңел генә үтеп инмәгән. Шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙҙың рухи мәҙәниәт ҡомартҡыһына әйләнгән ҡот ҡойоу, ноҡот һалыу кеүек йолаларҙы ла онотторға ярамайҙыр.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы.**
**(Аҙағы. Башы 1-се һанда).**

*ШАҢДАУ*

# КЕМДӘ НИНДӘЙ ҺӘЛӘТ БАР?

**Гәзитебеҙҙәге Башҡортостан юлдаш телеканалының "Белергә кәрәк" тапшырыуын алып барыусы Искәндәр Сәйетбатталов һәм Ырымбурҙан 17 йәшлек полиглот Вячеслав Чернев менән ҡоролған әңгәмәләрҙе һәр кеше һоҡланып уҡығандыр. Был егеттәрҙең икеһе лә яулаған уңыштарында уҡытыусыларының төп урынды биләп тороуын билдәләй.**

Ғалимдар, беҙ мейебеҙ мөмкинлектәренең бик аҙ өлөшөн файҙаланабыҙ, ҡулланабыҙ, ти. Бигерәк тә беҙ, әлеге оло быуын, 1941-1945 йылдарҙағы һуғыштан һуң килгән тыныс мөхиттә ирәйеп, йәшлегебеҙҙе йоҡомһорап, йырлап-бейеп үткәрҙекме икән, тип тә уйлап ҡуям. Әлбиттә, аслыҡ, юҡлыҡ әле 1950 йылдарҙа дауам итте. Эшләп уҡыныҡ, әҙип әйткәнсә, "Фәҡирлектә үткән тереклек..." булды ул йылдар, етәкселәр нимә һөйләй, шул дөрөҫ, тип ышанып йәшәнек. Тыуған илебеҙгә янаясаҡ төрлө хәүефтәр, бөгөнгө рухиәт көрсөгө хаҡында бер уй ҙа килмәй ине башыбыҙға. Туған телгә ябырыласаҡ хәүефте лә күҙ алдына ла килтермәнек.

Беҙҙең быуында ҡатнаш милләтле ғаиләләр ишәйҙе, ул ғаиләләрҙә тик урыҫ телендә һөйләшеү модала ине. Бына хәҙер барыбыҙ ҙа ҡапыл уянып киткәндәйбеҙ, беҙҙең быуын хаталарын нисек төҙәтергә һуң, тип баш ватабыҙ. Минең фекерем шулай: урыҫтар әйтмешләй, "Зри в корень!" Кешенең тамыры бала саҡта ныҒый. Шуға, һәр башҡорт ғаиләһенең "дәүләт теле" башҡорт теле булһын. Ата-әсә үҙе йүнләп туған телендә һөйләшә белмәһә лә, балаһын был телдә һөйләштереү хәстәрен күрергә бурыслы. Бының өсөн һәр балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө булдырыуҙы, мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен исем өсөн түгел, ә иң яҡшы кимәлдә уҡытыуҙы талап итеү - һәр ата-әсәнең тормошҡа ашырылырға тейешле хоҡуғы. Ихлас теләк булғанда, туған телде балалар баҡсаһынан һәм мәктәптән тыш та өйрәнеп була, тип уйлайым. Ана, И.Сәйетбатталовҡа тыуған телгә һөйөү олатаһы аша күскән, ә сит милләт егете В.Чернев уны үҙ аллы өйрәнгән һәм бынамын тигән итеп һөйләшә, хатта башҡорт балаларының рус һүҙҙәре ҡушылып киткән лөғәтен тәнҡитләргә лә тартынмай.

Был урында "Һәр кемдең дә И. Сәйетбатталов йә Вячеслав Чернев кеүек егеттәрҙәгесә телгә һәләт булмай бит", тип аҡланыусы ла табылыр. Эйе, һәр кем полиглот була алмай, әммә туған телеңде өйрәнеү өсөн полиглот булыу кәрәкмәй. Айырым һәләт тә кәрәкмәйҙер. Туған тел - ул һинең ҡаныңда, булмышыңда, ул һәр саҡ һиңә тауыш биреп, үҙен белгертеп тора.

Ә һәләт - ул икенсе. Ҡаныңда ла була ул, үҙләштергәне лә була. Мин үҙем һирәк осрай торған керамика, фарфор скульптураһы һөнәренә эйәмен. Быныһы - өйрәнгән, үҙләштергән һөнәрем. Тәбиғәттән бирелгән һәләттәрем дә бар. Мәҫәлән, бала саҡта һыуға бата яҙғандан һуң бер һәләткә эйә булдым. Үҙемде һәм үҙем менән булған күренеште күктән һәм ситтән күҙәтә беләм. Һәм тағы. Миңә сәләм биреп үткән кешенең һынын күңелемдән генә төрлө биналар янына ҡуйып ҡарайым да, тиҙ арала ул кешенең ҡайҙа эшләүен һәм кем икәнен төҫмөрләп алам.

Һүҙемдең аҙағында "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларҙы төрлө ғәҙәти булмаған, үҙҙәре үҫтергән һәләттәре тураһында яҙып ебәреүҙәрен үтенге килә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

"Яңы башҡорттар" тип аталған ҡатлам барлыҡҡа килеү менән Башҡортостан халҡының составы һиҙелерлек үҙгәрә. Рус властары, башҡорттарҙың ерҙәренә припущенниктар килеп ултырғас, башҡорттарҙың айырымланыуын булдырмау өсөн кантондарға бүлгәндә (1798 йыл), уларҙың бишәүһенә мишәрҙәрҙе, ә ҡайһы бер төньяҡ-көнбайыш кантондарға типтәрҙәрҙе индерә. 1863 йылда донъя күргән "Башҡорттар тураһындағы положение" шулай уҡ типтәрҙәргә, мишәрҙәргә һәм ниндәйҙер кимәлдә татарҙарға ла ҡағыла. Шул сәбәпле, бигерәк тә башҡорттарҙың ер милексәләре булараҡ сағыштырмаса өҫтөнлөклө хәле һөҙөмтәһендә, типтәрҙәр ҙә, мишәрҙәр ҙә үҙҙәрен башҡорттар тип атай башлай. Шулай итеп "яңы башҡорттар" барлыҡҡа килә.

Батша хөкүмәтенең сәйәсәте "ирекле" ерҙәрҙе асыҡлау маҡсатында 1898 йылда башҡорт ерҙәрен межаларға бүлеү, башҡорттарҙың дөйөм ҡулланылышында ҡалған, әммә ирекле ерҙәрҙе асыҡлауға йүнәлдерелә. Был ирекле ерҙәр община тарафынан һатыла ла алған. Межалау ваҡытында властар айырым ырыуҙарға йәки уларҙың бүлексәләренә төрлө йылдарҙа бирелгән грамоталар нигеҙендә аҫабалыҡ хоҡуғын тикшергән һәм был ерҙәр айырым башҡорт дайсалары (дача) итеп билдәләнгән. Шул уҡ ваҡытта башҡорт ерҙәренә килеп ултырған припущенниктар өсөн дә ерҙәр бүленгән.

Тикшереү барышында шул да асыҡлана: бөтөн ерҙәрҙә лә башҡорттарҙыҡы булып иҫәпләнгән башҡорт дайсалары уларҙың милке булмай сыға. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ергә аҫабалыҡ хоҡуғы хөкүмәт тарафынан хөкүмәткә башҡорт ихтилалдарына ҡаршы көрәштә айырым хеҙмәт күрһәткән мишәрҙәргә бирелә һәм рәсми документтарҙа милексәләр аҫаба башҡорттар тип һанала башлай. Икенсе яҡтан, грамоталарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан төп башҡорттар ергә булған аҫабалыҡ хоҡуғын юғалта һәм припущенник тип иҫәпләнә. Шундай осраҡтар ҙа күҙәтелә: ҡайһы бер алыҫ башҡорт дайсаһының төп башҡорттары икенсе дайса башҡорттары араһында йәшәгәндә припущенниктар хоҡуғында була.

## Шөғөлдәре һәм йәшәү рәүеше

Башҡорттарҙың төп шөғөлө һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ, балыҡсылыҡ, солоҡсолоҡ, малсылыҡ һәм ер эшкәртеү булған. Тәбиғәт шарттарына бәйле, бер районда бер шөғөлгә өҫтөнлөк бирелһә, икенсе райондарҙа икенсе эште хуп күргәндәр. Ваҡыт үтеү менән Башҡортостан территорияһына Волга буйы халыҡтары (татарҙар, мишәрҙәр, мариҙар һ.б.) һәм бигерәк тә ул ваҡытҡа юғары ер эшкәртеү мәҙәниәтенә эйә рустар күсенеп килгәс һәм башҡорттар үҙҙәре лә ерҙәрен эшкәртә башлағас, һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ, балыҡсылыҡ, солоҡсолоҡ яйлап үҙенең әһәмиәтен юғалта башлай. Ялан райондарында өҫтөнлөклө булған мал көтөү ваҡыты-ваҡыты менән кәмеп, шунан ҡабат тергеҙелеп, был райондарҙың төп шөғөлө булып ҡала. Ер эшкәртеү йорт хайуандарын үҫтереү менән бер рәттән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары хужалығының төп тармағы була һәм башҡорттарҙың хужалыҡ тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә булып, киң таралыу ала. Башҡорттарҙың ерһеҙ ҡалыуының эҙемтәһе булып малдарҙы көтөүлектәрҙә көтөү осраҡтары кәмей, ялан райондарында ла ер эшкәртеү яйлап үҫеш ала, ә XX быуатта инде барлыҡ башҡорттарҙың да төп шөғөлө булып китә.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ринат ағайым өсөн әсәйебеҙ тормош идеалы булды. Әгәр ҙә улар икеһе бер юлы өйҙә булһа, сәғәттәр буйына һөйләшәләр ине. Шул тиклем оҙаҡ итеп һөйләшергә темаһын да таба торғайнылар.*



# ЕТӘКЛӘШЕП ҠОЯШ

**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының антропология һәм этнология бүлеге мөдире, тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй һәм Европа этнографтары һәм антропологтары ассоциациялары ағзаһы Ринат Мөхәммәт улы Йосоповтың беҙҙең аранан ваҡытһыҙ китеүенә ошо көндәрҙә ике йыл тула. Арҙаҡлы ғалим 2011 йылдың 14 ғинуарында 59 йәшендә донъя ҡуйҙы. Күренекле башҡорт ғалимының тыуыуына 60 йыл тулған көндәрҙә Өфөлә "Йосопов уҡыуҙары" Халыҡ-ара ғилми конференцияһы уҙғарылды. Унда сығыш яһаусы Мәскәү ғалимәһе, билдәле антрополог Надежда Дубова: "Ринат Йосопов кешене өйрәнеүсе Рәсәй ғалимдарының иң күренеклеләренең береһе ине һәм уның беҙҙең аранан иртә китеүе бөтәбеҙ өсөн дә оло юғалтыу", - тип, ғалимдың Рәсәй, донъя фәнендә тотҡан урынын билдәләне.**

**Ринат Мөхәммәт улының башҡорт тарихы фәненә индергән өлөшө лә баһалап бөткөһөҙ. Ғалимды хаҡлы рәүештә башҡорт антропологтары һәм краниологтары мәктәбенә нигеҙ һалыусы тип тә атайҙар. Нимә генә булмаһын, тарихты өйрәнеүҙә ул нигеҙ һалған йүнәлеш киләсәктә үҫеш аласаҡ һәм ғалимдың хеҙмәттәре һәр ваҡыт фәнгә һәм халҡыбыҙға хеҙмәт итәсәк. Ғалимдың баш һөйәктәрен өйрәнеп яһаған фәнни һығымталарын, мәҫәлән, һуңғы ваҡыт ҡанды гаплатөркөм буйынса өйрәнеүсе донъя ғалимдары бермә-бер раҫланы. Шуларҙың береһе генә: башҡорт ырыуҙары составындағы бөрйәндәр һәм ғәйнәләр бынан 15 мең йыл элек ошо ерлектә йәшәгән һәм улар беҙҙең милләттең генә түгел, ғөмүмән, кешелектең иң боронғо аҫабалары һанала. Был һығымталарҙы Ринат Йосопов та яһағайны.**

**Ә бына яҡын туғандары өсөн кем булған һуң Ринат Йосопов, улар ниндәй мөнәсәбәттә йәшәгән? Ғалимды иҫкә алған ошо көндәрҙә беҙ уның бер туған һеңлеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре кандидаты, 2-се Республика клиника дауаханаһының баш табип урынбаҫары Рәшиҙә Мөхәммәт ҡыҙы ЙОСОПОВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Ғүмеренең һуңғы йылдарында Ринат ағай беҙҙең редакция менән бик тығыҙ бәйләнештә йәшәне. Ул яңы фәнни асышы менән һәр ваҡыт беҙҙә сығыш яһарға ынтылды, әле генә яҙған ғилми мәҡәләһененең иң тәүҙә беҙҙә баҫылып сығыуын теләне. Редакцияға килеп, сәғәттәр буйына әңгәмә ҡороп ултырған саҡта уға коллегалары, дуҫтары, туғандары бик йыш шылтырата ине. Әңгәмәне өҙөп булһа ла, һәр бер шылтыратыусыны тыңлап, уның йомошон телефон аша булһа ла хәл итергә тырышыр, хәл итеп булмаған хәлдә лә, шылтыратыусының күңелен йыуатырлыҡ һүҙҙәр таба белер ине. Был нимә тураһында һөйләй? Эйе, Ринат Мөхәммәт улы һәр ваҡыт барыбыҙға ла: милләтенә, фәнгә, коллегаларына, дуҫтарына, туғандарына кәрәкле кеше булды. Ул, ғөмүмән, үҙенә кәрәк булған өсөн түгел, кешеләргә кәрәк булған өсөн йәшәне кеүек. Йөрәгенә донъя һыйҙы уның. Уның кешеләр менән аралашҡанда үтә иғтибарлы, ихтирамлы мөғәмәләһен күреп, мин бындай интеллигентлығына һоҡланып, был сифатының ҡайҙан, кемдән килеүе хаҡында уйлана торғайным.**

**Р. Йосопова:** Был сифаттары уның атайыбыҙ менән әсәйебеҙҙән башланып киткәндер, тием. Уның шәхесе формалашыуында әсәйебеҙҙең, күренекле педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Мәликә Йосопованың роле ифрат та ҙур булғандыр. Иҫәнғолда алтмышынсы йылдарҙа башланғыс башҡорт кластары ғына бар ине. Әсәйебеҙҙең туҡтауһыҙ йөрөп хәстәрләүе арҡаһында урта мәктәп асылды. Ниндәй генә түңәрәктәр ойошторманы мәктәптә әсәйебеҙ. Барыбыҙ ҙа артистар инек. Ринат ағайым "Перовский"ҙы бик оҫта башҡарҙы, мин дә бейенем. Ауыл ерендә торғас, мал тотабыҙ бит инде. Беҙ ғаиләлә өс бала: Ринат ағайым, мин һәм бәләкәйебеҙ Ришат. Әсәйебеҙ көнө-төнө эштән ҡайтманы, өҫтәүенә, урындағы радиоселтәрҙә 17 йыл буйына диктор булып та эшләне. Шуға күрә, йорттағы эштәрҙе Ринат ағайым менән миңә алып барырға тура килде. Ринат мал ҡараны, һыу ташыны, мейес яҡты, мин өйҙә хужабикә эштәрен теүәлләнем. Беҙ йорттағы эштәрҙе лә башҡарып, түңәрәктәргә лә йөрөп өлгөрҙөк, яҡшы ла уҡыныҡ.

Ринат ағайымдағы интеллигентлыҡ әсәйемдең атаһынан, Ғибаҙулла ҡартатайымдан да тапшырылғандыр, тием. Ул етем генә үҫкән, малай сағында Бохараға йәйәү барып еткән, унда дини ғилем алған саҡта отҡорлоғон күреүселәр артабан уҡыр өсөн Һиндостанға ебәргәндәр. Шунан ҡайтҡандан һуң ул указлы мулла булып торған, ауылда балаларға дини һабаҡ та биргән. Ҡартатайыбыҙҙың мәғрифәткә ынтылышы шул тиклем ҙур булғандыр, ул ат егеп, Ырымбурға барып, унан гәзит-журналдар алып ҡайтып, шуларҙы ауыл халҡына уҡып, донъя, фән, ғилем яңылыҡтарын еткерер булған. Яңылыҡҡа ынтылыуы йәһәтенән Ринат ағайым ҡартатайыбыҙға оҡшағайны. Әлбиттә, ҡартатайыбыҙҙың бындай ғәмәлдәре барыһына ла оҡшамаған, ялыу яҙыусылар ҙа табылған һәм уны алып киткәндәр. Репрессия машинаһы, шулай итеп, уны ла урап үтмәй. Ул ниндәйҙер әмәлен табып, киткән еренән ҡасып та ҡайта. Кемдер тағы ла хәбәр итә, уны тағы ла ҡулға алалар. Аҙаҡ уны бөтөн ғаиләһе менән, әсәйебеҙ ҙә шунда, Кемерово өлкәһенә һөргөнгә ебәрәләр.

**▸ Ир кешенең ниндәй булыуы, асылда, уның әсәһенә ҡарата булған мөнәсәбәтендә сағыла, тиҙәр. Ошо күҙлектән ҡарағанда, ағайығыҙҙың әсәйегеҙ менән мөнәсәбәтендә ниндәй айырым үҙенсәлекте билдәләргә мөмкин булыр ине?**

**Р. Йосопова:** Ринат ағайым өсөн әсәйебеҙ тормош идеалы булды. Әгәр ҙә улар икеһе бер юлы өйҙә булһа, сәғәттәр буйына һөйләшәләр ине. Шул тиклем оҙаҡ итеп һөйләшергә темаһын да таба торғайнылар. Ағайым һәр ғәмәлен әсәйебеҙ менән кәңәшләшкәндән һуң ғына тормошҡа ашыра башлар ине.

**▸ Атайығыҙ хаҡында нимә әйтер инегеҙ? Һеҙгә, Ринат ағайға унан ниндәй сифаттар күсте, тип уйлайһығыҙ?**

**Р. Йосопова:** Атайыбыҙҙың атаһы Фәйзрахман ҡартатай үҙ заманына күрә бик йүнсел кеше булған. Ул ауылда һабын ҡайната, тире эшкәртә торған завод асҡан, тирә-яҡҡа даны таралған икмәк бешереүсе булған. Әсәйебеҙ һөйләүенсә, ул ҡайҙандыр технологияһын өйрәнеп ҡайтып, француз ҡаласы бешергән. Уҡый-яҙа белмәгән ул, тоҡтар һанын таяҡсалар менән билдәләгән, мисәтте бармағы менән ҡуйған. Яҡшы йәшәргә, яңылыҡҡа ынтылыу дәртен Ринат ағайым Фәйзрахман ҡартатайҙан алғандыр, тим. Атайыбыҙ һуғышта булған, ул Берлинға тиклем барып еткән дә, бик оҙаҡ ваҡыт Польшала хеҙмәт итеп ҡайтҡас, әсәйебеҙ менән өйләнешкәндәр. Ринат ағайым 1951 йыл тыуа. Ағайымды әсәйебеҙ бик ауырлыҡ менән таба, тыумыштан эре һөйәкле бала була ул. Әсәйебеҙҙе хатта бала табыуы еңел булһын өсөн атҡа ултыртып йөрөтәләр. Ринат тыуғас, әсәйебеҙҙең һөтө булмаған. Бала табыу йортонда Әминә тигән апай Рифҡәт атлы малай тапҡан була. Шуға күрә ағайым иң тәүҙә Әминә апайҙың күкрәк һөтөн имә. Шуныһы ҡыҙыҡлы: аҙаҡтан Рифҡәт менән Ринат бер үк йылда бер үк институтҡа уҡырға инеп, бер бүлмәлә йәшәнеләр. Улар үҙҙәрен һәр ваҡыт "Беҙ - имсәктәш туғандар" тип атап йөрөттөләр.

**▸ Йылайырҙа мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың баш һөйәге табылғас та, ул миңә шылтыратты. Барыуыма өҫтәлгә утыҙлаған баш һөйәген теҙеп ҡуйған да, бүлмәһенә килеп ингәс тә: "Йә, таныйһыңмы икән, ошоларҙың ҡайһыһы Бабичтыҡы?" - тип һораны. Мин Бабичтың фотоһын күҙ алдына килтереп, урталыҡта ултырғанға төртөп күрһәткәйнем, ағай шатлығынан һикереп үк китте. Бабичтың ғәмәлдәге фотоһын сығарып күрһәтте лә: "Атыу миңә бындағы ағайҙар ышанмай, имеш, мин сенсация яһарға теләйем. Бына бит уның яңағы, мейеһе, күҙҙәренең ултырышы, һин ниндәй билдәләренә ҡарап ошо баш һөйәген күрһәттең ул?" - тип һораны. Мин фото менән баш һөйәгендәге уртаҡлыҡтарҙы күрһәтеп, үҙ фекеремде әйттем. Шул сағында мин ағайҙың бер юлы медик һәм антрополог ғалим булыуының өҫтөнлөгөн аңлай башланым да инде. Ул өҫтәлдә торған башҡа баш һөйәктәрен дә ҡулына алып, уларҙың теге йәки был билдәһенә ҡарап, ниндәй расаға ҡарауын, эйәһенең яҡынса нисәнсе быуатта йәшәгәнлеген, ниндәй сир менән һәм ни рәүешле вафат булыуы хаҡында тарих һөйләргә тотондо. Мин шундайын нәзәкәтлек менән һәр һөйләме фәнни асышҡа торорлоҡ ғалимды тәүге тапҡыр күргәнгәме, ул саҡта оло тулҡынланыу кисерҙем. Ағай шул тиклем эскерһеҙ, асыҡ, тәрән мәғәнәле һәм үтә ябай тойолдо миңә шул саҡта. Ул килтергән һәр бер дәлил ҡыҙыҡ, оригиналь, сенсацияға торорлоҡ, шул уҡ ваҡытта быларҙы Ринат ағай ҡәҙимге көнкүреш күренеше рәүешендә генә бәйән итә. Ә бына һеҙ уның менән бергә үҫкән кеше булараҡ, бала сағында уҡ эҙәрмән ғалим булырын төҫмөрләй инегеҙме?**

## Салауат күперенә лә ағайым

**Р. Йосопова:** Төҫмөрләнем. Ринат ағайымдың бәләкәйҙән дуҫ малайҙары күп булды. Бер мәл беҙ яңы өй һалып сыҡтыҡ. Ҡыҙыл армия һалдаттары булып уйнаған малайҙар бер саҡ үҙҙәренең армияһының "штабын" төҙөргә ҡарар иткән. Баҡтиһәң, беҙҙең яңы йорттоң верандаһы аҫтында уларҙың штабы булған. Уның барлығын бер кем дә белмәгән. Мин йорт хужабикәһе буларак, көн һайын иҙән йыуам бит инде. Ринат ағайым миңә бер саҡ иҙән йыуғанда һыуҙы мул итеп тотоноуыма дәғүәһен белдерҙе. Элек иҙәндәр буяулы булмағас, һыу һибеп ебәреп, ҡырып тороп йыуа инек бит инде. Ә иҙән аҫтында штаб барлығын әйтмәй үҙе. Бер мәл веранданың утын менән томаланған ауыҙын асып инеп ҡараһам, күрәм, унда иҙән түшәлгән, өҫтәл ултыра, уға ҡыҙыл сепрәк ябылған, ҡыҙыл байраҡ тора. Унда ағастан эшләнгән ҡоралдарҙың ниндәйҙәре генә юҡ. Бар урында ла таҙалыҡ, бөхтәлек. Өйөбөҙҙөң янында тәрән соҡор бар ине, ағайым ҡатнашлығындағы һуғыш уйындары шунда бара ине. Ринат ағайым шул соҡорҙоң ниндәйҙер серен өйрәнеп йөрөгән һымаҡ тойола ине. Ана шул саҡта уҡ уның киләсәктә ғалим булыры төҫмөрләнде булһа кәрәк.

**▸ Ринат Мөхәммәт улының тәүге алған белеме медицинаға бәйле. Ә бына уның медик булған көйөнә бөтөнләй икенсе - антропология фәненә аяҡ баҫыуын нисек аңлатырға була тип уйлайһығыҙ? Нимә генә тимәйек, медицина һәм антропология - икеһе ике йүнәлештәге фән, төшөнсә. Үҙе иҫән саҡта һорашҡайным, шулайыраҡ итеп яуап биргәне хәтерҙә: "Тарих менән бала саҡтан алып ҡыҙыҡһындым. Икенсенән, медик белемле антропологтар булмау сәбәпле, миңә быны тәҡдим иттеләр..." Уның менән бер институтта хеҙмәт итеүсе ғалим, философия фәндәре кандидаты Закирйән Әминев Ринат Йосопов хаҡындағы беҙҙең гәзиттә баҫылған "Уның юҡлығы фән өсөн дә оло юғалтыу" (48-се һан, 2011 йыл) тигән мәҡәләһендә ғалимдың медик булыуының әһәмиәтен түбәндәгесә билдәләй: "Ринат Йосопов кеше һөйәктәренә ҡарап, уның тән төҙөлөшөн генә түгел, хатта уның ниндәй сирҙәр менән яфаланғанын, был донъяла күпме ғүмер кисергәнен дә билдәләй ала ине. Ә бындай нескәлектәр тарихсы өсөн, ғөмүмән, ябыҡ, билдәһеҙ өлкә. Антропология, билдәле булыуынса, кеше организмының төҙөлөшөнән, уның үҙенсәлектәренән сығып, халыҡтарҙың формалашыуын өйрәнеүсе фән..."**

**Р. Йосопова:** Мәктәптә Рәйсә Сәғит ҡыҙы тигән тарих уҡытыусыһы бар ине. Ринат уны ныҡ ихтирам итте һәм тарихҡа ла шундай уҡ мөнәсәбәттә булды. Мәктәптә тарих музейы асылғас, ағайым үҙенең бер нисә класташы менән шунда экскурсовод булып йөрөнө. Был мауығыу арҡаһында 8-10-сы кластарҙа уҡығанда ул киләсәктә археолог булырға хыяллана ине инде. Әммә университетта археология факультеты булмауы арҡаһында, әсәйебеҙҙең кәңәшен тотоп, ул медицина институтына барырға мәжбүр булды. Әсәйебеҙҙең уҡыусыһы, танылған эндокринолог Ибраһим ағай Рәхмәтуллин беҙгә бер килгәнендә ағайымды медицина институтына барырға инандырҙы. Ринат ағайым 1969 йыл институтҡа уҡырға инде, ә 1970 йылда инде мин уның артынан килдем һәм шул уҡ дауалау факультетына уҡырға индем. Мин табип булыуым менән Ринат ағайыма бурыслымын. Ул мине бала кеүек ҡәҙерләп йөрөттө. Башта миңә Өфө ҡалаһы шул тиклем ҙур һәм ҡурҡыныс булып күренде. Ағайым дөйөм ятаҡта торҙо, миңә унда урын эләкмәне. Бик ҙур ныҡышмалыҡ

✓ ***Баҡтиһәң, кис ҡояш тау артына байый барғанда, беҙ был ҡояш ҡайҙа йәшенгәнен белеү маҡсатында ағайым менән етәкләшеп уның артынан эйәреп сығып киткәнбеҙ икән.***

# ОҘАТТЫҠ...

## етәкләп алып килде

һалып, ул минә институттың нәҡ ҡаршыһында Ленин урамының 2-се һанлы йортонда фатир тапты. Унда мин бергә уҡыған иптәш ҡыҙым менән йәшәнек. Тәүге осорҙа әсәйемде һағынып, ҡайтҡым килеп иланым. Шул мәлдә ағайым сабыр ғына, атайҙарса хәстәрлек менән йыуата торғайны. Барлыҡ кәрәкле әсбаптарҙы алып бирҙе, анатомия дәресенә гел үҙе менән йөрөттө. Лекция башланыр алдынан Ринат ағайым аудитория ишеген асып минә ҡарамаһа, мин ул дәрестә тыныс ҡына ултыра алмай инем. Өҫтәүенә, Ринат ағайым Ленин стипендиаты булды. Шул стипендияһына ул мине баштан-аяҡ кейендерә торғайны. Беренсе курсты бөтөүемә, мине үҙе менән студенттарҙың төҙөлөш отрядына алып китте.

▸ **Рәсми сығанаҡтарҙа был турала әйтелмәһә лә, Ринат Мөхәммәт улының бер юлы ике юғары уҡыу йортонда уңышлы белем алыуы билдәле. Был дөрөҫмө һәм был турала нимә әйтерһегеҙ? Уның менән аралашҡан саҡта ла нисектер был хаҡта һөйләгәнен иҫләмәйем. Ғөмүмән, ул үҙе тураһында һөйләргә һәм яҙырға, башҡаларҙан яҙҙырырға яратманы, буғай. Гәзиткә сираттағы әңгәмәһен әҙерләгән саҡта ла һәр ваҡыт үҙенең шәхесенә ҡағылған өлөштәрҙе текстан алып ташларға ҡуша ине.**

**Р. Йосопова:** Былтыр уның менән бергә уҡыған Рауил атлы дуҫы, икенсе ҡалала йәшәүсе хәрби табип ағайымдың вафаты хаҡында ишетеп, Өфөгә килде. Бергәләп ағайымдың ҡәберенә барҙыҡ. Мин тик уның ауыҙынан ғына Ринат ағайымдың бер юлы ике вузда уҡып йөрөгәнен белдем. Минең өсөн был ҙур яңылыҡ булды. Баҡтиһәң, ағайым дуҫтарына был хаҡта минә әйтмәҫкә ҡушҡан икән. Ул бер юлы медицина институтында ла, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында ла имтихан биргән. Бында ағайымдың шул уҡ кеше йәнле булыуы тағы ла асығыраҡ күренә. Беренсенән, ул әсәйебеҙҙең теләген дә йыҡмаған, шул уҡ ваҡытта үҙе бала саҡтан ынтылған хыялына ла тоғролоҡ һаҡлаған. Икенсе берәү булһа, медицинаны ташлар ине.

▸ **Беҙҙең халыҡта сәйер генә тойолған бер күренеш бар, һәр хәлдә, ул бик йыш осрай. Ул да булһа, ир туғаны булған кеше апайҙарының һәм һеңлеләренең ҡустыларына йә ағайҙарына килен йә еңгәй булып килгән кешегә айырата мөнәсәбәтле. Мәҫәлән, апайҙар, ниндәй генә осраҡта ла һәр ваҡыт ҡусты булған кешене үҙ ҡанаты аҫтына ала, яҡлай, килендән һүҙ тейгеҙмәй. Бикәстәр иһә, еңгәйҙе ағаһына дәғүәсеһе итеп күреүсән. Был күренештәрҙең сәбәптәре хаҡында оҙаҡ уйланғаным булды, тик осона сыға алғаным юҡ әлегә. Ә бына һеҙ, ағайығыҙға шул тиклем күңел яҡынлығы булғас, уның янында еңгәй барлыҡҡа килеүен нисек кисерҙегеҙ?**

**Р. Йосопова:** Билдәле, көнләштем инде. Етмәһә, улар бик иртә өйләнеште. Ағайым өсөнсө курстан һуң пединститут студенттарының төҙөлөш отрядына табип булып китте. Шунда танышҡандар. Был мәлдә әсәйебеҙ менән атайыбыҙ яңы ғына Өфөгә күскәйнеләр. Әсәйебеҙҙе яңы асылған 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә эшкә саҡырғайнылар. Ришатыбыҙ 5-се класта ғына уҡый, йәшәргә урыныбыҙ юҡ ине. Нижегородкала шәхси йорттоң бер бүлмәһен ҡуртымға алып йәшәй башланыҡ. Атайыбыҙ Өфөгә килгәс, күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында хужалыҡ эштәре буйынса хеҙмәткәр булып эшкә урынлашты. Бына шулай итеп, беҙ ғаиләбеҙ менән 1973 йылда Өфө кешеләре булып киттек. Аҙаҡ өс бүлмәле кооператив фатир һатып алдыҡ. Ағайымдың балалары тыуҙы һәм барыбыҙ ҙа шунда йәшәнек. Бер йылды унда йәшәүселәрҙең һаны ун ике кешегә барып етте.

▸ **Бер мәл Ринат Мөхәммәт улының фатирында булырға тура килде. Шул саҡ ағайҙың ғәжәйеп ҡунаҡсыллығы хәтерҙә ҡалған. Редакция йомошо буйынса килһәм дә, ҡунаҡ күреп ҡаршыланы ул мине. Нисек кенә итеп һыйламаны ул! Мин ғүмерҙә лә ишетмәгән, күрмәгән диңгеҙ, океан балыҡтарының ғына әллә нисәмә төрлөһөнән ауыҙ иттерҙе ул минә. Фатирына туплаған бик бай китапханаһы, һирәк осрай торған китаптары, тәүсығанаҡтары менән дә таныштырҙы. Ҡыҫҡаһы, Ринат ағай фәндә, йәмәғәтселектә генә түгел, көнкүрештә лә ифрат бөхтә һәм теүәл, мул ҡуллы ҡунаҡсыл кеше булды. Олоһона ла, кесеһенә лә ихтирам, айырыуса диҡҡәт менән ҡарай һәм хөрмәт күрһәтә белде.**

**Р. Йосопова:** Эйе, ғәжәйеп ҡунаҡсыл булды шул. Һыуытҡысына нимә генә тултырмай ине. Уның аш-һыуға оҫта булыуы атайыбыҙҙан килә. Бер ваҡыт һуғышта саҡта уларҙың ашнаҡсылары һәләк була. Командирҙарының фарманы буйынса атайыбыҙ ашнаҡсыға әүерелә. Беҙ бала саҡта атайыбыҙҙың ашнаҡсы булыуын белдергән значогын тағып йөрөнөк. Ринат ағайым Ленинградта аспирантурала бер үзбәк егете менән уҡыған. Ул шул егеттән былау бешерергә өйрәнгән. Өфөгә ҡайтҡас та, бик тәмле итеп былау бешерә лә, минә шылтырата һала. Әсәйебеҙ дауаханала ятһа, һәр саҡ үҙ ҡулы менән бешергән аштарҙы ҡайнар көйө алып барып ашатырға тырышыр ине.

▸ **Минеңсә, ул һеҙҙе, һеҙҙе генә түгел, барлыҡ туғандарығыҙҙы, дуҫтарын, коллегаларын үҙенең иғтибарынан айырмаған. Бында, әлбиттә, Ринат Мөхәммәт улының туған йәнле генә түгел, кеше йәнле кеше булыуы хаҡында әйтергә була. Уның һеҙгә генә түгел, башҡаларға ла иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәте туғанлыҡ сиктәренән тағы ла ситкәрәк сығып фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Кешелекле, кеше йәнле инсан ине Ринат Мөхәммәт улы.**

**Р. Йосопова:** Мине бала саҡтан алып һәр ваҡыт етәкләп кенә йөрөттө ағайым. Бер мәл йәй ағайым менән икебеҙҙе өйҙәгеләр юғалтҡан. Хафаға төшөп эҙләргә тотонғандар. Бер көтөүсе беҙҙе тап итеп, өйөбөҙгә алып барған. Баҡтиһәң, кис ҡояш тау артына байый барғанда, беҙ был ҡояш ҡайҙа йәшенгәнен белеү маҡсатында ағайым менән етәкләшеп уның артынан эйәреп сығып киткәнбеҙ икән. Беҙ ул саҡта шулай уйлағанбыҙ: ҡояш Усмантау артындағы үҙенең өйөнә инеп йоҡлай була ла, беҙ уның өйөн дә күрергә теләгәнбеҙ икән.

▸ **Бик күркәм ваҡиға булған был. Сиғандарҙың нисек итеп үҙҙәре төйәк иткән еренән айырылып, мәңгегә күсмәнде булып китеүенә бәйле бер риүәйәт бар. Имеш, сиғандарҙың тыуған иле һаналған Молдавияла ата улды, инә ҡыҙҙы танымаған бер төн башланып, улар бер-береһен үлтерешергә тотонған. 1572 йылдың 24 авгусында Францияла күҙәтелгән Варфоломей төнөнә оҡшаған булғандыр ул төн. Был ваҡиға Максим Горькийҙың әҫәре буйынса төшөрөлгән "Табор уходит в небо" фильмында бер ни тиклем сағылыш таба. Сиғандар үҙҙәрендә башланған мәхшәрҙән ҡотолор өсөн барлыҡ ҡәбиләһе менән йыйынып, байып барған ҡояштың артынан ҡуҙғала. Бында шундай идея һалынған: хаслыҡ, әшәкелек, кеше үлтереү ниәте, енәйәт ҡараңғылыҡ хөкөм һөргән урында һәм күңелдә барлыҡҡа килә. Шуға күрә лә сиғандар бер-береһен үлтереп, халыҡ булараҡ юҡҡа сыҡмаҫ өсөн һәр ваҡыт ҡояш артынан йөрөргә, күберәк көн хозурында булырға тейешле. Автор сиғандарҙың күсмәнде йәшәү рәүешен ошо рәүешле аңлата.**
**Мин был риүәйәтте шуның өсөн килтерәм: Ринат ағай үҙенең булмышы, ынтылышы, уйҙары, ғәмәлдәре менән һәр ваҡытта ла ана шул ҡояшлы көнгә ынтылып йәшәне бит.**

**Р. Йосопова:** Йәйғорҙо беҙ Салауат күпере тип атай торғайныҡ. Ағайым минә: "Һылыуым, һин ҙурайғас, мин һине ана шул Салауат күперенә алып барырмын, йәме?"- тип әйтә торғайны. Алып барҙы ул мине Салауат күперенә, башҡалабыҙҙағы батырыбыҙ Салауат һәйкәле янына. Һәйкәл янына баҫып ҡараһаң, ысынлап та, уның ике яғында Ағиҙел аша һалынған ике күпер күренә.

▸ **Һеҙҙең Ринат ағайҙы һуңғы юлға оҙатҡандағы әйткәндәрегеҙҙән, әле һөйләгәндәрегеҙҙән сығып, шундай һығымта ла яһарға булалыр: һеҙ әлеге ваҡытта ағайығыҙ өсөн генә йәшәйһегеҙ кеүек.**

**Р. Йосопова:** Ағайымды юғалтҡандан һуң, күңелемә урын таба алмай, дин әһелдәренә барып: "Табип булараҡ, нисәмә кешене ваҡытһыҙ үлеменән ҡотҡарғаным булды. Ниңә ағайымды ҡотҡара алманым икән?"- тигән һорау ҙа биреп ҡараным. Әммә улар әйткән кәңәштәр буйынса барыбер ҙә унһыҙ тормошомда һаман да күңелемә тыныслыҡ таба алмайым. Уның иҫтәлеге өсөн ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләргә тырышам һәм шуның менән күңелемә йыуаныс табам инде. Тыуыуына 60 йыл тулыуҙы үткәргәндә кабинетына ремонт яһаттым. Сараға Венгриянан, Ҡаҙағстандан, Мәскәүҙән, Томскиҙан, Санкт-Петербургтан ағайымдың коллегалары, дуҫтары килде. Рәсми өлөш тамамланғас, уларҙы башта лимонарийға экскурсияға алып барҙым. Ноябрь айында яңы бешкән лимондарҙы күреү һәм ауыҙ итеү уларға ҙур йыуаныс булды. Шунан һуң ҡунаҡтар менән ағайымдың ҡәберенә барҙыҡ. Мин Ҡаҙағстандан килгән институт директорының уның ҡәбер ташына тотоноп: "Ринат, ғәфү ит, һин үлеп ҡалдың, ә беҙ иҫән", - тип әйткәненән һуң ағайымдың уларҙың һәр береһенең күңелендә ҙур урын алып торғанын аңланым. Минә уларҙың һәр ҡайһыһының Ринат ағайымдың иҫтәлегенә булған мөнәсәбәте хайран итте. Конференция бөткәс, мин ҡунаҡтарҙы ағайымдың фатирына алып барҙым. Унда башҡорт милли ашы оҫтабикәһе Бибисара Азаматова менән үҙебеҙсә милли аштарҙан һығылып торған табын әҙерләгәйнек. Бибисара апай кухняның тәҙрәһен асҡан икән. Шул саҡ тәҙрә төбөнә бер ҡош килеп ултырған. Ул ҡош шул тиклем матур итеп һайраған һәм апайҙың ундай ҡошто бер ҡасан да күргәне булмаған икән. Аҙаҡ апай бөтә китаптарҙы аҡтарып сыҡҡан һәм ундай ҡошто тапмаған. Быйыл йәй ҡулыма бер гәзит килеп эләкте. Унда бер нисә кешенең беҙҙең яҡта һис ҡасан осрамаған ожмах ҡоштарын күреүе хаҡында яҙылғайны.

▸ **Медицина фәне йәнде айырым субстанция тип ҡарау яғында түгел, эзотериктар кеше үлгәндән һуң йән таҙарыныу үтеп, киренән донъялыҡҡа әйләнеп ҡайта, ти. Дин әһелдәре иһә, кеше үлгәндән һуң йән ожмахҡа йә тамуҡҡа эләгә, ти. Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

**Р. Йосопова:** Ринат ағайымды юғалтҡандан һуң мин йәндең тере ҡалыуына ышана башланым. Ул вафат булған йылды Айҙар атлы ейәне тыуҙы һәм мин уны үҙемсә Ринаттың йәненең киренән донъялыҡҡа әйләнеп ҡайтыуы тип ҡабул иттем. Шуға күрә ағайымдың үҙем ремонтлап рәткә килтергән баҡсаһын шул балаға яҙҙырттым.



***Былтыр уның менән бергә уҡыған Рауил атлы дуҫы, икенсе ҡалала йәшәүсе хәрби табип ағайымдың вафаты хаҡында ишетеп, Өфөгә килде. Бергәләп ағайымдың ҡәберенә барҙыҡ. Мин тик уның ауыҙынан ғына Ринат ағайымдың бер юлы ике вузда уҡып йөрөгәнен белдем. Минең өсөн был ҙур яңылыҡ булды. Баҡтиһәң, ағайым дуҫтарына был хаҡта минә әйтмәҫкә ҡушҡан икән. Ул бер юлы медицина институтында ла, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында ла имтихан биргән. Бында ағайымдың шул уҡ кеше йәнле булыуы тағы ла асығыраҡ күренә. Беренсенән, ул әсәйебеҙҙең теләген дә йыҡмаған, шул уҡ ваҡытта үҙе бала саҡтан ынтылған хыялына ла тоғролоҡ һаҡлаған. Икенсе берәү булһа, медицинаны ташлар ине.***

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әңгәмә барышында Рәшиҙә Мөхәммәт ҡыҙынан үҙе, һөнәре хаҡында һөйләтергә теләп, бер нисә һорау ҙа биреп ҡараным. Килеп сыҡманы, дөрөҫөрәге, ул үҙенең тормошта өлгәшкән барлыҡ уңыштарының сәбәпсеһе итеп ағаһын күргәс, Рәшиҙә апайҙың үҙе хаҡындағы һүҙе лә ағаһы хаҡында килеп сыҡты. Ағай менән ҡарындаштың идеаль мөнәсәбәте был. Нимә генә тимәйек, милләтебеҙ туғанлыҡ менән көслө.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**




Быйыл ҡыш ҡаты килергә оҡшап тора. Йәйен һәйбәт кенә ял итеүемә ҡарамаҫтан, йүтәлләп, температурам күтәрелеп, ауырып тик йөрөйөм. Отпуск мәлендә тыуған яҡ урмандарында йыйған мәтрүшкәләрҙе ҡайнатып сәй эсеп ултыра инем, улымдың: "Әсәй, социаль селтәрҙә һине ниндәйҙер Рамаҙан эҙләй, тигәндәр. Дөрөҫөрәге, уның балалары минең аша һине таптыралар", - тигәненә терт итеп киттем. Һуң әле генә бит мин Рамаҙан ағайымды иҫләп алдым. Мәтрүшкәләр йә кедр сәтләүеге күргән һайын хәтеремә төшә лә тора шул ул.

* * *

...Атайым менән әсәйем бик иртә өйләнешкән. Йәшләй нисек тиҙ ҡауышһалар, оҙаҡ та тормай айырылышҡандар. Күрше ауылдарҙа үҫкән улар. Арала биш саҡырым ғына ятһа ла, атайымдың туғандары менән аралашып үҫмәнем. Хатта белмәйем дә тиерлек. Ә былай бик күрге, белге килә торғайны, аҙаҡ тора-бара ул теләк тә һүнде, сөнки атайымдың ун ике бер туғанының хатта береһенең дә мине килеп күргәне булманы, тиерлек. Балалығым менән бик ауыр кисерҙем, әллә насар ҡыҙыҡаймымы икән, тип борсолған саҡтарым да булды.

Ауылда урта мәктәп булмағас, әсәйем мине Өфөләге1-се интернатҡа бирҙе. Дүрт класты бөтөү менән баш ҡалаға барып урынлашыу башта ҡыҙыҡ кеүек тойолһа, аҙаҡ һағыныуыма сыҙай алмай өҙгөләнеүҙәремдең сиге булманы. Шулай бер көн буҫығып илап ятһам, һиңә килгәндәр, бар төш, тигәндәренә аптырап киттем. Битемде тиҙ генә йыуҙым да вахтаға йүгерҙем. Төшһәм, берәү ҙә юҡ. Шул тиклем ҡыйын булып китте. Шаяртҡандарҙыр, тинем, бар ул беҙҙең малайҙарҙың шундай насар холҡо. Шулай ҙа тышҡы ишекте асып, тупһаға үрелеп ҡараным. Унда ерән сәсле бер ағай тәмәке тартып тора ине. Был кешенең миңә килеүе мөмкин түгел, тип тағы тирә-яҡҡа байҡап күҙ ташланым да, ҡышҡы һалҡын һауанан ҡасып, эскә йүгереп инеп киттем. Үтә күренмәле оло пакетты тултырып, кемгәлер мандарин алып килгәндәр. Еҫе вахта тирәһенә таралғанын әле генә һиҙеп ҡалам. Шәпләп килеп ингән ыңғайыма ҡустәнәстәр торған эскәмйә эргәһенән йәлап ҡына үтәм. Үҙемә шул тиклем ҡыйын. Хәҙер бүлмәгә инәм дә, юрған аҫтына ҡасып илаясаҡмын. Ниңә күңелем тулғанын да белмәйем, әммә ҡыйын. Әсәйемде, ауылды һағындым. Эт тә, бесәй ҙә иҫкә төшә. Ҡышын әсәйем өшөмәһендәр тип өйгә индергән бәрәстәр ҙә күҙ алдымдан йүгереп үткәндәй була. Ә бит мин уларға концерт ҡуя торғайным: шиғыр һөйләйем, йә бейейем, йә әсәйемдең массажкаһын микрофон итеп, йырлай башлайым. Коридорҙың осона еттем генә тигәндә, кемдер: "Миләүшә! Миләүшә! Миләүшә!" тигән тауышы уйҙарымды бүлде. Ҡараһам, баяғы ерән сәсле ағай баҫып тора.

- Миләүшә, һаумы, туғаным! Мине танымайһыңмы?! Кил әле бында яҡыныраҡ.

Уны бөтөнләй танымайым. Яңылышҡандыр, тип уйлайым, әммә аяҡтарым уға табан атлай.

- Һаумы, туғаным! Һин ҡалай ҙур үҫкәнһең! Мине һаман танымайһыңмы?

Ағай мине күтәреп үк ала. Ошоғаса бер ир кеше лә күтәргәне булмағас, мин башта аптырап ҡалам. Үҙе иҫ китмәле итеп кейенгән бит әле...

- Ағай, һеҙ кем?

- Нисек инде кем? Һин мине танымайһыңмы ни? Был мин - Рамаҙан ағайың!

- Рамаҙан? Белмәйем мин бер ниндәй ҙә Рамаҙанды.

Был кешене тамам яңылышты, тип иҫәпләп, уның ҡосағынан ысҡынырға маташам, көсәнеп тартылғас, уның ҡулы аҫтынан сығып ҡасам.

- Ҡарале һин уны нисек үҫеп киткән? Бына был ҡустәнәстәр һиңә, кил әле яҡыныраҡ, һөйләшеп алайыҡ!

-Ағай, һеҙ кем? Белмәйем мин һеҙҙе!

Шул саҡ уның йөҙө үҙгәреп китә. Көрһөнгәндәй итә.

- Йә, ярай, Миләүшә! -Ул йәнә ауыр тын алғандай булды. - Мин һинең атайыңдың бер туған ҡустыһы. Һин бәләкәй саҡта ауылдан сығып киткәйнем, шуға белмәүең ихтимал. Сит илгә әрмегә эләккәс, шунда эшкә ҡалдым. Күптән ҡайтҡаным юҡ, шулай ҙа мин һиңә ике тапҡыр посылка һалдым. Моғайын, әсәйең әйткәндер?

Ошо мәл әсәйемдең кемдәндер ҡустәнәс килеүе тураһында һөйләгәнен иҫләгәндәй булам. Ә теге зәңгәр күлдәк! Эйе, эйе, иҫкә төштө. Күрәһең, минең уйлағандарым йөҙөмә сыҡты. Ағайым йылмайып уҡ ебәрҙе.

-Иҫеңә төштөмө хәҙер?

- Әле ниңә килдең? -тим ҡапыл. Һуң улай тип һорарға теләмәгәйненм дә инде... Телем әллә ни һөйләй.

-Нисек инде ниңә? Һине күрергә килдем... Һиңә исемде лә мин ҡуштым. Әсәйең һөйләгәне булғандыр бит ул хаҡта. Һин бит мин мәктәптә уҡып йөрөгәндә тыуҙың, ә мин матайҙан осоп, аяғымды һындырып өйҙә ята инем. Шуға күрә һигеҙ айындан минең янда булдың. Телең нисек асылғанын да хәтерләйем. Мин һиңә:

*Рамаҙан, Рамаҙан*
*Ашай, эсә биш ҡаҙан!*

тип үҙемде ирештерергә һамаҡ та өйрәткәйнем...

Эйе,эйе, әсәйем был хаҡта һөйләгәне бар, әммә әллә ниндәй тиҫкәрем әйләнеп, күрешергә килгән кеше менән тупаҫ ҡына һөйләшеп тик торам.

- Булһа һуң, хәҙер инде ул ваҡиғаларға бик күп йылдар үткән.

Рәхмәт килгәнегеҙ өсөн, әммә мин һеҙҙең ҡустәнесте ҡабул итә алмайым. Кәрәкмәй. Беҙгә бүлмәләргә емеш-еләк индерергә ҡушмайҙар... Рәхмәт, һау булығыҙ!

Мин теләр-теләмәҫ кенә, әммә ғорур ҡиәфәт менән ағайым янынан ҡуҙғалам. Үҙем туктатып тағы бер-ике һүҙ әйтһә ярар ине, ҡулына күтәреп әйләндерһә ине, тип теләйем. Юҡ, ул өндәшмәне, күрәһең, кәйефе ҡырылды. Их, мине! Кеше туғаным тип килеп еткән, ә мин! Йәнә лә коридорҙың теге урынына килеп еттем.

- Миләүшә, туғаным, емешеләк ярамаһа, мин бит һиңә сәтләүектәр алып килдем. Ал инде, зинһар! Мин бит һине һағынып килдем! - тип әйткәненә түҙә алмай, кире боролам. Башта атлайым, аҙаҡ аяҡтарым үҙенән-үҙе йүгерә башлай.

- Ағай, ағай, хәтерләйем мин һине! - Мин уның йылы ҡосағына ташланам һәм һулҡылдап илай башлайым. Әлеге лә баяғы - ниңә илағанымды үҙем дә белмәйем, әллә һағыштан, әллә осрашыу шатлығынан, әллә илағанда йыуатыр кеше булғанлыҡтан...

-Әрменән ҡайтҡас, мин Себергә эшкә урынлаштым. Бына был кедр сәтләүектәре шунан. Бик ныҡ тәмлеләр. Моғайын, ҡыҙҙарың да яратыр, ал, - Ул миңә бер тоҡсай сәтләүек һуҙа.

- Яңы йыл етеп килгәс, мандарин алып килгәйнем, ә һин ярамай тиһең...

- Былай ярай ҙа ул, - тим уны аптыратып.

- Шулаймы ни? Ҡалай һәйбәт, улайһа. Класташтарыңды һыйларһың. Бында ете килограмм. Бер үҙең ашап бөтә алмаҫһың ул...

Ә мин үҙемде борсоған һорауҙарымды биреп ҡалырға ашығам, үҙем ағайым әрсегән мандариндары һурам. Ул миңә сумкаһынан алып, пишинйәләр һуҙа.

- Былай ғына ҡоро булыр ул, мәтрүшкәле сәй менән йотоп ебәр. Мин гел үҙем менән сәй йөрөтәргә тырышам. Бигерәк тә ҡыш көндәрендә. Термоста һыуынмай ҙа. Бына был мәтрүшкәләр беҙҙең яландарҙа йыйылған.

Ағайым сәй ҡоя, ә минең башым әйләнеп киткәндәй була. Танһыҡ еҫтәр мине өйгә алып ҡайтҡандай. Шундай рәхәт! Мандаринға ҡушып пишинйә ашай-ашай сәй эскәндән тәрән ләззәт тойғоһо кисерәм. Ағайым миңә кедр сәтләүектәрен дә ватып бирә. Вахтала дежур иткән тәрбиәсе беҙҙе оҙаҡ күҙәтеп ултырмай.

- Дәүләтшина! Бар бүлмәңә. Ғәфү итегеҙ, ә һеҙ нишләп уға әллә нимәләр алып килеп ашатып ултыраһығыҙ? Беҙҙә берәү ҙә ас тормай. Берәй инфекция эләкһә, тотош интернат менән ауырыясаҡтар бит!

- Дәүләтшина? -Ағайым миңә күҙҙәрен тултырып ҡарай.

- Нишләп мин үҙем дә белмәгән кешеләрҙең фамилияһын йөрөтөргә тейеш? Бында килер алдынан алыштырҙым.

- Әсәйең хәл иттеме? Хәйер, уныһы мөһим дә түгел инде...

-Юҡ, үҙем!

Ә ниңә әлегә тиклем бер ҙә килмәнең?

Ул аптырап ҡала.

- Әллә инде... Әрме, эш... Онотоп ебәргән тип уйлай күрмә, юҡ, мин һине һәр саҡ күңелемдә йөрөттөм. Әйтәм бит, исемеңде лә үҙем ҡуштым, бигерәк тә яҡынһың.

- Йә, ярай, мин инәм... - Мин, онотолоп китеп уның янында һөйләнеп тороуыма үҙем уңайһыҙланып китәм.

- Миләүшә, бына ошо аҡсаны ла ал, туғаным! Киноға барғанда, йә магазинға сыҡһағыҙ, кәрәк булыр!

Мин ҡыҫҡа ғына яуап бирәм:

- Юҡ, ярамай!

- Нимә ярамай?

- Беҙгә өлкәндәрҙән башҡа ҡалаға сығырға ярамай.

- Улайһа, теләйһеңме мин һине иртәгә киноға алып барам. Һинд киноларын яратаһыңмы?

- Был аҙнала беҙҙең класс дежур, шуға сығып йөрөү тыйыла.

- Улайһа, әйҙә, киләһе аҙнала барайыҡ! Мин һине килеп алырмын!

Борсолоуым, аптырауым йөҙөмә сыҡты, күрәһең.

- Әсәйеңә хәбәр итермен, әгәр теләмәһәң, бөтөнләй өндәшмәм. Икебеҙҙең аралағы сер генә булып ҡалһын!

Ҡыҙыҡ, әсәйҙән дә йәшерен сер булыуы ихтимал икән. Был таныш түгел тойғо мине ғәжәпләндереп тә ҡуя.

- Юҡ, әсәйем белһен, уға оҡшамауы ихтимал, - тим ашығып.

-Тимәк, һин риза! Улайһа, әсәйеңә үҙем аңлатырмын. Әйткәндәй, әсәйең элеккесә матур йырлаймы? Һин дә бәләкәй сағыңда бик моңланырға ярата инең, әле нисек?

Бер ни өндәшмәүемде хуп күрәм, әммә әсәйемде маҡтап телгә алыуы күңелгә майҙай яғыла. Эйе, эйе, әсәй атайҙың был ҡустыһын яҡшы яҡлап телгә алғанын хәтерләйем. Класташтарымдың береһе мине тәрбиәсе эҙләүе хаҡында килеп әйтә.

Ағайым менән хушлаштым да, икенсе ҡатҡа көс-хәл менеп еттем. Бүлмәгә килеп инеү менән мандариндар тоҡсайы йыртылып китте , һәм улар иҙән буйлап тәгәрәне. Ҡыҙҙар шул һыңғай сыр-сыу килеп, емештәр артынан һибелде. Үҙебеҙ ашығып мандариндарҙы йыябыҙ, үҙебеҙ көләбеҙ. Минең шул тиклем кәйефем күтәрелде! Тәрбиәсе шелтәһен дә ишетмәйем, сөнки миңә ағайым,атайҙың ҡустыһы килде!

Бер ҡасан да туйғансы мандарин ашағаным юҡ ине. Тәрбиәсебеҙ әрләп тороуына ҡарамаҫтан, әллә йыуҙыҡ, әллә иҙәндән табып алыу менән әрсеп ашаныҡ, белмәйем, әммә икенсе көнөнә эсем шул тиклем ауыртты, хатта медпунктҡа барырға тура килде. Шәфҡәт туташы: эт эсенә һары май килешәме ни инде ул, тип әрләп йөрөгән була! Шәфҡәт туташына бөтәһен дә нисек бар, шулай һөйләп бирҙем. Ят ризыҡтарҙы бер юлы күп итеп ашағанһың, моғайын, шуғалыр, мә, ошо төймәне йот та, ятып тор, үтә ул. Нисек йоҡлап киткәнемде лә һиҙмәгәнмен. Класташтарымдың береһе дәрескә килеп алды. Кәйефем күтәренке. Ниндәй рәхәтем бар әле, тип уйлай башлаһам, ағайымдың яҡты ҡараштары иҫкә төшә лә, ҡоштай осҡо килеп китә.

Икенсе килгәнендә ағайым мине һинд киноһына алып барҙы. Башта шикләнеп тә ҡуйҙым: был мине урларға йыйынмаймы икән? Кино башланғанда мауығып ҡына ҡарай башлағайным, ағайымдың илап ултырыуын күрәс, һинд киноһы экранда түгел, күрше ултырғыста барған кеүек тойолдо. Шулай күңеле нескәмә икән ни? Моғайын, мин әле киноларҙы аңлар йәшкә етмәгәнмендер. Һинд киноларының йырын ғына яратам. Шул йырлар өсөн унда башта оҙаҡ әрләшәләр, талашалар, инде көтөр әмәл ҡалмаҫ сиккә еткәс кенә йырлай башлайҙар. Был кинола йыр бигерәк аҙ булды.

Өндәшмәй генә интернатҡа табан атлайбыҙ. Ағайым танауы ебегәнен йәшерергә теләп:

-Оҡшанымы?-ти.

- Эйе, һәйбәт булды. Тик аҙ йырланылар...

- Ә һин үҙең йырлайһыңмы, Миләүшә?

- Йырлайым шунда.

Үҙемде борсоған һорауымды биреп ҡалғым килә.

- Атайымды күргәнең бармы?

- Юҡ, шул... Ете йыл самаһы бар инде күрешмәгәнгә. Ул бит Сахалинда, беләһеңдер. Хат яҙышҡан юҡ, былай хәле насар түгел, шикелле.

- Сахалинда һыуыҡтыр инде?

- Өшөмәйҙер. Нығ өшөһә, ҡайтыр ине әле...

- Һинең менән мин түҙер инек микән ундағы һыуыҡҡа?

- Әллә инде, белмәйем, туғаным. Әгәр теләһәң, барып белә алабыҙ.

Ағайым мине ярты хәрефтән аңлай. Теләйем, әлбиттә, теләйем! Улай ғына түгел, был бит минең иң ҙур хыялым - атайым менән осрашыу! Әсәйем, моғайын, рөхсәт итер ине әле. Мин бик бәләкәй саҡта атай саҡырып булған ул, әсәй үҙе бармаған. Аҙаҡ бик үкенде...

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

**Был ҡунағыбыҙ гәзит уҡыусыларға зәңгәр экрандар аша яҡшы таныш. Телевидениелағы эшмәкәрлеген төрлө ҡатын-ҡыҙ яҙмыштары тураһында һөйләгән "Айгөл иле" тапшырыуын, "Аҡ тирәк, күк тирәк" ток-шоуҙы ойоштороусы һәм алып барыусы булараҡ башлаһа, һуңғараҡ тағы ла замансараҡ һөнәр үҙләштереп, "Гәлсәр һандуғас" башҡорт йырҙарын башҡарыусыларҙың телевизион конкурсы проектында продюсер булараҡ сығыш яһай. Тупланған тәжрибә менән холҡона хас тынғыһыҙлығы, халҡына хеҙмәт итеү теләге тағы ла үҙенсәлеклерәк проекттарға - башҡорт бейеүен башҡарыусыларҙың "Байыҡ" республика конкурсы менән профессиональ йырсылар араһында барған "Башҡорт йыры" бәйгеһен ойоштороуға килтерә. Шулай итеп, бөгөнгө ҡунағыбыҙ - "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы журналисы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт һәм матбуғат хеҙмәткәре Рита Ришат ҡыҙы ӨМӨТБАЕВА.**



# УҢ ҠУЛЫ - БАШҠОРТ ЙЫРЫНА,

## һул ҡулы башҡорт бейеүенә таянған

### Яуаплылыҡ тойғоһо - бала саҡтан

Бала саҡтан киләсәктә үҙемдең журналист булып эшләремде белә инем. Баймаҡ интернат-мәктәбендә башланғыс синыфтарҙа уҡығанда уҡ мәктәптәге яңылыҡтарҙы ул ваҡыттағы "Башҡортостан пионеры" ("Йәншишмә") гәзитенә яҙып ебәрә инем. Дүртенсе класта миңә "Йәш хәбәрсе" исеме бирҙеләр, бишенсе класта иһә "Артек"ка IX Бөтә Союз пионерҙар слетына барҙым. Күберәк өләсәй эргәһендә үҫкәс, хислерәк тә булғанмындыр, ошо сифатым мине ҡәләмгә тотонорға, ижад менән шөғөлләнергә этәргәндер. Ул Баймаҡ районының Бәхтегәрәй тигән ауылында йәшәне, йортона гел инәйҙәр йыйылышҡаны, һөйләшеп ултырғандары хәтерҙә ҡалған. Башҡорт өгөт-нәсихәт уҡып түгел, ә үҙ өлгөһөндә тәрбиәләй, өләсәйем дә шундай булды. Ғөмүмән, халыҡ педагогикаһының иң ҙур тәрбиә сараһы икәненә шул саҡтан инанғанмын. Әкиәттәр, йыр, бейеү, һамаҡлау, таҡмаҡтар, кинәйә менән, йәиһә шаяртып әйтеү тәрбиә ысулы ғына түгел, баланың һәләтен асыу йәһәтенән дә ҙур роль уйнай. Донъя кимәлендә танылыу тапҡан психологтар эштәре менән танышҡанда ла улар нигеҙендә ниндәйҙер милләттең педагогикаһы ята икәнен күреү ауыр түгел. Шуға ла һәр бер халыҡ үҙенең ерлегендәге педагогиканы, йолаларын өйрәнергә һәм мотлаҡ ҡулланырға тейештер, тип уйлайым.

Бөгөн гәзит йә журналда эшләһәм, мин күберәк кеше яҙмыштары тураһында яҙыр инем. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, телевидениеға эшкә барырмын тигән маҡсатым юҡ ине. Шулай ҙа яҙмыш мине журналистиканың тап ошо йүнәлеше менән бәйләне. Телевидениеның үҙ ҡанундары: ул көслө холоҡло булыуҙы талап итә. Бөгөнгө Рита Өмөтбаева менән егерме йыл элек эшкә килгән Рита Өмөтбаева араһында айырма ныҡ ҙур. Хәҙер мин талапсанығаҡ, ҡатығаҡ, сөнки минең эшемдең һөҙөмтәһе телевизор ҡараусыларға иң яҡшы сифатта барып етергә тейеш - минең өсөн иң мөһиме ошо. Эшең өсөн яуаплылыҡ тойғоһо, тырышлыҡ булғанда ғына тамашасы һинең тапшырыуҙарыңды ҡабул итә. Ә, ғөмүмән, телевидениелағы остазым Луиза Азамат ҡыҙы Фархшатоваға күп яҡтан бурыслымын. Телевидение нескәлектәренә ул өйрәтте, тележурналистикаға ышаныслы ул тыуҙырҙы. Луиза апай менән эшләгән осорҙо әле лә һағынып иҫкә алам.

### Бейе, бейе...

Беҙҙең яҡтарҙа бер ҡунаҡ та оҙон көйҙәрһеҙ, бейеүҙәрһеҙ үтмәй. Мәҫәлән, "Байыҡ" көйө миңә бала саҡтан таныш. Баймаҡта интернатта уҡып йөрөгән саҡта районда "Байыҡ" конкурсы үткәйне, уны мәрхүм Әкрәм Әгзәм улы Нигмәтуллин ойоштороғайны. Ошо тамашаны, унда ҡатнашҡан Мөхәмәт ағай Иҙрисовты, башҡорт бейеүен еренә еткереп, халыҡсан итеп башҡарыусыларҙы күреп, нык хисләнеп ҡайтҡайным. Күңелдә ошо осҡондарҙы байтаҡ йылдар һаҡлап йөрөттөм. Ул осҡондар мине "Байыҡ" телевизион конкурсын ойоштороуға дәртләндерҙе лә инде. Башлаған ғына осорҙа күптәр, был килеп сыҡмай торған эш, тип тә фаразлағайны. Шуға ҡарамаҫтан, тамашасы хөкөмөнә хәҙер инде "Байыҡ"тың бишенсе гала-концертын тәҡдим иттек. Минең күңелемдә хәҙер, башҡорт бейеүен бейей белеүселәр бөтөп ҡуйыр, тигән ҡурҡыу юҡ. Республика етәкселәренә рәхмәтлемен, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов та, Рөстәм Зәки улы Хәмитов та, "Байыҡ" кеүек, халыҡтың рухиәтен сағылдырған бәйге-фестивалдәрҙең үҙе үк сәйәсәт икәнен, уны үҫтереү шулай уҡ тәрбиәүи, идеологик эш икәнен аңлап, дәүләт кимәлендә ярҙам күрһәтте. Һәр дәүләт үҙ үҫешендә барыбер үткәндәргә таяна. Дәүләт ерле халыҡтың, ошондағы милләттәрҙең мәҙәниәтен үҫтермәй икән, бер ҡасан да алға бара алмаясаҡ, сөнки йыр ҙа, бейеү ҙә тарих менән бәйле. Бөгөн иһә ауыл менән ауыл, ҡала менән ҡала, район хакимиәттәре үҙ-ара ярышып, бейеүселәре менән ғорурланып йәшәй. Биш йыл эсендә махсус ошо бәйге өсөн генә 67 яңы бейеү ҡуйылған - был үҙе ҙур ҡаҙаныш һәм үҫеш. "Байыҡ" халыҡта бейеү һөйөүсән тыуышын яңынан асты.

Уҙған йылдың аҙағында мәҙәниәтте үҫтереү буйынса Хөкүмәт ултырышы булғайны, ундағы һөйләшеүҙәр күберәк профессиональ сәнғәтте үҫтереүгә арналды. Мин быны менән килешеп етмәйем, сөнки һәр профессиональ сәнғәттең нигеҙендә үҙешмәкәр сәнғәт ята. Был йәһәттән Әзербайжан менән Ҡаҙағстанды өлгө итеп ҡарарға була, улар үҙ ерлегенә хас үҙешмәкәр сәнғәтте нигеҙ итеп алып, уны профессиональ кимәлгә тиклем үҫтерә алған. Ҡаҙағстанда хатта президент эргәһендә халыҡ ижадын үҫтереү буйынса департамент бар. Республикала дөйөм бейеү сәнғәте тураһында һүҙ йөрөткәндә, бөгөн профессиональ бейеү коллективтарына дәүләт ярҙамы мотлаҡ кәрәк. Иң тәүҙә Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең ветерандары иҫән саҡта Фәйзи Ғәскәровтың бейеүҙәрен тергеҙергә кәрәк, быны менән бар коллективтар ҙа шөғөлләнергә бурыслы. Башҡорт бейеү алымдарын өйрәнергә, фондтар тәҙөү эшенә тотонорға ваҡыт. ЮНЕСКО кимәлендә тарихи ҡомартҡы кеүек һаҡларға тейешбеҙ ҡайһы бер бейеүҙәрҙе.

Шулай ҙа мине бөгөн иң ҡыуандырғаны - балаларҙың "Байыҡ" конкурсы. Унда башҡорт бейеүҙәрен ихлас итеп башҡарыусы балалар йылдан-йыл күберәк килә. Тимәк, башҡорт бейеүенең киләсәге бар, быуындан-быуынға уның үҙенсәлектәре, нескәлектәре өҙөлмәй тапшырыла киләсәк. Ошонан һуң шундай бурысты иҫкә төшөргө килә: башҡа республикаларҙа бер нисәшәр балалар бейеү ансамблдәре булдырылыуын күҙ уңында тотоп, беҙҙең республикала ла дәүләт статусындағы балалар бейеү ансамбле булдырырға ваҡыт еткәндер.

### Башҡорт йырын һәр кем йырлай алмай...

Халыҡ бейеүе рухты үҫтереүсе генә түгел, ә иң тәүҙә рухты уятыусы ла булып тора икән, башҡорттоң йыры ла ошондай уҡ үҙенсәлеккә эйә. Элегерәк Флүрә Сафиуллина менән Вилдан Йомағужин бәләкәй генә студияла йырсыларҙы телевидениеға төшөрә ине. Телевидениеның ошо матур башланғысын да иҫтә тотоп, халыҡ йырҙарын йырлаған йәштәрҙе лә күрһәтергә тигән теләктән сығып, "Башҡорт йыры" проекты тыуҙы. Сәләймән Абдуллин, Абдулла Солтанов, Иншар Солтанбаев кеүек тәбиғилектә лә һаҡлап, вокал алымдарҙы ла дөрөҫ ҡулланып йырлаусы иҫ киткес йырсыларыбыҙ бар. Мин, мәҫәлән, халыҡ йырҙарын ошо йырсылар башҡарыуында тыңлайым һәм, гәҙәттә, хәҙерге йырсыларҙы улар менән сағыштырам. Тормошта үткәндәрҙән һабаҡ алып ҡына түгел, үткәндәрҙе өлгө итеп алырға ла мөмкин бит. Башҡарыу оҫталығы менән тап ошо йырсыларға тиңләшергә тырышыу - үҙе үҫеш. Ижадтағы иң ҙур яңылыҡ ана шулдыр ул.

"Башҡорт йыры" менән "Байыҡ" конкурстарының телевизион форматта барыуы уңышлы, сөнки телевидениеның мөмкинлектәре лә ҙур. "Ирәндек мондары" кеүек оҙон көй бәйгеләре үтеп торһа ла, улар бернисә йылға бер тапҡыр ғына була. Ә был бәйге йыл дауамында бара, йырсыларға ла үҙенсәлекле реклама булып тора, тапшырыуҙарҙы дәреслек һымаҡ ҡулланырға ла мөмкин. Икенсе яҡтан, был тапшырыуҙар телевидениеның үҙенең рейтингын да күтәрә, халыҡ уларҙы яратып ҡарай.

Шоу-бизнес заманында йәшәйбеҙ. Был миңә үҙемде продюсер булараҡ һынап ҡарау мөмкинлеге бирә. Әммә йыш ҡына беҙгә артистарҙың ялҡаулығы ҡамасаулай. Йырсыларыбыҙҙың ҡайһы берҙәренең үҙ талантына битараф булыуы, уны үҫтереү юҫығында эшләмәүе тотош республикала шоу-бизнес үҫешенә аяҡ сала. Концерт әҙерләйек, тиһәң, матур итеп аранжировка яҙҙырыу мөмкинлеге лә сикле, сөнки Өфөлә быны менән шөғөлләнеүсе кешеләр берәү-икәү генә, бөтә йырсыларға ла аранжировканы улар яҙа һәм шуға ла йырҙар ҙа бер төрләрәк килеп сыға. Һин продюсер булараҡ талап ҡуяһың икән, һинең талабыңа тап килгән йырсылар булырға һәм улар башҡарыу, стиль, костюм йәһәтенән эшләнергә тейеш. Мәҫәлән, "Башҡорт йыры"нда кейемгә талапты юғары ҡуйбыҙ, сөнки сәхнә ул зауыҡ тәрбиәләй торған урын. Икенсе яҡтан, шоу-бизнес өлкәһендә үҙеңде тәҡдим итә белергә лә кәрәк, йырсы тауышы менән генә түгел, бөтөн яҡтан үҙен күрһәтә белһен. Тамашасы ла хәҙер бик талапсан: артист сәхнәгә ниндәй генә аранжировка эшләп сыҡмаһын, фонограммаға йырлап тора икән, ул уны ҡабул итмәй. Ә тауыш фонограммаһыҙ йырланған халыҡ йырында күберәк асыла. "Башҡорт йыры"ның гала-концертында йырсыларҙы "минус"ҡа йырлатҡайныҡ, кемдең нимәгә һәләтле икәне күренде лә ҡуйҙы. Башҡорттоң боронғо йырын һәр кем йырлай алмай шул. Мин йондоҙ һәм халыҡ артисы, тип йөрөп кенә бөйөк булып булмай, сөнки замана үҙгәрә, тамашасы ла үҙгәрә, уға ярар өсөн үҙ өҫтөңдә күп эшләргә кәрәк.

### Барыбыҙ ҙа бер уҙаман ғына...

Тормош булғас, төрлө яҡҡа һуҡҡыланыуҙар, күңел төшкән мәлдәр ҙә була. Шулай ҙа кеше һынауҙарға бирешмәҫкә, һынмаҫҡа һәм Хоҙайға һыйынырға тейеш, тип уйлайым. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте киң. "Байыҡ"та нисәмә бейеүсене тамашасы алдына сығарыуға сәбәпсе булдым. Әммә, Мостай Кәрим әйтмешләй, мин ошо быуаттың ошо йылдарында уҙып барыусы уҙаман ғына, ҡасандыр минең урыныма башҡалар киләсәк, улар нимәлер эшләйәсәк. Шуға бар нәмәгә фәлсәфәүи яҡтан ҡарарға кәрәк. Мин талантлы, минең шөһрәтем ҙур, тип йөрөргә ярамай, Аллаһы Тәғәлә һынауҙы икенсе яҡтан килтереп биреүе ихтимал. Шуға ла, булғанға шөкөр итә беләйек, замандаштар. Ҡайһы берҙә, эш күп, тип зарланабыҙ, ә эшһеҙ ултырһаҡ? Эш күп булыуы бәхет бит ул, телевидениела эфирға сыға алмай ултырған ваҡыттар ҙа булды бит. Ә инде көнләшкәндәргә, үҙҙәре эшләй алмағандарҙың әйткән һүҙенә иғтибар итмәҫкә тырышам, быға ваҡытым да юҡ.

Киләсәккә ҡуйған маҡсаттарымдың береһе - музыка ҡоралдары менән берәй тапшырыу йә фестиваль эшләү. Башҡортса сериал, кино төшөргөм килә, был йәһәттән идеяларым күп. Быны Рияз Исхаҡовтың клиптары иҫ киткес бит, беҙҙә һәр бер легендаға, йырға клип төшөрөп кенә түгел, уларҙы ҙур фильм итеп тә эшләргә мөмкин. Уйлап ҡараһаң, һәр быуын замандың ниндәйҙер ваҡиғаһы ҡорбаны. Кемдер хосусилаштырыу чектары, кемдер алыпһатарҙар ҡорбаны, кредит тарихтарында кемдер уңған, кемдер туңған - халыҡҡа ошоларҙы фильмдар аша күрһәтеп булыр ине. Телевидение - ул хәрәкәт, бөгөн студияла сәйәсәт тураһында һөйләшеп ултырыу мөһим түгел, был тапшырыуҙар бөгөн бар, иртәгә юҡ. Ә тарихта ҡалдыра торған фильмдар, документаль фильмдар күберәк булырға тейеш - телевидениеның төп маҡсаты ошонда. Туранан-тура әйтелгәндә һирәк кеше ҡабул итә, ә кинәйә, текст артына һалып әйтһәң, күрһәтһәң, күпкә үтемлерәк була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер генә сәнғәт төрө лә халыҡ яҙмышынан, халыҡ тормошонан айырым үҫешә алмай. Бөгөн уң ҡулы менән башҡорт бейеүе, һул ҡулы менән башҡорт йырына таянып ижад итеүсе Рита Рәшит ҡыҙының ошоно яҡшы аңлағанға һәм тойғанға күрә лә ижад юлдары Күктәр тарафынан уңышҡа насип булып торалыр, күрәһең. Башҡорт бейеүе менән башҡорт йырына яңы йылда тағы ла яңы үрҙәр теләйек!**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*✓ Ҡайһы бер осраҡта көсләп тағырға тырышылған түләүле дауалау курсынан сирле баш тартырға мөмкин һәм дауахана, ФОМС сиктәрендә, уны бушлай дауаларға бурыслы.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СПОРТ МЕНӘН...

## күмәкләп шөғөлләнеү яҡшы

■ АҠШ-тың Калифорния университеты ғалимдары белдереүенсә, артыҡ ашағандан һуң кеше үҙен сәғәт бүлкәттәрен алыштырғандай тоя, сөнки ул шундай уҡ эҙемтәләр барлыҡҡа килтерә. Яңы йыл байрамдарынан һуң кешеләр артыҡ ашап ҡына ҡалмай, ә төндәрен дә өҫтәл артында ултырырға күнегә. Организм быға бөтөнләй күнекмәгәнлектән, көслө генә стресс кисерә, тип яҙа Glob News. Доктор Луис Пташектың лабораторияла сысҡандарҙа үткәргән һынауҙары күрһәтеүенсә, был организмдағы биологик ритмдарҙың боҙолоуы менән янай.

■ Америка ғалимдары асыҡлауынса, тауыҡ һурпаһы һалҡын тейеүҙән һаҡлай. Ундағы карнозин тип аталған матдә инфекцияны иртә осорҙа юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Карнозин организмда даими булһа, тимәк, кеше миҙгел инфекцияларына ла бирешеп бармаясаҡ. Доктор Стэфан Реннард ун йыл элек үк тауыҡ һурпаһының дауалау үҙенсәлектәре тураһында белдергәйне. Ул һурпаның тап ошо төрө нейтрофилдар хәрәкәтен туҡтатыуын һәм өҫкө тын юлдары инфекцияһы билдәләрен кәметеүен раҫлаған. Күптән түгел Небраски университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар быны дөрөҫләгән. Был тәжрибәлә ҡатнашыусыларҙың барыһы ла һалҡын тейҙереп ауырыған. Уларҙың бер өлөшөнә - һалҡын, икенсе өлөшөнә йылы һыу, өсөнсөһөнә тауыҡ һурпаһы биргәндәр. Билдәле булыуынса, йылы шыйыҡса һалҡын тейгәндә лайланы сығарыуҙы тиҙләтә, ә был тын юлдарын таҙарта. Әммә йылы һыуға ҡарағанда тауыҡ һурпаһы быны яҡшыраҡ башҡара. Бынан тыш, тауыҡ һурпаһы танауҙа һаҡланыу механизмын да эшләтеп ебәрә, шуға ла инфекция организмға үтеп инә алмай.

■ Тель-Авив университеты тикшеренеүселәре әйтеүенсә, һимеҙлек кешенең дөйөм торошона ғына түгел, ә психик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһап, йыш ҡына депрессияға алып килә, бындай кешеләр эштә лә тиҙерәк арый. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, физик әүҙемлек өсөн ваҡыт табыусылар бындай проблемаларға осрамай, мәҫәлән, аҙнаһына 4 тапҡыр спорт менән шөғөлләнеүселәр депрессияның нимә икәнен дә белмәй. Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Америка психологтары раҫлауынса, спорт менән айырым шөғөлләнеүгә ҡарағанда, уны ғаилә ағзаларының дөйөм шөғөлөнә әйләндереү күпкә уңышлыраҡ. Был сәләмәтлек менән бер рәттән, туғанлыҡ ептәрен дә нығытасаҡ, ти ғалимдар. Спорт ололарҙың йәшәү тонусын күтәреп, буйҙарын һомғолораҡ итһә, балалар бәләкәй саҡтан сәләмәт йәшәү рәүешенә өйрәнәсәк. Юғиһә, ата-әсәләр балаһын спорт секцияһына яҙҙырып та, үҙе спортҡа битараф икән, бала уларға ҡарап, өйҙә ултырыуҙы хуп күрәсәк. Психолог Сьюзен Бартел әйтеүенсә, саф һауала бергәләп уйнау, йәйәүләп йөрөү ҙә сәләмәтлекте лә, ғаиләне лә нығытасаҡ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ХИРУРГКА ЭЛӘГЕҮ...

## терапевт кабинеты аша



**Былтыр Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры "Медицина ойошмалары тарафынан түләүле медицина хеҙмәттәре күрһәтеү буйынса ҡағиҙәләрҙе раҫлау тураһында"ғы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документта медицина хеҙмәттәре күрһәтеүгә ҡағылышлы иң мөһим һәм әһәмиәтле моменттар билдәләнгән һәм уның төп үҙенсәлеге шунда: ҡағиҙәләр, тәү сиратта, ҡулланыусыға, йәғни ауырыуға йүнәлтелгән. Ҡарар, шулай итеп, ауырыусы мәнфәғәттәрен беренсе урынға ҡуя һәм уның тейешле медицина ярҙамы алыуына булышлыҡ итә.**

Бер йыл элек дәүләт медицина учреждениеларында күрһәтелгән медицина хеҙмәттәрен, ысынында, түләүле итеүҙе нығытҡан закон ҡабул ителгәйне. Хәҙер иһә ауырыуҙарға нимә өсөн түләргә кәрәк икәнен аныҡлаған ҡарарға ҡул ҡуйылды. Ҡарар ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инде. Шулай итеп, ҡарарға ярашлы беҙ хәҙер сирләп киткән осраҡта ниндәй дауаны бушлай аласаҡбыҙ, ә ҡайһыһына түләргә тура киләсәк икәнен беләбеҙ.

Былтыр закон ҡабул ителгәндән һуң, түләүле хеҙмәттәр исемлегенә нимәләр индереләсәге хаҡында бәхәстәр, фараздар күп булды. Тәү ҡарашҡа, ысынлап та, барыһы ла зыянһыҙ күренә ине. Мәҫәлән, ауырыуҙарҙың дауаханала өҫтәмә уңайлыҡ, кәрәкле табипҡа тиҙ генә эләгеү, шулай уҡ анализды өйҙә генә тапшырыу мөмкинлеге алыуға аҡса түләүе берәүҙә лә әллә ни борсолоу тыуҙырмаясаҡ. Сөнки кеҫәһе ҡалын пациентҡа аҡса түләү һәм оператив рәүештә дауалау курсы үтеүгә кәрәкле йүнәлтмә алыу бер ни ҙә түгел. Ә финанс мөмкинлеге булмағандарға дауалау курсын башлау өсөн оҙағыраҡ юл үтергә тура киләсәк. Юл, әлбиттә, оҙон, ләкин арзан. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәрҙең былай ҙа шығырым тулы поликлиника һәм дауахаmaking наларға килеп йөрөмәүе һыу буйы сираттарҙың кәмеүенә килтерәсәк. Хәлләләр ҙә шат, башҡалар ҙа ҡәнәғәт. Барыһы ла шәп кеүек...

Ләкин әлеге Ҡарарға ярашлы, тағы ла бик күп хеҙмәт өсөн түләргә кәрәк буласаҡ. Мәҫәлән, кемдеңдер күҙе ауыртып китте, ти. Яңы ҡарар үҙ көсөнә ингәнгә тиклем, амбулатор карточканды ҡулыңа тотоп, туптура күҙ табибына барырға мөмкин ине. Тик хәҙер был уңайлыҡ бөттө, сөнки күҙ табибына эләгер өсөн, тәү сиратта, ауырыу үҙенең участка табибынан, йәғни терапевтан (ә балалар өсөн - педиатрҙан) йүнәлтмә алырға бурыслы. Йәғни хирургка ла, гинекологка ла, неврологка ла һәм башҡа белгестәргә лә юл терапевт бүлмәһе аша уҙасаҡ. Әгәр ҙә терапевт ауырыу эләгергә теләгән белгескә барыуҙы кәрәк тип тапмаһа (шулай уҡ был осраҡта йүнәлтмә яҙмаҫ өсөн башҡа бик күп төрлө сәбәптәр табырға була), сирлегә йүнәлтмәне дауахана кассаһында "яҙып" бирәсәктәр. Әлбиттә, терапевт ҡарары менән ризалашмайынса, бүлек мөдиренә, баш табипҡа, тағы ла әллә ҡайҙарға мөрәжәғәт итеп, кәрәкле йүнәлтмәне ҡулға төшөрөргә мөмкин. Ләкин һаулыҡҡа ҡығылғанда һәр минут ҡәҙерле, ә бындай йөрөүҙәр, ғәҙәттә, бер-нисә минут эсендә генә хәл ителмәй. Ә участка табиптарының әҙ генә түгеллеген һәм улар тарафынан "ҡыйырһытылған" башҡа сирләләрҙе лә иҫәпкә алғанда, мөдиргә бер көн эсендә генә барып етмәҫкә лә мөмкин. Әлбиттә, аҡ халатлыларҙы гуманлы, кешелекле һәм һәр сирле өсөн янып-көйөп ултырыусы итеп күҙ алдына баҫтырған хәлдә лә, көнөнә тиҫтәләгән кешегә йүнәлтмә яҙыу физик яҡтан мөмкин булмаған эш.

Әле лә дауаханаларҙағы иң ҙур сират әлеге лә баяғы терапевт кабинеты алдында, ә уларға теге йәки был табипҡа йүнәлтмә алырға теләүселәр ҙә килеп ҡушылһа, бөгөнгө көндә сираттарҙа күҙәтелгән ыреш-талаштың ҙур ғауғаға әйләнәсәге көн кеүек асыҡ. Терапевт ауырыуҙың хәленә инеп, йүнәлтмә биргән осраҡта ла, ул ҡағыҙ менән бары тик шул уҡ дауаханалағы табипҡа күренергә мөмкин буласаҡ. Йәғни сирләүсе бары тик үҙе беркетелгән дауаханаға ғына мөрәжәғәт итә ала, ә башҡа дауаханалағы киңерәк профилле белгескә күренеү, яҡшыраҡ медицина ҡорамалында тикшереү үтеү, шулай уҡ эре медицина үҙәгендә стационар дауаланыу өсөн дә кеҫәнән аҡса сығарып һалырға тура киләсәк.

Шулай уҡ сирҙе дауалау өсөн кәрәкле дарыу раҫланған исемлектә юҡ икән, ауырыу үҙ иҫәбенә дауаланырға тейеш буласаҡ. Ә ул исемлекте төҙөүгә, теге йәки был дарыуҙы раҫлауға һәм башҡа бик күп бюрократик ҡаршылыҡтарҙы үтеүгә киткән ваҡыттың бер-нисә йылға һуҙылыуын иҫәпкә алғанда, етерлек аҡсаһы булмаған бик күптәр тейешле дауаны көтөп ала алмаҫҡа ла мөмкин. Шулай ҙа, Ҡарарға ярашлы, әгәр ҙә бындай дарыу кешегә үтә лә мөһим булғанда йәки сирле башҡа дарыуҙар ҡабул итә алмаған осраҡта, ул бушлай бирелергә тейеш.

Ғөмүмән алғанда, яңы Ҡарарға ярашлы, мотлаҡ медицина страховкаһы программаһына индерелмәгән һәр осраҡ өсөн түләргә тура киләсәк. Шулай булғас, ауырымаҫҡа, ә сирләп киткән осраҡта иһә ныҡлы нервыларға йәки ҡалын кеҫәгә эйә булыу мотлаҡ. Әлбиттә, аҡсаһы юҡ, тигән һылтау менән сирлегә үлергә бирмәйәсәктәр. Тиҙ ярҙам һәм тәүге медицина-санитар хеҙмәте, поликлиника ярҙамы, дауаханаға ятыу, алда әйтеп үтелгән осраҡтан башҡа, операциялар бушлай атҡарыласаҡ. Бының өсөн ни бары түҙемлегеңде усыңа йомарлап, сират етеүен көтөргә генә ҡала. Шулай ҙа кеше ғүмере өсөн хәүеф янаған осраҡта, хроник ауырыуҙар көсәйгән ваҡытта "Рәсәй Федерацияһы граждандарының һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында"ғы федераль законға ярашлы, медицина ярҙамы бушлай күрһәтелергә тейеш.

Ҡарарҙа айырым урынды мәғлүмәт хаҡындағы бүлек алып тора. Уға ярашлы, ауырыу (ҡарарҙа ул "ҡулланыусы" тип билдәләнгән) үҙен ҡыҙыҡһындырған бар һорауға ла тулы яуап алырға хоҡуҡлы. Шулай уҡ дауахана сирлене төҙәләсәк килешеүҙең һәр шарты менән таныштырырға бурыслы. Сирле хатта дауалау курсының дөйөм сметаһын төҙөүҙе лә талап итергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта дауалау учреждениеһы сирлегә ниндәй хеҙмәттәр бушлай күрһәтәсәге хаҡында мәғлүмәт бирергә лә тейеш. Ә ҡайһы бер осраҡта көсләп тағырға тырышылған түләүле дауалау курсынан сирле баш тартырға мөмкин һәм дауахана, ФОМС сиктәрендә, уны бушлай дауаларға бурыслы.

Халыҡҡа күрһәтеләсәк түләүле хеҙмәттәр хаҡын бюджет һәм шәхси медицина учреждениеларының ойоштороусылары үҙҙәре билдәләй. Ә бына дауалауға килешеү, кәрәк булһа, смета төҙөү, түләүле һәм түләүһеҙ хеҙмәттәрҙе комбинациялау - барыһы ла дауалаусы табип елкәһенә һалына. Шулай итеп, ул бер үк ваҡытта сирлегә диагноз ҡуйырға, дауалау курсы уҙғарып та өлгөрөргә тейеш. Табип, шулай итеп, сирлене тиҙ һәм һөҙөмтәле дауалау менән бер рәттән, түләүле хеҙмәттән киләсәк эш хаҡын арттырыу мәсьәләһен уйлап баш ватасаҡ. Был осраҡта күптәрҙең түләргә һәләтле булған сирләләр менән эшләргә тырышыуына, ә аҡсалары булмағандарға ҡараштың да, мөнәсәбәттең дә "йомшаҡ" булыуына аптырарға кәрәкмәйҙер. Әлбиттә, аҡ халатлыларҙың барыһын да бер күҙлектән сығып баһалау дөрөҫ түгел, сөнки үҙ эшенә мөккиббән киткән, бар күңелен сирлене аяҡҡа баҫтырыуға йүнәлткән, ал-ял, көн-төн белмәй эшләгән яҡшы белгестәр етерлек. Әммә бөгөнгө көн йәштәренең күбеһе кешелеклелек, рәхимлелек һәм бушлай ярҙам итеү кеүек принциптарҙан алыҫ тороуын иҫәпкә алғанда, киләһе 15-20 йылда һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге буласаҡ үҙгәрештәргә оло хәүеф менән ҡарала. Ә нәҡ бөгөнгө йәштәр иңенә яңы ҡағиҙәләр һәм закондарҙы тормошҡа ашырыу бурысы йөкмәтеләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сит илдәрҙә "түләүһеҙ медицина" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ тиерлек. Шуға күрә унда кеше үҙ һаулығына һәр ваҡыт яуаплы ҡарай һәм аҙ ғына ауырыҡһыныу тойғанда ла табипҡа мөрәжәғәт итә. Ә беҙҙә иһә хәл бөтөнләй икенсе. Аяҡтан йығылмайынса, үлемесле хәлгә етмәйенсә, дауаханаға бармайбыҙ һәм сирҙе дауалау һөҙөмтә бирмәһә йәки оҙаҡҡа һуҙылһа, табиптарҙы ғәйепләргә лә күп һорамайбыҙ. Шуға күрә, бәлки, был закон Рәсәй халҡына үҙ һаулығына иғтибарын арттырыуға булышлыҡ итер, тигән ышаныс бирә, сөнки ауырымау яҡшыраҡ икәнлеген әле булһа аңлап етмәйбеҙ шикелле.**

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

✓ ***Баҡтиһәң, бүләк итергә, кешенең күңелен күтәрергә, кәрәк икән, йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булғандарҙа, ғашиҡ булған, яратҡан кешеләрҙеке кеүек, ҡеүәтле көс, энергия барлыҡҡа килә икән.***

*ҺАБАҠТАР*

**Ҡояшлы көҙгө көн. Ҡала уртаһы булһа ла, һауа саф, үтә күренмәле таҙа тойола. Тәүге ҡырау һыуығы уны тағы ла сафландырып ебәргән, тын алыуы иркен, рәхәт. Төпһөҙ зәңгәр күккә һоҡланып килә торғас, ҡаршымда аҡ яулығын мосолманса килешле генә ябынған, балитәкле аҡ күлдәк кейгән инәй пәйҙә булды. Был оло йәштәрҙәге апай элек тә урамда осрай торғайны, шуғалырмы, әллә йөҙөндәге мөләйем йылмайыуы менәнме, бик таныш тойолдо. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштым да, йома хәйерен бирергә рөхсәт һораным. Хәйерлекте һаҡ ҡына ҡулъяулыҡҡа төрҙө ул, әсәйемдең, минең исемде һораны, ҡайтҡас доға ҡылырмын, тип кеçәһенә һалды.**



# ҺАРАНЛЫҠТАН ДА...

## тар күңеллелектән һаҡла, Аллам...

"Аллаһу Тәғәләнән, яман күҙҙән, яман һүҙҙән, тар күңеллелектән, һаранлыҡтан һаҡла, тип һорап йөрө, ҡыҙым, тап шулар кешене бөтөрә, бәхетһеҙ итә. Яман күҙ кешене ауырыуға һабыштырһа, яман һүҙ ауыр уйға һала, төшөнкөлөккә бирелдерә. Ә тар күңеллелек, һаранлыҡ иһә кешенең үҙенең күңел тыныслығын ала, тормошҡа, эргә-тирәндәгеләргә булған мөхәббәтен үлтерә", - тине ул.

Иртә һайын һәр кем, яман һүҙҙән, күҙҙән, яуыз уйлы кешеләрҙән һаҡла, хәйерле ғүмер, һаулыҡ насип ит, тип Хаҡ Тәғәләгә ялбаралыр. Ә бына ҡомһоҙлоҡтан, һаранлыҡтан, тар күңелле булыуҙан һаҡла, тигәнде бөтәбеҙ ҙә әйтәме икән?

Кешегә әйберен бирергә ҡыҙғаныусан, ҡулына эләккәнде ысҡындырмаҫҡа тырышҡан, үҙендә булһа ла башҡаларҙыҡына иҫәп тотҡан кешегә - һаран йәки ҡарун, ә аҡсаға-мөлкәткә туймағанға, башҡалар ҡулындағына ымһынғанға ҡомһоҙ, тибеҙ.

Бәләкәй саҡта тыңлап йәки уҡып үҫкән әкиәттәрҙән, хикәйәттәрҙән, бөгөн ҡараған киноларҙан күренеүенсә, аҡсаға, байлыҡҡа ҡыҙыҡҡандарҙың тормошо бер ҙә көнләшерлек түгел. Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәтен алайыҡ. Өйрәнсек ҡомағайлығына баш була алмай, үҙенең бөтә көнитмешен алдаҡҡа, ялғанға ҡора. Һөҙөмтәлә сере асылып ҡуймаһын тип, ҡурҡып йәшәргә мәжбүр була. Һөнәрсе яһаған көршәктәрҙе йәшереп һатып, муллыҡта, байлыҡта йәшәгәндер ҙә, әммә ялған дан уны барыбер бәхетле итмәгәндер.Тар күңеллелек иһә һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡтоң айырылғыһыҙ юлдашы. "Күңеле тарҙың ҡоласы киң", "Күңелең тар булғас, ишегең киң булыуҙан мәғәнә юҡ", "Тар күңелле киң донъяға һыймаç" тигән ҙур мәғәнә һалынған әйтемдәр бар халыҡта.

Инглиз ғалимдары шундай тикшеренеү үткәргән. Оҙайлы йылдар улар ике төркөм кешеләрҙе күҙәткән: уларҙың береһендә бүләк бирергә, ә икенсеһендә, киреһенсә, күберәк алырға яратҡандар булған. Был ҡыҙыҡлы тикшереү шуны асыҡлаған: тәүге төркөмдәгеләр үҙҙәрен бәхетлерәк, уңышлыраҡ тойған, һаулығына һирәгерәк зарланған, оҙағыраҡ йәшәгән. Икенсеһендәгеләр иһә бик һирәк эшенән, тормошонан, эргә-тирәһендәгеләрҙән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисергән, сәләмәтлегенә йыш зарланған. Баҡтиһәң, бүләк итергә, кешенең күңелен күтәрергә, кәрәк икән, йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булғандарҙа, ғашиҡ булған, яратҡан кешеләрҙеке кеүек, ҡеүәтле көс, энергия барлыҡҡа килә икән. Тап ошо энергия ауырыуҙан һауығырға, үҙендә бәхетле, уңышлы тойорға, ғүмерҙе оҙайтырға ярҙам итә.

Ғашиҡ булыу, тигәндән, 15-16 йыл элек булһа ла, бер танышымдың һөйләгәне бер ҙә иҫтән сыҡмай: "Мин йыш ғашиҡ булам, әммә был минең ғаиләм тормошона бер ҙә ҡамасауламай. Аныҡ бер кешегә лә (ул, әлбиттә, был хаҡта уйлап та ҡарамай), уйлап сығарған образға ла ғашиҡ булам. Хыялымдағы шул кешегә оҡшар өсөн кейенәм, биҙәнәм, тырышып эшләйем. Был тойғо мине тонуста тоторға ярҙам итә", - ти торғайны ул. Ысынлап та, ул көр күңеллелеге, ваҡ-төйәктән өҫтөнөрәк булыуы, һаулығы шәптән булмаһа ла, бер нәмәгә лә зарланмауы, киреһенсә, яуаплыраҡ, тырышыраҡ булыуы менән айырыла ине. Хәҙер бер нисә йыл хаҡлы ялда инде, әммә бөгөн дә йәштәрсә дәрт менән донъя көтә ул. Яңыраҡ хәләл ефете менән ҡултыҡлашып китеп барғанында тап иттем уны. "Һаман да ғашиҡ булаһыңмы?"- тип көлөп һораным. "Һис шикһеҙ",- тип яуап бирҙе ул...

...Ҡаршыма осраған яҡты йөҙлө инәйгә рәхмәт әйттем дә ары атланым. Үҙем эстән генә ул әйткән фәһемле һүҙҙәрҙе ҡабатланым: "...Һаранлыҡтан, тар күңеллелектән, ҡомһоҙлоҡтан һаҡлай күр, Хоҙайым!"

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Һауығыуҙың башы

Ике йыл ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлегендәге етешһеҙлектәр менән ыҙаландым. Һынылыш көтмәгәндә булды. Нисектер, кисен шыйыҡ һөт ашы ашаным һәм ҡайнымды тимер юл вокзалына оҙатып киттем. Трамвай салонының уртаһында, үҙемдән бейегерәк таянғысҡа тотоноп барам. Вокзал яғына тауҙан төшә башлағас, ҡапыл кендек тирәмдә нимәлер ҡуҙғалғандай, ашҡаҙанымда булған бөтә нәмә аҫҡа төшкәндәй булды. Әйтерһең, ниндәйҙер тығын асылып, ағым үҙ юлын тапты. Миңә еңел булып ҡалды. Бының барыһын да мин һөтлө аштың йоғонтоһо тип уйланым. Быға тиклем мин был ашты бөтөнләй тиерлек ашамай инем, сөнки ул үҙәгемде көйҙөрә һәм күңелде уйната ине.

Вокзалдан ҡайтҡас, йоҡларға яттым. Төнөн сәйер төш күрҙем. Һоро фонда саҡ ҡына уңға боролған үҙемдең башымды күрәм. Ул минеке кеүек тә түгел, ниндәйҙер ҡара төҫтә. Башымды ғына түгел, ҡулбашымдың яртыһын да күрәм. Был күренеш ниндәйҙер ҡараңғы киңлектә бара. Әллә урамда, әллә өйҙә - аңлашылмай. Төштәге аң икегә бүленде: мин үҙ-үҙемде күҙәтәм. Ниндәйҙер ваҡытҡа актер ҙа, тамашасы ла булдым. Әммә тән ҡиәфәтендә түгел, ә бары тик аң кимәлендә. Күҙ алдымда торған баштың ауыҙы көсөргәнештә ине. Ауыҙҙан ниндәйҙер аҡ йәбешкәк нәмә ауырлыҡ менән сыға. Ул дәүмәле менән дә, ҙурлығы менән дә таҙартылған бананды хәтерләтә. Уның өҫкө өлөшө бер ни тиклем бөгөлгән. Ҡайҙандыр уның ауыҙҙағы өлөшө ашҡаҙанға киткәнлеге билдәле. Аңым ашҡаҙандан нимәнеңдер сыҡҡанын теркәй. Ул бик ауырлыҡ менән сыға, башты ғына түгел, ашҡаҙанды ла ыҙаланырға мәжбүр итә.

Шунан һуң мин аҙнаһына ике тапҡыр һөтлө аш ашай башланым. Уны яҡынса ярты порция ғына ашаным. Йәшелсәләр менән бергә, аш яйлап ашҡаҙанда йылдар буйына яңылыш туҡланыу һөҙөмтәһендә йыйылған ҡатламдарҙан таҙарынырға ярҙам итте. Бер үк ваҡытта күпте кисергән йыуан эсәккә лә ярҙам итергә тырыштым. "Шиацу" китабында эсәктең эшмәкәрлеген еңеләйтеүсе күнекмә күреп, уны көнөнә бер тапҡыр булһа ла үтәй башланым. Шунда кеше организмының бер бөтөн булыуын тойҙом: ниндәйҙер ағзаның эшмәкәрлеге яҡшырыуы күпмелер ваҡыттан һуң мотлаҡ рәүештә икенсе ағзаның эшмәкәрлегендә ыңғай сағылыш таба. Ашҡаҙан-эсәк трактының эше яҡшыра башлағас, ҡурылдайҙағы сир ҙә сигенә башланы. Баш ауыртыуы бөттө. Минең тиҙ ярһыусан һәм ҡаршы һүҙҙе күтәрмәгән характерымда тыныслыҡ һәм ҡәнәғәтләнеү барлыҡҡа килде.

Шуға күрә, ниндәйҙер сир менән интегеүселәргә мөрәжәғәт итеп, шулай тиер инем: организмығыҙҙы һауыҡтырыуҙы тап ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеген яйға һалыуҙан башлағыҙ. Бының өсөн һөтимәрҙәр төркөмөнә ҡараусы малдың итен ашауҙан булһа ла баш тартығыҙ. Ул саҡта ыңғай үҙгәрештәр үҙен оҙаҡ көттөрмәç.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

26. Түҙемле, ныҡышмал, ғәҙел, хаҡ һәм йомарт булығыҙ.

27. Оҙайлы эш көнө һуңында йыла ванна ҡабул итегеҙ. Үҙегеҙҙе бәләкәй генә ҡаҙанышығыҙ өсөн дә бүләкләгеҙ. Аҡылығыҙҙы, тәнегеҙҙе һәм рухығыҙҙы яңыртыу өсөн ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Тиҙҙән маҡсаттарығыҙға өлгәшерһегеҙ һәм юғары ҡаҙаныштарҙың икенсе кимәленә күтәрелерһегеҙ.

28. Дөрөç тын алыу мөһимлеген һәм уның үҙегеҙҙә булған энергия сығанағы менән бәйләнешен өйрәнегеҙ. Мейегеҙ тын алыу менән туранан-тура бәйле. Мәçәлән, мейе ярһыу саҡта тын алыу йышая һәм тәрән булмай. Әгәр һеҙ көсөргәнештән арынып, фекерегеҙҙе туплаһағыҙ, тын алыу тәрәнәйә һәм тигеҙләнә. Тәрән диафрагма тын алыуын күнектереп, һеҙ үҙегеҙҙә ҡатмарлы хәл-торошта ла һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға мәжбүр иткән тыныслыҡ торошон тәрбиәләй алаһығыҙ. Көнсығыштың тауҙарҙа йәшәгән аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен онотмағыҙ: "Дөрөç тын алыу - тимәк, дөрөç йәшәү".

29. Үҙегеҙҙә үҙегеҙҙе анализлау көсөн аңлағыҙ һәм үҫтерегеҙ. Ул үҙ-үҙен аҡлай һәм максималь эшмәкәрлек һәләтен тотоуҙың мөһим сараһы булып тора. Беҙ барыбыҙ ҙа теге йәки был дәрәжәлә спортсы, артист, шуға күрә улар үҙҙәрен камиллаштырыу өсөн ҡулланған ысулдарҙы ҡулланыу беҙгә лә файҙалы. Әгәр күберәк энтузиазм күрһәткегеҙ килһә, һәр көн иртән: "Бөгөн миндә кисәгегә ҡарағанда энтузиазм күберәк һәм мин ошо сифатты көн һайын камиллаштырам", - тип ҡабатлағыҙ. Ябай блокнот һатып алығыҙ ҙа, ошо фекерҙе 500 тапҡыр яҙығыҙ. Быны даими интервалдар менән өс аҙна дауамында эшләгеҙ һәм үҙегеҙҙә был сифаттың нисек үҫешеүен күрерһегеҙ. Тиҙҙән ул һеҙгә киләсәк. Был стратегияны һинд аҡыл эйәләре үҙҙәренең рухи һәм аҡыл ҡеүәһен арттырыу маҡсатында меңәр йылдар ҡулланған. Һөҙөмтәләр шунда уҡ килмәһә лә танауығыҙҙы төшөрмәгеҙ. Улар мотлаҡ киләсәк. Әйтелгән һүҙ - аҡыл өсөн ҡеүәтле дәртләндереүсе ул.

30. Ҡаҙаныштарығыҙҙы һәм фекерҙәрегеҙҙе яҙып барыу өсөн көндәлек тотоғоҙ. Унда уңыштарығыҙҙы ғына түгел, проблемаларығыҙҙы ла, уңышһыҙлыҡтарығыҙҙы ла яҙығыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ҡағыҙға яҙыу - насар ғәҙәттәр менән көрәшеүҙең, рухты оптималь кимәлдә тотоуҙың, үҙеңдә асыҡ аҡыл тәрбиәләүҙең иң һөҙөмтәле ысулдарының береһе ул.

31. Стресс - теге йәки был ваҡиғаны аңлатҡанда үҙегеҙ тыуҙырған реакция. Ике кеше өсөн бер үк ваҡиға ике төрлө реакция тыуҙырыуы мөмкин. Мәçәлән, тәжрибәһеҙ оратор өсөн тантаналы йыйылышта сығыш яһау күңелендә ҡурҡыу тойғоһо уятһа, тәжрибәле агитатор бында үҙенең фекерҙәрен әйтеп ҡалыу өсөн мөмкинлек күрәсәк. Ваҡиғаның кире эҙемтәләре беҙгә табан йүнәлтелгән ниәтле эшмәкәрлек сәбәбе булыуын аңлап, беҙ теләһә ниндәй шарттарҙа ла юғары баçҡыста ҡала аласаҡбыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 14 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.35 "Ты не один". Сериал (16+)"
17.05 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Метод Фрейда", 9-я и 10-я серии (16+)
23.30 Ночные новости
23.50 "Все путем". Драма (16+)
01.45, 03.05 "И у холмов есть глаза" (18+)
03.00 Новости
03.50 "24 часа" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 1-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Вкус граната", 1-я и 2-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Марьина роща", 1-4-я серии. Сериал (12+)
01.00 "Девчата" (16+)
01.40 "Вести+"
02.05 "Дом черных теней". Остросюжетный фильм (16+)
04.00 "Комната смеха"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.05 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал (16+)
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Супруги". Чужие". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-6". Сериал (16+)
21.25 "Защита Красина-3", 1-я и 2-я серии (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Русский дубль". Сериал (16+)
01.35 "Дикий мир"
02.05 "Еще не вечер". "Клетка для "совы" (16+)
04.00 "Хранитель" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 Новости недели (на русск. яз.)**
**12.15 "Полезные новости" (12+)**
**12.30, 13.30,14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Кондалек" (6+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы" (6+)**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Орнамент"**
**17.45 "Мужской телевизионный клуб "Арслан" (16+)**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.45 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Еду я в деревню"**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 15 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.35 "Ты не один". Сериал (16+)"
17.05 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Метод Фрейда", 11-я и 12-я, закл. серии (16+)
23.30 Ночные новости
23.50 "Задиры" (16+)
01.00 "Морской пехотинец" (16+)
02.40, 03.05 "Джесси Стоун: резкое изменение" (16+)
03.00 Новости
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 2-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Вкус граната", 3-я и 4-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Марьина роща", 5-7-я серии. Сериал (12+)
00.15 "Дежурный по стране" (16+)
01.15 "Вести+"
01.40 "Иди домой". Драма (16+)
03.40 "Чак-4" (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.05 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал (16+)
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Поедем, поедим!"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Супруги". "Стриптиз". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-6". Сериал (16+)
21.25 "Защита Красина-3", 3-я и 4-я серии (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Русский дубль". Сериал (16+)
01.40 "Главная дорога" (16+)
02.15 "Дикий мир"

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Создай свое дело"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30,20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Отдел культуры" (12+)**
**12.30, 13.30,14.30,18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.15 "Салям+" (12+)**
**14.45 "Тамле" (на башк. яз.)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Книга сказок" (6+)**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Здоровое решение" (12+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.45 "Байык-2012". Республиканский телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 Художественный фильм (16+)**

## 16 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.35 "Ты не один". Сериал (16+)"
17.05 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Ангел в сердце", 1-я и 2-я серии (12+)
23.30 Ночные новости
23.50 "Гримм" (16+)
00.40, 03.05 "Подальше от тебя". Мелодрама (16+)
03.00 Новости
03.15 "24 часа" (16+)
04.05 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 3-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Вкус граната", 5-я и 6-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Марьина роща", 8-10-я серии. Сериал (12+)
00.15 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
01.15 "Вести+"
01.40 "Честный детектив" (16+)
02.15 "Кошмарный медовый месяц" (16+)
04.00 "Чак-4" (16+)

### НТВ

Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Супруги". "Свидетель". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-6". Сериал (16+)
21.25 "Защита Красина-3", 5-я и 6-я серии (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Русский дубль". Сериал (16+)
01.35 "Квартирный вопрос"
02.40 "Дикий мир"
03.05 "Терминал" (16+)
05.05 "Хранитель" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15, 21.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Создай свое дело"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Легенды. Р. Хасанов"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Волшебный курай"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Государыня русская песня". Памяти Г. Измайловой**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.55 Волейбол. Кубок вызова. "Урал" (Урал) - "Коммунальник" (Белоруссия). Прямая трансляция**
**22.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм (16+)**

## 17 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.35 "Ты не один". Сериал (16+)"
17.05 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Ангел в сердце", 3-я и 4-я, закл. серии (12+)
23.30 Ночные новости
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Суперперцы". Комедия (16+)
03.00 Новости
03.05 "Добыча" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 4-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Вкус граната", 7-я и 8-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Марьина роща", 11-13-я серии. Сериал (12+)
00.15 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
01.15 "Вести+"
01.40 "Цветы лиловые полей" (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.05 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал (16+)
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Супруги". "Неслужебное расследование". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-6". Сериал (16+)
21.25 "Защита Красина-3", 7-я и 8-я серии (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Русский дубль". Сериал (16+)
01.35 "Дачный ответ"
02.40 "Дикий мир"
03.05 "Терминал" (16+)
05.00 "Хранитель" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 21.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Создай свое дело"**
**10.30, 15.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Мир я вижу со светлой стороны". М. Карим" (6+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Автограф. Г. Кутуева"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Галямат донья"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Охота на радость". 10-летию РОО "Спортивный клуб "Рада" посвящается"**
**17.45 "Бахетнама"**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**22.00 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**23.25 Художественный фильм (16+)**

## 18 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.35 "Ты не один". Сериал (16+)
17.05 "Жди меня" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Две звезды"
23.30 "Пляж". Приключения (16+)
01.40 "Вердикт". Драма (16+)
04.10 "День смеха" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 5-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Вкус граната", 9-я и 10-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Марьина роща", 14-16-я, закл. серии (12+)
00.15 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе" (16+)
01.15 "Человек, который знал все" (12+)
03.25 "Чак-4" (16+)
04.40 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.05 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал (16+)
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Супруги". "Ротвейлер". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-6". Сериал (16+)
23.25 "Русский дубль". Сериал (16+)
01.25 "Экспресс". Биографическая драма (16+)
03.50 "Терминал" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Создай свое дело"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донья"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.30, 13.30,14.30,18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Войлок Минского рода"**
**15.15, 17.45 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Байтус" (6+)**
**16.45 "Без права на ошибку. В. Сахаутдинов" (6+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгельдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 Художественный фильм (16+)**

## 19 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Стежки-дорожки"
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Евгений Весник. Живите нараспашку!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Абракадабра" (16+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.10 "Абракадабра". Продолжение (16+)
16.10 "...В стиле JAZZ". Мелодрама (12+)
18.00 Вечерние новости
18.10 "Человек и закон"
19.15 "Минута славы" золотые страницы" (12+)
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
22.50 "30 лет. Начало". Юбилейный концерт Димы Билана
00.30 "Элементарно", 11-я серия (16+)
01.25 "Последний король Шотландии". Историческая драма (16+)
03.45 "Ниагара" (12+)
05.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

04.55 "Русское поле". Драма
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Планета собак"
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25 "Все не случайно". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Погоня"
15.35 "Субботний вечер"
17.30 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
18.35 "Полет бабочки". Мелодрама (12+)
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Полет бабочки". Продолжение (12+)
23.10 "Карусель". Мелодрама (12+)
01.10 "Детям до 16...". Мелодрама (16+)
03.00 "Горячая десятка" (12+)
04.10 "Комната смеха"

### НТВ

05.45 "Агент особого назначения". Сериал (16+)
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Государственная жилищная лотерея"
09.25 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога" (16+)
10.55 "Кулинарный поединок" с Оскаром Кучерой"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Версия". Детективный сериал (16+)
15.10 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..." (16+)
17.20 "Очная ставка" (16+)
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Одиссея сыщика Гурова". Сериал (16+)
23.15 "Антиснайпер". Боевик (16+)
01.05 "Антиснайпер. Двойная мотивация" (16+)
02.55 "Терминал" (16+)
04.50 "Хранитель" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям"**
**09.15 Мультфильм (на башк. яз.)**
**09.45 "Салям+" (12+)**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан" (16+)**
**12.00 "Следопыт"**
**12.15 "Позывной "Барс"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Здоровое решение" (12+)**
**13.30 "Замандаштар" (6+)**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Аплодисменты"**
**16.45 "Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. Во втором перерыве: Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Башкорттар"**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**20.15 "Деловой Башкортостан"**
**20.30 "Отдел культуры" (12+)**
**21.00 "Киномарафон "Народное кино" представляет... "Лови момент" (16+)**
**21.14 "Мир настоящих мужчин"**
**22.00 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**22.45 "Жизнь в песнях"**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

## 20 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Двойной обгон" (12+)
07.45 "Служу Отчизне!"
08.15 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" (12+)
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания" (12+)
13.10 "Тачки-2"
15.05 "Невероятные приключения итальянцев в России". Комедия
17.00 "Звездные мамаши"
18.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.10 "Отдам котят в хорошие руки". Комедия (12+)
21.00 "Воскресное Время"
22.00 "Команда-А". Боевик (16+)
00.30 "Телефонная будка". Триллер (16+)
02.00 "Пегги Сью вышла замуж" (16+)
03.55 "24 часа" (16+)

### РОССИЯ 1

05.20 "Охота на лис". Криминальная драма
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок"
11.45 "Печали-радости Надежды". Сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Печали-радости Надежды". Продолжение (12+)
16.00 "Смеяться разрешается"
17.40 "Эта женщина ко мне". Мелодрама (12+)
20.00 "Вести недели"
21.30 "Под прицелом любви". Криминальная драма (12+)
23.40 "Красный лотос". Криминальная драма (12+)
01.35 "Смертный приговор". Боевик (16+)
03.45 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "Детское утро на НТВ". Мультфильмы
06.10 "Агент особого назначения" (16+)
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача" (16+)
10.55 "Чудо техники" (12+)
11.25 "Поедем, поедим!"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Версия" (16+)
15.05 "Таинственная Россия" (16+)
16.00 "Сегодня"
16.20 "Гражданка начальница. Продолжение". Сериал (16+)
18.10 "Русские сенсации" (16+)
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание" (16+)
20.50 "Юля Абдулова. Моя исповедь"
22.00 "Ты не поверишь!" (16+)
23.00 "Реакция Вассермана" (16+)
23.35 "Луч Света" (16+)
00.10 "Школа злословия" (16+)
00.55 "Двое в чужом доме". Криминальная драма (16+)
02.55 "Терминал" (16+)
04.55 "Хранитель" (16+)

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Уткан гумер. 1960-е годы" (12+)**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.20 "Шэп арба"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус" (6+)**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**13.00 "Тэмле" (6+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30, 19.30 "Замандаштар" (6+)**
**16.45 "Магистраль"**
**17.00 "Историческая среда" (12+)**
**17.30 "Орнамент" (12+)**
**17.45 "Главное на земле - Человек. Т. Миннулин"**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Кондалек"**
**19.45 "Сэнгелдек"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Итоги спорта"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.20 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**22.00 "Вечер.com" (12+)**
**22.45 "Рождественский концерт"**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

## УЙЫНДАН - УЙМАҠ, БАШЫҢА - ТУҠМАҠ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары:**
**Горизонталь буйынса:** Серпантин. Командировка. Мөштөк. Спорт. Диван. Кокарда. Фланг. Карнавал. Ралли. Консилиум. Тутыя. Маскарад. Иле. Ялан. Тат. Астролог. Инициатор. Дорон. Ҡыҙылтүш. Ҡашҡа. Азот. Бурһыҡ. Самауыр. Ритуал. Ырыкта. Арҡалыҡ. Ылаш. Ҡарһылыу. Бысҡы. Уҡыусы. Лайнер. Ҡуръяҡ. Уҡра.
**Вертикаль буйынса:** Иори. Конфетти. Шыршы. Триада. Аллея. Аҡса. Лифт. Кәмә. Дарман. Рапат. Айырымлыҡ. Старт. Рашҡы. Кәнфит. Приз. Ураҡ. Сана. Ярамһаҡ. Ылыу. Тавтология. Трал. Төркөм. Алдыҡ. Утырма. Ағас. Ыҫмала. Туғыҙ. Төркөм. Алдыҡ. Ағас. Ыҫмала. Туғыҙ. Нектар. Ылымыҡ. Ореол. Риал. Төпкөл. Драгун. Шарлыҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия
**13 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**19 ғинуар "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А.Островский), драма

### Милли йәштәр театры

**17 ғинуар "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М.Кәрим), хәтер йомғаҡтарын һүткәндә
**18 ғинуар "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа!"** (Ф.Бүләков), фольклор комедия

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Ғинуар | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14, дүшәмбе | 9:04 | 10:34 | 14:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 15, шишәмбе | 9:03 | 10:33 | 14:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 16, шаршамбы | 9:02 | 10:32 | 14:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 17, кесе йома | 9:00 | 10:30 | 14:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 18, йома | 8:59 | 10:29 | 14:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |
| 19, шәмбе | 8:58 | 10:28 | 14:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |
| 20, йәкшәмбе | 8:57 | 10:27 | 14:30 | 16:58 | 18:28 | 19:58 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# КҮРЕНЕКЛЕ ШӘХЕСТӘРҘЕҢ... тыуған йылы ғына була



**Зәйнәб Биишева. Йырҙарында ҡояштың илаһи балҡышын, айҙың серле һағышын, Эйек буйҙарының сихри хозурлығын данлаған шағирә. Яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеренә үҙе лә инанған, уҡыусыларын да ышандыра алған, киләсәк кешеһен камил, ғәҙел, гүзәл итеп күрергә хыялланған яҙыусы. Күңелгә шифалы моң булып ағылырлыҡ әҫәрҙәр тыуҙырған әҙибә. Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Шәреҡ донъяһында беренсе трилогия ижад иткән ҡатын-ҡыҙ яҙыусы.**

Йәш быуын халҡыбыҙҙың бөйөк яҙыусыһы З. Биишеваны уның әҫәрҙәре аша белә. Уның тормош юлы, ижады йәш быуын өсөн айырыуса фәһемле, үҙе бер ҡаһарманлыҡ өлгөһө. Шуға ла һәр башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы яҙыусы әҫәрҙәре ярҙамында тәрбиә эше алып барыуҙы, уның әҫәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуға өлгәшеүҙе оло ҡаҙанышы тип баһалай. Бына әле лә Күгәрсен район мәғариф бүлеге мәктәптәр коллективтарына күренекле яҡташыбыҙҙың тыуыуына 105 йыл тулыуын лайыҡлы билдәләү бурысын йөкмәтте, алдан саралар планы эшләнде. Райондың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында "Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З.Биишеваға 105 йыл тулыу айҡанлы иң яҡшы дәрес һәм кластан тыш саралар" конкурсы ойошторолдо. Уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәте, тарих, мәҙәниәт, йыр, рәсем дәрестәрендә З. Биишеваның тормош юлына һәм ижадына байҡау яһаны, шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы өйрәнде, әҫәрҙәренән өҙөктәр сәхнәләштерҙе, Туйымбәт ауылындағы З.Биишева исемендәге музейға сәйәхәт ҡылды. Шулай уҡ 9-11 класс уҡыусылары араһында "Биишева уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғарылды һәм яҡын киләсәктә был конференцияны республика кимәленә күтәрербеҙ, тигән ышаныстабыҙ. Сөнки йыл һайын республика кимәлендә шаулап-гөрләп "Кейекбаев уҡыуҙары", "Вәлиди уҡыуҙары" уҙғарыла, ә ни өсөн "Биишева уҡыуҙары" үтмәҫкә тейеш әле?

Яңы йыл байрамы алдынан З.Биишеваның әҫәрҙәренән өҙөктәр сәхнәләштереүҙе район кимәлендәге бәйгегә әүерелдереү әҙибәгә арналған сараларҙың матур һығымтаһы булды. Көн һыуығына ҡарамай, бөтәһе 21 мәктәп командаһы ҡатнашты унда. Уҡыусылар "Кәмһетелгәндәр" романынан, "Серле ҡурай", "Ел-ел арбам" әкиәттәренән, "Дуҫ булайыҡ", "Гөльямал" повестарынан, "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәте, "Гөлбәҙәр" драма әҫәрҙәренән өҙөктәр сәхнәләштергәйне. Шуныһы ҡыуаныслы, уҡыусылар менән бергә уҡытыусылар ҙа был тамашаларҙа ихлас ҡатнашты, илатты ла, көлдөрҙө лә. Өҙөктәрҙә ҡатнашҡан балалар ҙа, уларҙы тамаша ҡылыусылар ҙа был сәхнә күренештәре аша башҡорт халҡының характерын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, байрамдарын, төрлө уйындарын күңеленә һеңдерҙе.

Күренекле шәхестәрҙең тыуған йылы ғына була. Уларҙың үлгән йылы булмай. Сөнки улар тереләрҙән тере булып, киләсәккә күсә. Зәйнәб Биишева шундай тоҡомдан. Ғүмеренә сик ҡуйған йылдан алыҫлашҡан һайын, ул тererәк була барғандай, йәшәүенең, ижади эшмәкәрлегенең мәғәнәһе тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә һымаҡ.

*Һинең тормош- матур тарих,*
*Еңел яҙмыш йәшәмәнең - беләм.*
*Бар халҡымдың исеменән,*
*Ил инәһе, Һиңә баш эйәм!*

**Фәһимә СИТДИҠОВА.**

✓ *Бер минут эсендә ғүмерелдә юғалтҡансы, бер минут ғүмереңдә юғалтыу яҡшыраҡ.*

*(Уругвай мәҡәлә).*



ИЛ ТЕЛЕ

# КЕМГӘ - СӘХНӘ...

## кемгә - әкиәт



**Гәзит-журналдарҙың яңы йыл һандары, интернет сайттары беҙ киноэкрандарҙан ғына күреп-белгән һәм һоҡланған билдәле француз актеры Жерар Депардьеның фотоһүрәттәре менән сыбарланды.**

Бына бер кадрҙа уны Мордовияла милли костюмдарҙа, йырлап-бейеп, икмәк-тоҙ менән самолеттан ҡаршылайҙар; икенсе кадрҙа ул Рәсәй Президенты В.Путин менән дуҫтарса йылы ҡосаҡлашып күрешә; өсөнсөһөндә актер әлеге милли кейемдә быйма ҡосаҡлап, үҙ исеменә тултырылған Рәсәй паспортын күрһәтеп, ҡәнәғәт йылмая...

Эйе шул, нинә ҡәнәғәт булмаҫҡа: әкиәттәгесә байыу йә булмаһа байлыкты түкмәй-сәсмәй генә сит ил банкыларына "шылдырыу" өсөн киң күнелле Рәсәйҙәге кеүек идеаль шарттар башҡа бер илдә лә юҡтыр ул. Әле бына Франция властары йылына 1 млн. евро килеме булған байҙарға оҙаҡ уйлап та тормай 75(!) процент күләмендә һалым сәпәргә йәтешләп торғанда ғына француз Жерар ҙа, күп уйлап-нитеп тормаҫтан, ҡапылда рәсәйлегә әүерелергә ҡарар итә лә ҡуя. Бәхеткәме, бәхетһеҙлеккәме - Францияның Конституция суды былдай ҡарарҙың законһыҙ булыуын танып, кире ҡаҡҡас, закон ҡабул ителмәй ҡалды. Ләкин... был мәлгә Жерар "урыҫка" өйләнгәйне инде. Хәҙер ул бөтәнөһөн дә, мин барыбер француз бит ул, тип ышандырырға тырыша, ти. Тик бөйөк француз бер ҙә иленә ашыҡмай әле, бәлки, Бельгия (унда актерҙын күсемһеҙ милке бар), ә, бәлки, Черногория (унда, күрәһең, шарап етештереү эшмәкәрлеге буйынса дуҫтары барҙыр) граждандығы ла алырмын, тип тә әйткеләп ҡуя икән. Эйе лә баһа, үҙ илендә ни ҡалған уға? Унда уны иҫерек килеш транспорт йөртөкәнә өсөн суд ултырышы ғына көтә.

Ә Рәсәйҙә бит йәнгә рәхәт - ни ҡыланһаң да, һине эҙәрлекләүсе юҡ. Ана, ышанмаһағыҙ, Толик Сердюковты ҡарағыҙ: ил ҡаҙнаһындағы миллиардтар менән үҙ белдегенсә эш итеп, әкиәттәге кеүек байыны ла, рәхәтләнеп тик ята. Рәхәткә юл бер асылһа, асыла бит ул: Депардьеның артынса Рәсәй граждандығы алырға икенсе бер билдәле француз актрисаһы - Брижит Бардо ла атлығып тора, тиҙәр. Ул иһә Лион цирҡындағы ике сирле филде яҡлап, Франция властарына протест белдермәксе икән. Туҡтағыҙ әле: ни булып китте донъяларға? Америка менән арала ҡуптан ығы-зығы баҫылып өлгөрмәне, хәҙер инде - Франция? Сәйәси сәхнәләге сираттағы спектаклме был, әллә актерҙар тормошта ла актер булып уйнай ғынамы?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

### КҮРӘГӘЛЕ БӘЛЕШ

**Ҡамыр өсөн: 1-1,5 стакан он, 1 балғалаҡ сүпрә, 6 йомортҡа, 200 г аҡ май, 1 стакан шәкәр, 0,5 л һөт, тоҙ.**

**Эслек өсөн: 600 г күрәгә, уға повидло йәки бал өҫтәргә мөмкин.**

Сүпрәне йылымыс һөткә һалып, күперел сыҡҡанын көтөргә. Йомортҡаны туҡып, уға һөттө өҫтәргә, йомшартылған май, шәкәр, тоҙ, он һалып, йомшаҡ ҡамыр баҫырға. 3-4 сәғәткә йылы урынға ҡуйып, ҡабартырға. Был ваҡыт эсендә күрәгәне йыуып, ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут тотабыҙ. Һыуынан ваҡ итеп турап, бал йә повидло өҫтәргә. Күрәгәне аҙ ғына һыу өҫтәп, талғын утта бешереп алһаң, тағы ла яҡшыраҡ. Ҡамырҙы йәйеп, аҫҡы өлөшөнә эслекте тигеҙ итеп һалғас, өҫтөн ябып, ситтәрен матур итеп биҙәкләп тоташтырырға. Йылы урында бәлеш күтәрелгәнсе тоторға һәм духовкала 200 С температураһында 40-45 минут бешерергә. Эҫе бәлеште йомортҡа һарыһы менән майларға була.

### КӨЛСӘ

**500 г он, 250 л һөт, 50 г аҡ май, тәменсә тоҙ.**

1-се вариант. Эсе ҡамырҙы 1 см ҡалынлығында түнәрәтеп йәйеп, ҡайнаған майлы табаға һалырға һәм мейестәге ҡуҙҙа бешереп алырға. Табынға эҫе көйөнсә бирергә.

2-се вариант. Алда күрһәтелгән ризыҡтарҙан сөсө ҡамыр баҫырға, 0,3-0,4 см ҡалынлығында йәйергә, ҡоро табала бешерергә. Әҙер көлсәне майларға. Сәй табынына, шулай уҡ ҡатыҡ, ҡаймаҡ менән бергә бирергә була.

ЯҢЫ КИТАП

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...

## кейеме һәм аш-һыуы тураһында




**Ошо көндәрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә башҡорт халҡының тормошо өйрәнелгән ике ғилми хеҙмәт донъя күрҙе.**

Тәүгеһе - техник фәндәре кандидаты Айгөл Камалиева әҙерләгән китап "Башҡорт костюмы" (Башкирский костюм. Технология. Конструкция. Декор) тип атала. Ғилми баҫманың йөкмәткеһе музей һәм шәхси башҡорт халыҡ кейемдәренең 200-гә яҡын коллекцияһын өйрәнеү нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Туғыҙ бүлектән торған китапҡа башҡорт халыҡ кейемдәренең этник дизайны, төбәк үҙенсәлектәре, конструктив-композицион төҙөлөшө, тегеү технологияһы, декорҙың килеп сығышы һәм мәғәнәһе тураһындағы мәғлүмәттәр тупланған.

Тәүге тапҡыр был хеҙмәттә кейемдәрҙең үлсәмдәре бирелә. Халыҡтың донъяға ҡарашы, тарихы аша кейемдәрҙәге орнаменттарҙың барлыҡҡа килеүе асыҡлана. Боронғо кейемдәрҙәге үҙенсәлектәрҙең бөгөнгө көн кейемдәрендә сағылышы күргәҙмә материалдар - ҡурсаҡтар коллекцияһында һүрәтләнә.

Тарих фәндәре кандидаты Эльза Миһранова әҙерләгән "Башҡорттар" (Башкиры. Традиционная система питания: Историко-этнографическое исследование) тип аталған ғилми хеҙмәттең йөкмәткеһе башҡорттарҙың аш-һыу йолалары тураһында тарихи һәм этнографик эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Ҙур күләмле монография биш бүлектән тора. Архивта һаҡланған этнографик, фольклор материалдары нигеҙендә башҡорт халҡының көнкүреше, хужалыҡ тормошо, мәҙәни йәшәйеше бәйән ителә, шулай уҡ байрам йолаларына ҙур иғтибар бүленә. Боронғо башҡорттарҙың аш-һыу йолаларының үҫеш эволюцияһы күҙәтелә, уның тәбиғи, иҡтисади, тарихи, дини, этногенетик, мәҙәни факторҙары аша үҙенсәлектәре асыҡлана. Башҡорт халҡының башҡа халыҡтар менән этномәҙәни бәйләнеше аш-һыу үҙенсәлектәре аша күҙәтелә. Баҫма иллюстрациялар бай, архив һәм музей материалдары, этнографик фотоһүрәттәр, карта, схема, таблицалар менән тулыландырылған.

Бай йөкмәткеле ғилми хеҙмәттәр башҡорт халҡының мәҙәниәте, йолалары менән ҡыҙыҡһыныусылар, тарихсылар, этнографтар, башҡорт теле, тарих уҡытыусылары, студенттар - ғөмүмән, киң ҡатлам уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән. Нәшриәттең фирма магазиндарына һәм интернет- кибеткә электрон вариантта һатыуға сығарылған.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕҘ ЭЛЕК ТЫУҒАН...

## хәҙергеләр белеп тыуған

Ҡар башына ҡар етер, бей башына бей етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Битарафлыҡ - йәндең иң ауыр сире.

**(Алексис Токвель).**

Әгәр ҙә кемдер табандарыңды яларға итһә, тешләшә башламаҫ элек уны аяғың менән тибеп ебәр.

**(Поль Валери).**

Белгән нәмәне генә яратырға мөмкин.

**(Леонардо да Винчи).**

Һәр яуызлыҡ көсһеҙлектән килеп сыға.

**(Жан-Жак Руссо).**

Дошманың менән үбешеүгә ҡарағанда дуҫың менән һуғышыуың артыҡ.

**(Шолом-Алейхем).**

Үҙен яҡшы тотҡан кешене танырға? Яуызлыҡҡа түҙемле мөнәсәбәте аша.

**(Соломон ибн-Габирол).**

Бер минут эсендә ғүмереңде юғалтҡансы, бер минут ғүмереңде юғалтыу яҡшыраҡ.

**(Уругвай мәҡәле).**

Факттар фәнендә ялған булған нәмә тормош фәнендә хәҡиҡәт булыуы бар.

**(Сантаяна).**

Аҡыллы йөҙ менән ахмаҡ эштәр эшләгән мәлдә һинең түбәнгә тәгәрәүең башлана ла инде.

**(Ханс Мозер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер күл өҫтөнән самолет осоп бара. Ундағы летчиктарҙың береһе икенсеһенә былай ти:**

**- Күрәһеңме, ниндәй матур күл! Ошо күлдән йыраҡ түгел минең тыуған ауылым урынлашҡан. Бала сағым шул ауылда үтте. Мин йыш ҡына ошо күлгә балыҡ ҡармаҡларға килә инем. Балыҡ ҡармаҡлау минең иң яратҡан шөғөлөм булды. Шул саҡта баш осонан гел генә самолеттар осоп уҙа ине. Мин һәр ваҡыт тиҙерәк үҫеп етергә һәм летчик булып, ошо күл, тыуған ауылым өҫтөнән самолетта осоп үтергә хыялландым. Был минең берҙән-бер хыялым ине. Хәҙер инде ул тормошҡа ашты. Хәҙер инде мин самолетта осоп барған килеш оло һағыш һәм һоҡланыу менән ошо күл өҫтөнә бағам һәм ҡартлығымды, ошонда ҡайтып төйәкләнеп, балыҡ тотоп үткәрергә хыялланам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5489
Заказ 62